ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

2-8 ғинуар (һыуығай) 2016

№ 1 (679)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Исеменде...**

ташҡа яҙыу гәҙәтенде ҡуйсы әле...



6-7

**Маймыл йылында...**

кеше булып ҡалайыҡ



8-9

**Күрһәт әле, дуҫҡайым,**

ниндәй тәрбиә алаһың?



11

**Ашау өсөн йәшәмәгеҙ,**

йәшәү өсөн ашағыҙ



12

**ТВ-программа** 14

***Яҡшылыҡ менән яманлыҡ бер булмаç. Яманлыҡты игелегең менән баç. Ул саҡта һинең дошман күреп йөрөгән кешең дә дуçың кеүек яҡын була башлар, арағыҙҙа дошманлыҡ бөтөр, дуç булып ҡалырһығыҙ. Был сифаттар сабыр кешеләргә бирелә.***

***"Мосолман шәхесе" китабынан.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ҡайһы арала хеҙмәттең баһаһы төшөп, беҙ эшләмәçкә өйрәндек?

***Зәки ХАММАТОВ, иҡтисад фәндәре кандидаты:*** Элек, совет власы йылдарында, эшләмәгән кеше булманы, тиерлек. Хатта ғәриптәрҙең дә күбеһе эшләне. Мәçәлән, аяҡһыҙ инвалидтар көнкүреш йорттарында, һәр төрлө оçтаханаларҙа аяҡ кейемдәре, сәғәт һ.б. ремонтлап ултырҙы, һәр саҡ эш өçтөндә инеләр. Улар ғына түгел, хатта бит күреү һәләтен юғалтҡан ғәриптәр ҙә тик ултырманы: һуҡырҙарҙың үҙ предприятиелары була торғайны, улар производствола кәрәкле ваҡ деталдәр, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары эшләп сығара инеләр. Ул осор әрәмтамаҡлыҡҡа ҡаршы көрәш алып барылғанға күрә, йә булмаһа, аҡса өсөн дә, бәлки, түгелдер, ә йөрәк, намыç ҡушыуы буйынса эшләнеләр. Өйҙә ултырыуҙың ҡыҙығын, мәғәнәһен тапмағанға күрә. Коллективлыҡ тойғоһо көслө булды шул. Бер-беребеҙ менән аралашып, бөрәү - бөтәһе, бөтәһе бөрәү өсөн тип йәшәнек. Хәҙер, үкенескә ҡаршы, һәр кем үҙенә бикләнә бара. Эшһеҙлек тә ғәҙәти бер хәлгә әйләнде. Баҙар иҡтисадына күсеү осоронда эшһеҙлек була торған нәмә, ләкин беҙ хәҙер ул шарттарға күнегә лә төштөк, үҙ хәлебеҙҙе үҙебеҙ көйләрлек мәлгә лә еттек, буғай. Теләге бар кеше эшләй, аҡса таба, ғаиләһен аçырай. Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәре лә мәшғүллеккә ярайһы булышлыҡ итә. Тик барыбер эшһеҙҙәр күп, айырыуса ауыл ерендә эшләмәçкә өйрәнеп алдылар. Шул арҡала эскелек көсәйҙе. Йәмғәтселекте уятып ебәргәндәй итте лә, "Айыҡ ауыл" хәрәкәте лә ниңәлер һүрелеп ҡалды.

Ауыл кешеһе эшләмәй түгел, эшләй ул. Улар бот күтәреп ятһа, магазин, баҙар тулы ит, һөт, май-ҡаймаҡ, икмәк, йәшелсә-емеш ҡайҙан хасил булыр ине? Тимәк, эшләй халыҡ, тик бөтөнөһө лә түгел. Ауылда мал көтөргә көтөүсе юҡ, ә сит-ят ергә "оҙон" аҡса артынан сығып китергә ризалар. Ниәттәре изге, уларҙы бының өсөн әрләп тә булмай. Тик бына тәпәй баçҡан, кендек ҡандары тамған ерҙәренең етемһерәп ятыуы бик эсте бошора. Ергә ашатыусыбыҙ ҙа, кейендереүсебеҙ ҙә тип ҡарай торғайны элек крәçтиән, ана шул сылбыр өҙөлдө. Ергә эйелгәндәр һирәк бөгөн. Был хаҡта ил Президенты үҙ Мөрәжәғәтнамәһендә айырым-асыҡ әйтеп китте. Миллионлаған һөрөнтө ер буш ята, тәғәйенләнеше буйынса ҡулланмаған намыçһыҙ эре ер хужаларынан ауыл хужалығы ерҙәрен тартып алырға кәрәк, тине ул. Ергә хужа булыу ғына етмәй, уны әйләнешкә индереү мөһим, йәғни эшкәртергә, сәсергә, үçтерергә, уңышын йыйып алырға. Ауыл халҡы коллектив һәм фермерҙар хужалыҡтарына ойошоп, продукция етештереп йәшәй алыр ине, әлбиттә, тик бына тап шул юлда барып төртөлә лә инде эшҡыуарҙар һәр төрлө "һыу аçты таштары"на. Улар өсөн бит тейешле эш шарттары булдырыу кәрәк. Эшһеҙлек сәбәптәренең күбеһендә бөгөн үҙ эшен булдырырға теләгән әүҙем кешеләрҙең юлында осрап торған кәртәләр, бюрократик ҡаршылыҡтар ҙа ғәйепле, тип әйтмәксемен.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҠЫШ БАБАЙ САҠЫРА

# ИШЕМБАЙҒА КИЛЕГЕҘ!

**Бик матур байрам идеяһы уйлап тапты Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты. Башҡортостанда Ҡыш бабайҙың ҡунаҡ тирмәһен булдырыу буйынса конкурс ойоштороҙо, бәйгелә бәхетле билет Ишембай районының Урман-Бишҡаҙаҡ ауылына эләкте. Бер ай эсендә Торатау буйында Ҡыш бабайҙың ҡунаҡ тирмәһен һәм Яңы йыл шыршыһын ҡороп, биҙәп тә ҡуйҙылар. Бында Яңы йыл каникулдары ваҡытында Ҡыш бабай һәм уның ярҙамсылары килеүсе ҡунаҡтарҙың күңелен асасаҡ. Хәбәр итеүҙәренсә, республика туроператорҙары әҙерләгән төрлө туристик маршруттар исемлегендә Өфөнән Ишембайға Ҡыш бабайҙың тирмәһенә барыу ҙа ҡаралған. Шулай булғас, әйҙәгеҙ, Торатау буйындағы шыршы байрамына, тип саҡырырға ғына ҡала!**



12+

✓ Күпләп мал, ҡош-ҡорт үрсетәләр. Таштуғайҙа, мәҫәлән, 70-ләп баш һарыҡ аҫыраған ғаиләләр бар. Иң кәм тигәнендә лә ваҡ мал 30-40-лап башҡа барып баҫа. Үҙегеҙгә мәғлүм, мал көткәс, эшләмәй ятып булмай.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ЙӘЛЛӘЙЕМ...

## гәзит уҡымай үҫкән йәштәрҙе

**Беҙҙең быуын кешеләре элек-электән гәзит-журналдарҙы яратып уҡыны. Ауылдағы һәр ғаилә башҡортса сыҡҡан барлыҡ баҫма матбуғатты алдырып уҡый торғайны, тиһәң дә була. Хатта бер-беребеҙҙең уҡып бөткәнен түҙемһеҙлек менән көтөп ала инек. "Ағиҙел" журналын яҫтыҡ аҫтына йәшереп уҡығандары әле лә хәтеремдә. Мәктәп йәшендәге балалар ҙа "Пионер" журналын һәм гәзитен энәһенән-ебенә хәтлем уҡый торғайнылар.**

Хәҙер ул заманаларҙы һағынып иҫкә төшөрәһе генә ҡалды инде. Илдәге донъя хәлдәре үҙгәреп, бер-бер артлы көрсөктәр булып торғас, күп кеше гәзит-журналдар алып уҡыуҙан мәхрүм ҡалды. Күпме йәштәр гәзит-журналдарһыҙ үҫте. Әлеге ваҡытта ауылда гәзит алдырып уҡыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Беҙ, оло быуын кешеләре, матбуғат баҫмаларын уҡымай үҫкән йәштәрҙе йәлләйбеҙ. Гәзит уҡымағас, китап та уҡымайҙар. Әммә донъялар гел былай ғына тормаҫ, Алла бирһә, бер заман көрсөктәрҙән сығырбыҙ. Тик ул тиҙерәк етһен өсөн йәштәребеҙ иманлы һәм белемле булырға тейеш. Ғалимыбыҙ Ғайса Хөсәйенов әйтеүенсә, китап уҡымаған кеше - кипкән үлән. Ана шул йәшәү һутын беҙ матбуғат баҫмаларынан алабыҙ ҙа инде. Шулай булғас, милләттәштәрем, республикабыҙҙа сыҡҡан гәзит-журналдарҙы алдырайыҡ, таратайыҡ, тип әйтмәксемен.

Ә инде "Киске Өфө" гәзитенә килгәндә, беҙ уны бөтәбеҙ ҙә яратып уҡыйбыҙ. Беҙҙең урамда ул таушалып бөткәнсә ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыла. Ошо вайымһыҙлыҡ баҫҡан осорҙа ул беҙгә яңы һулыш бирә, йәшәргә өмөт уята, дәрт өҫтәй. Ҡайһы ғына рубрикаһын уҡыһаң да, үҙең өсөн яңылыҡтар алаһың, файҙалы кәңәштәр табаһың. Беҙ, оло быуын кешеләре, бигерәк тә иман тураһындағы мәҡәләләрҙе яратып уҡыйбыҙ. Сөнки беҙҙең атай-әсәйҙәребеҙ ысын мәғәнәһендә иманлы булып йәшәне. "Киске Өфө" гәзитенең йөкмәткеһе буйынса теләктәргә килгәндә, ана шул иманлы, дини тәрбиә тураһында, милли рухты күтәреү тураһында мәҡәләләрҙе күберәк баҫтырһағыҙ ине.

**Ынйыбикә КҮСӘЕВА.**
**Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ҡайһы арала хеҙмәттең баһаһы төшөп, беҙ эшләмәҫкә өйрәндек?



**(Башы 1-се биттә).**

***Зәкирйән ӘМИНЕВ, философия фәндәре кандидаты:*** Эйе, совет заманында хеҙмәткә һәләтле күпселек халыҡ эшләне, һүҙ ҙә юҡ, сөнки ул йылдарҙа эшкә урынлашыу бөгөнгө һымаҡ проблема түгел ине. Әйтергә лә түгел, колхоз ҡырҙары ла хеҙмәт шауынан гөрләп торҙо, тик бына шуныһы эсте бошора ине: ул саҡ тигеҙләү принцибы хакимлыҡ итте. Йәғни эшләгәне лә, эшләмәгәне лә бер тигеҙ эш хаҡы алды. Бындай тигеҙләү иһә халыҡты боҙа, ялҡауландыра. Халыҡ хатта эшләргә түгел, уйларға ла йыбана башлай. Бына, мәҫәлән, сәсеүгә, иген урырға ҡасан төшөргә кәрәклекте лә, башҡаһын да "райком белә, райком ҡуша" ине. Колхоз-совхоздар бөткәйне, берәү ҙә үҙаллы ура-сәсә, мал үрсетә, аҙыҡ-түлек етештерә белмәй булып сыҡты. Кемдеңдер килеп фарман биререн, хәл итерен, эш биререн көтөп яттылар ошоға тиклем. Әле инде уныһынан да төңөлдөләр, ахыры, әммә үҙе белеп эшкә тотоноусылар бик һирәк. Хәҙер хатта өмәгә лә сыҡмаҫ булды халыҡ, береһен дә тыңлатып булмай. Ҡайһы бер әрәмтамаҡтар аҡса ялына ла хатта эшләргә теләмәй.

Мунса күтәргән саҡта үҙебеҙҙең егеттәрҙе ялланым. Тәүге көн бер ярты һорап эстеләр ҙә юҡҡа сыҡтылар. Үзбәктәрҙе ҡушырға тура килде. Бер нисә көндә дәррәү генә тотоноп, эште ослап та ҡуйҙылар. Шул саҡ мин: "Беҙҙә балаларҙы хеҙмәт менән тәрбиәләү тигән нәмә юҡҡа сығып бара бит", - тип уйлап әрненем. Үҙ ерендә эшләп өйрәнгән кешенең уға хужалыҡ тойғоһо ла була. Ни өсөн бөгөн ер-һыуыбыҙҙың таралып, ҡый баҫып ятыуына битарафбыҙ, сөнки беҙҙә хужа булыу тойғоһо юҡ, сөнки улар был ер өсөн, уны яулау һәм һаҡлау өсөн көс түкмәгән. Һуғышта ҡан ҡойған фронтовиктар быуыны китеп бөтөп бара, улар менән бергә ошо аҫабалыҡ тойғоһо ла китә, күрәһең. Ергә һөйөү тойғоһон ҡайтарыу өсөн балаларҙы хеҙмәткә өйрәтергә, ергә эйәлеп бил бөгөргә өйрәтергә кәрәк. Беҙҙең быуын 10-12 йәштән атай-әсәйҙәргә ярҙам итеп, ҡыр, бесән эштәрендә уларға ярҙамлашып үҫте. Әлеге йәштәрҙе ҡартайғансы бәпләп тоталар ҙа, уларҙың эш рәте белмәүенә, ялҡаулығына аптырайҙар.

***Миңзифа ИШЕМҒОЛОВА, Хәйбулла районының "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе:*** Ауылда, үҙегеҙ беләһегеҙ, матур итеп донъяһын ҡарап, мал-тыуар аҫыраған кешенең эше бөтөрлөк түгел. Беҙҙең "Ағинәйҙәр ҡоро"ноң боронғо кәсептәребеҙҙе тергеҙеү буйынса башлап ебәргән проекты тураһында "Киске Өфө" бер нисә тапҡыр яҙып сыҡты инде. Был проект районыбыҙҙа икенсе йыл ғына эшләүенә ҡарамаҫтан, бик күп кешене йәлеп итте. Уның төп маҡсаты - мал аҫырау, унан продукция алыу һәм уны тәмле, туҡлыҡлы ризыҡ итеп әҙерләй белеү серҙәрен, донъя көтөү, йорт-ҡура төҙөү, ҡул оҫталығы талап иткән эштәрҙе иҫкә төшөрөп, халҡыбыҙҙың онотола барған кәсептәрен тергеҙеү, уны йәштәргә өйрәтеү. Бөтә был сараларҙы үткәргәндә, ағинәйҙәр "Азаматтар" ир-егеттәр клубтары ағзаларын, шулай уҡ балаларҙы йәлеп итә. Был йәштәрҙе теге йәки был һөнәр серҙәренә өйрәтеүҙә ныҡ ярҙам итә. Мәҫәлән, Туратта үткәрелгән ситән үреү байрамына әҙерлек алдан уҡ башланды, сөнки ир-егеттәр балалар менән бергә тал ҡырҡып, уны әҙерләү эше менән мәшғүл булды. Ауыл ерендә даими башҡарыла торған күп эш төрҙәрен йәштәр хәҙер бик белеп тә бөтмәй бит. Шуға күрә, "Һыйлы көнөң - һыйырҙа" тип аталған, шулай уҡ һарыҡ ҡырҡыу, ҡорот ҡайнатыу, кейеҙ баҫыу, шәл, балаҫ һуғыу, балсыҡ баҫып, кирбес һуғыу, мейес сығарыу һәм башҡа шуның кеүек бик күп байрамдар, күрһәтмә өмәләр үткәреүҙең тәрбиәүи әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ, тип уйлайым. Бындай сараларҙы ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәре генә үткәрмәй, унда ир-егеттәр, балалар ҙа бик ихлас ҡатнаша. Ҡулы оҫта ир-егеттәр ҙә күп беҙҙә. Байрамдарҙа улар ағастан һырлап эшләгән сувенир, һандыҡ, мебель әйберҙәрен күргәҙмәгә ҡуя, һата йә беҙ уларҙы конкурс еңеүселәренә бүләк итәбеҙ. Ауыл ерендә йәшәп, эшләмәй ятыуҙы күҙ алдына ла килтереп булмай, халыҡ уңған беҙҙә. Күпләп мал, ҡош-ҡорт үрсетәләр. Таштуғайҙа, мәҫәлән, 70-ләп баш һарыҡ аҫыраған ғаиләләр бар. Иң кәм тигәнендә лә ваҡ мал 30-40-лап башҡа барып баҫа. Үҙегеҙгә мәғлүм, мал көткәс, эшләмәй ятып булмай. Вәзәмдә теплицалар ҡороп, йәшелсә үҫтереүселәр күп. Уныһы ла ҙур эш. Ауылдарҙа күмәк хужалыҡтар булмаған ерҙә ана шулай үҙ көндәрен күреп тырышып яталар...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ХЫЯЛЛАНЫУҘАН ТУҠТАМАЙЫҠ!

Шул хәҡиҡәтте онотмайыҡ әле: хыяллан һәм уны ныҡышмалы тормошҡа ашыр. Юҡһа, бер риүәйәттәгесә булмаһын: "Бер кеше лотереяға ҙур отош алыу тураһында хыялланып, ошо хыялын бойомға ашырыуын һорап, көнө-төнө Хоҙай Тәғәләгә ялбара, ти. Әҙәмдәрҙең теләк-үтенестәрен Хоҙайға илтеп тапшыра йөрөүсе фәрештәләр был хыялбайҙан шул тиклем ялыҡҡан да, Хоҙайҙы үҙҙәре үк шулай тип өгөтләй икән:"Йә, Раббыбыҙ, был кешенең көн-төн хыялланып, һеҙгә ялыныуынан тамам биҙрәнек, ул башҡаларҙың теләген ишетергә, тыңларға ҡамасаулай беҙгә. Оттор инде шул хыялбайға бер нәмә..." "Бик отторор инем дә, - тигән Хоҙай, - ул бит һаман да лотерея һатып алмай..."

Шуның һымаҡ, ҡулдар ҡаушырылмаһа, беләктә - көс, аяҡтарҙа - хәрәкәт, иңдәрҙә хыял ҡанаттары булһа, фәрештәләр был хаҡта Хоҙайға еткерә йөрөр. Фәрештәләрҙең беҙҙең ҡолаҡтарға көн-төн бышылдап торған уңыш сере ошо: "Һора - бирерҙәр, эҙлә - табырһың, ишек ҡаҡ - асырҙар. Һораған һәр берәү ала, эҙләгән һәр кем таба, ишек ҡаҡҡанға асалар". Был хаҡта Ҡөрьән-Кәримдә лә, Тәүратта ла яҙылған. Беҙ йыш ҡына ишекте оҙаҡ ҡағып торорға, йә оҙаҡ эҙләргә теләмәйбеҙ. Беҙ үҙебеҙ теләгәнде тиҙ һәм бер ниндәй көсәнеүһеҙ алырға теләйбеҙ. Шуға ла бер нәмә лә ала алмайбыҙ. Фәрештәләр әйткәнде шулай аңлайым үҙем. Улар кәңәшенә ҡушылып, ошо юлдарҙы уҡыусыға шуны әйтәм: хыяллан һәм хыялыңды атҡарыу юлын эҙлә. Уңыштар һиңә!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓2015 йылда республика яҡшы макроиҡтисади күрһәткестәргә өлгәште. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Дәүләт советы ултырышы йомғаҡтары буйынса журналистар менән аралашыуҙа белдерҙе. "Йыл йомғаҡтарына килгәндә, социаль тотороҡлоҡ, халыҡтың килеме беҙҙең өсөн иң мөһим күрһәткес булып тора. Беҙ һәйбәт һәм ҡайһы бер йүнәлештәр буйынса лайыҡлы макроиҡтисади күрһәткестәр хаҡында һөйләй алабыҙ, - тине республика етәксеһе. - Әммә микрокүрһәткестәр араһында 2016 йылда хәлдең яҡшырыуын талап иткән позициялар ҙа бар. Был халыҡтың хеҙмәт хаҡын, килемен арттырыуға ҡағыла".

✓Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведевтың ҡарары менән 2016 йылдың 1 ғинуарынан Төркиә граждандарын эшкә алырға рөхсәт ителгән эш биреүселәр исемлеге раҫланды. Уға Рәсәйҙең 13 төбәгенән 53 компания ингән. Исемлектә Башҡортостан, Ҡырым, Татарстан республикаларында, Краснодар крайында, Владимир, Калуга, Мәскәү, Нижегород, Һамар һәм Төмән өлкәләрендә, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Ямал-Ненец автономиялы округында урынлашҡан компания һәм ойошмалар бар. Был ойошмалар төҙөлөш, автомобилдәр эшләү, төҙөлөш материалдары, полимер торбалар, сантехника ҡорамалдары етештереү өлкәһендә эшләй.

✓Башҡортостанстатта былтырғы йыл аҙағында социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлектең ҡайһы бер төрҙәренә хаҡтарҙың үҙгәреүен иҫәпләп сығарҙылар. Тауыҡ йомортҡаһы (10 дана йомортҡаның хаҡы - 61,62 һум), алма (бер килограмы - 76,38), ҡарабойҙай (59,28) 3 процентҡа, аҡ күсәнле кәбеҫтә (22,12) - 2,1, башлы һуған (22,29) - 1,5, кишер (24,04) 1,2 процентҡа артҡан. Һыйыр итенә (310,57) һәм бойҙай онона (30,25) хаҡтар үҙгәрмәгән. Дөгөгә, тары ярмаһына, арыш икмәгенә, аҡ майға хаҡтар үҙгәрмәгән тиерлек. Пастеризацияланған һөт 0,6 процентҡа, стерилләнгән һөт - 0,5, аш тоҙо, шәкәр ҡомо һәм туңдырылған балыҡ 0,4 процентҡа арзанайған.

✓Был юлы ла Өфөлә Яңы йыл байрамы алдынан торлаҡ-коммуналь хужалыҡ ойошмалары тарафынан ихаталар биҙәлде, байрамға әҙерләнде. 40-тан ашыу хоккей майҙансығы өсөн боҙ ҡатырылды, 68 майҙанда шыршы биҙәлде, 68 боҙ майҙансығы төҙөкләндерелде. Был эштәрҙең барыһы ла махсус үткәрелгән конкурста баһаланды.

БЫЛ АЙҘА...

**Яңы йылдың тәүге айына аяҡ баҫабыҙ. Хәйерле, имен булһын йылыбыҙ. Календарҙа Яңы йыл байрамы тип билдәләнгән ошо уҡ көн Бөтөн донъя тыныслыҡ көнө тип тә нарыҡланған. Берәй эш башлар алдынан бисмиллабыҙҙы әйтәбеҙ бит. Тыныслыҡ тыуаһы йылыбыҙҙың һәм, ғөмүмән, йәшәйешебеҙҙең дә бисмиллаһы булһын, тип теләйек.**

# ИЖАД ЯЛҠЫНЛЫ ШӘХЕСТӘР...

## һыуығайҙы һайлаған

Һыуығайҙың 1-10-ны - Яңы йыл каникулдары. Уҡыусы балаларҙыҡы ғына түгел, хеҙмәтсән халыҡтыҡы ла. Ошо оҙайлы ялдар күп кешегә тынғы бирмәй, әйтәгүр. Халыҡ самаһыҙ ашап-эсеп, әрәм булыр, ил иҡтисадына самаһыҙ зыян яһалыр, тип ҡурҡа В. Жириновский һәм уның фирҡәләштәре. Бөгөнгө хаҡтарға ҡарағанда, артыҡ ашап-эсеүгә әллә ни рәт булырмы икән ул, тейем дә... Гөрләп эшләп торған завод-фабрикаларыбыҙ ҙа элекке кеүек аҙым һайын түгел. Ә бына ит, һөт, башҡа төр продукция етештереүсе ауыл эшсәне, байрам, ял тип тормай, барыбер эшләй: каникул, тип, һыйыры һауылмай тормаҫ бит инде! Гәҙәттә, тиҙ генә сит ил тәжрибәһен иҫкә төшөрәләр. Әйткәндәй, бөтөн Европа һәм Азия илдәрендә лә, АҠШ һәм Канадала ла оҙайлы раштыуа каникулдары - ғәҙәти хәл. Тик уларҙа халыҡтың әүҙем ялы яҡшы ойошторолған. Улар сит илдәргә сыҡмайынса ла бына тигән ял итә: тауҙарға китә, саңғы спорты менән мауыға, махсус пансионаттарҙа туҡтап, ил буйлап сәйәхәт ҡыла, балаларын Диснейға йөрөтә - ҡыҫҡаһы, ялдарын ғаиләләре менән файҙалы итеп үткәреү өсөн бөтөн шарттары бар. Беҙҙең депутаттарға ла, бәлки, үҙ илебеҙҙә нисек итеп ғаилә ялдарын ойоштороу хаҡында уйларға кәрәктер? Тыйыуы еңел дә бит, ә бына ойоштороу һәр кемдең дә ҡулынан килмәй шул...

Әйткәндәй, тап шул көндәрҙә ғаилә менән ял өсөн сәбәптәре лә тыуып тора: илебеҙҙәге күп халыҡ Раштыуа (**7**) көнөн байрам итә, Бөтөн донъя балалар киноһы (**8**), Ҡурсаулыҡтар һәм милли парктар (**11**) көндәре билдәләнә. Шул ҡурсаулыҡтар буйлап аттарҙа ҡышҡы сәйәхәт ниндәй мауыҡтырғыс булыр ине! Быйыл республикабыҙ халҡы Торатауға, башҡорт Ҡыш бабайына ҡунаҡҡа йөрөйәсәк һәм унда ял ҡыҙыҡлы үтһен өсөн тейешле шарттар булдырылғандыр, тигән өмөттә ҡалайыҡ. Өлкәндәр ҙә, балалар ҙа Ҡыш бабайға рәхмәттәр әйтеп ҡайтып китерлек булһын! Бөтөн донъя "Рәхмәт" көнө (**11**) юҡҡа ғына булдырылмағандыр бит. Бер-беребеҙгә рәхмәттәр әйтерлек эштәр ҡылайыҡ, йәмәғәт.

Ай башында байрамдар мул булғанлыҡтанмылыр, Һыуығайҙың икенсе яртыһы тыныс, һил күренә. Рәсәй Матбуғаты һәм журналистикаһы (**13**) көндәренән һуң Бөтә Рәсәй студенттар көнө (**25**), унан Ленинград блокадаһын өҙөү көнө (**27**) билдәләнә.

Уның ҡарауы, йыл "иртәһе"ндә донъяға килгән талантлы һәм билдәле шәхестәребеҙ байтаҡ ҡына. Бына улар: **4 ғинуар** - БДУ профессоры, физика-математика фәндәре докторы **Хәйрулла Мортазинға** 75 йәш, **5** - Башҡортостандың халыҡ артисы **Сәүиә Сираеваға** 85 йәш, **7** - БДУ профессоры, тарих фәндәре докторы **Марат Ҡолшәриповҡа** 75 йәш, **8** - башҡорт мәғрифәтсеһе, ғалим һәм яҙыусы **Ғәли Соҡоройҙың** тыуыуына 190 йыл, шулай уҡ Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры йырсыһы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Светлана Арғынбаеваға** 50 йәш, **17** - яҙыусы **Урал Мостафинға** 65 йәш, **25** - шағирә Тамара Ғәниеваға 65 йәш, **27** - ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Азат Айытҡоловҡа** 60 йәш тула.



**Талантлы шәхестәр әҙәбиәт менән сәнғәт өлкәһендә генә тыумай, шуныһы ҡыуаныслы. Заманыбыҙҙың төп ыңғай билдәләренең береһе эшлекле мөхитебеҙҙә талантлы менеджерҙарҙың барлыҡҡа килеүе менән дә характерлана. "Булғадир булған, ай, Салауат егерме лә ике йәшендә..." тигән кеүек, ул да 22 генә йәшендә Өфө төҙөлөш тресында хеҙмәт юлын мастер, прораб булып башлай һәм ифрат та яуаплы, тынғыһыҙ өлкә - баш ҡалабыҙ хужалығы менән идара итеү эшенең бөтөн баҫҡыстарын үтеп, мәр вазифаһына тиклем үрләй. Һуҙ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ишмөхәмәт улы Ялалов тураһында барғанын аңлағанһығыҙҙыр. Ул етәкселек иткән ни бары 3-4 йыл эсендә баш ҡалабыҙ танығыһыҙ булып үҙгәрҙе, киңлеккә лә үҫте, юғарыға ла үрләне - Рәсәйҙә генә түгел, донъя аренаһына билдәле мегаполистарҙың береһенә әүерелде. Баш ҡалабыҙҙың социаль-иҡтисади үҫеш күрһәткестәре буйынса бойондороҡһоҙ рейтингтарҙа юғары баһаланып килеүе, миллионлы ҡалалар араһында йәшәү өсөн иң уңайлы ҡала булараҡ танылыуы, экологик рейтингтарҙа лидерлыҡты бирмәүе, быйылғы БРИКС һәм ШОС саммиттарына әҙерлек һәм уның уңышлы үтеүе - былар бөтәһе лә ҡала башлығының шәхси яуаплылығы, заманса менеджерлыҡ һәләттәре хаҡында һөйләүсе бер нисә генә факт. 27 ғинуарҙа Ирек Ялаловҡа 55 йәш тула. Был тап әлеге осраҡ: заманыбыҙ үҙенең аҫыл улдарының береһен юбилейы менән ҡотлап, уның фиҙаҡәр эшмәкәрлеген "бишле"ләргә генә баһалай. Тағы бер юғары баһа - ошо көндәрҙә РФ Президенты В. Путин указы менән баш ҡалабыҙ башлығы Дуҫлыҡ ордены менән наградланды. Ҡыш бабай ҡотлауҙарына беҙ ҙә ҡушылабыҙ һәм хөрмәтле Ирек Ишмөхәмәт улына тынғыһыҙ эшендә көс-ҡөҙрәт, ижад ялҡыны, сәләмәтлек теләйбеҙ!**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЯҠШЫЛЫҠ САҒЫЛЫШШЫ БУЛАЙЫҠ!

*Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА, яҙыусы һәм журналист:* Аллаһы Тәғәлә был донъяға бик күп халыҡтарҙы бар иткән, әммә шулар араһынан үҙенең бәҫен, дәрәжәһен, тамырын белгән һәм телен һаҡлаған милләттәр генә йотолмай, иҫән ҡалған. Халыҡ үҙенең тарихын белгәндә генә теле лә һаҡлана. Беҙ был донъяға Хоҙай тарафынан ниндәйҙер бер оло маҡсат өсөн, ниндәйҙер ҙур эштәр атҡарырға тип яратылғанбыҙ һәм шул ғәмәлдәр өсөн Уның алдында яуап бирәсәкбеҙ, тигән уйҙы күңелебеҙгә һеңдерһәк, үҙебеҙҙә көс табырбыҙ. Был йәһәттән йәһүд халҡынан өлгө алырға була. Улар үҙенең кем булыуын, тамырҙарын белгәнгә һәм балаларын бәләкәйҙән маҡсатлы итеп тәрбиәләгәнгә күрә, Ер йөҙөнөң ҡайһы төбәгендә йәшәһә лә уңышҡа өлгәшә ала.

Кеше тормошта үҙенә маҡсаттар ҡуйып һәм шуларға өлгәшеп йәшәргә өйрәнһен өсөн ата-әсәләргә балаһын һәр ваҡыт бәләкәй итеп күрергә теләп, уның урынына бөтәһен дә үҙҙәре эшләп йүгереп йөрөмәҫкә кәрәк. Тормошта кешегә ниндәйҙер уңыштар менән бергә һынауҙар ҙа бирелгән, улар холоҡто сыныҡтыра. Заман үҙгәрештәре менән бергә башҡорт халҡына төшкән һынауҙар ҙа, бәлки, беҙҙең рух ныҡлығын тикшереү өсөн генә бирелгәндер. Шуға беҙ берҙәм булырға һәм бер бөйөк маҡсат - халҡыбыҙҙың киләсәгенә хеҙмәт итеп йәшәргә тейешбеҙ. Быға өлгәшеү өсөн күп тә кәрәк түгел, бары тик һәр кем үҙ урынында эшен атҡарыуы, шунан рухи ҡәнәғәтлек кисереүе шарт.

Кешегә бик ҙур потенциал һалынған, күп төрлө талант бирелгән бит ул. Тәғәйенләнешебеҙҙе табып, шул юлда үҙебеҙҙе аямай эшләһәк кенә боронғо башҡорт халҡы әкиәттәрендәге батырҙар кеүек, һынауҙарҙы еңеп сығырбыҙ, маҡсатыбыҙға етербеҙ һәм яуызлыҡтың еңелеүен күрербеҙ. Үҙебеҙгә яҡшылыҡ сағылышшы булыуҙы, яуызлыҡҡа юл ҡуймай йәшәүҙе маҡсат итеү мөһим.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Башинформ" агентлығы 2015 йылда "Берҙәм Рәсәй"ҙең эшен яҡтыртыуға конкурс йомғаҡтары буйынса "Алтын сайт" тип танылды. Партияның төбәк бүлексәһе секретары, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев еңеүселәргә дипломдар һәм ҡиммәтле бүләктәр тапшырҙы. Башҡортостан юлдаш телеканалы, "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы, "Юлдаш", "Спутник FM" радиолары һәм башҡа киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре бүләктәр алды. "Реаль эштәр", "Балалар спорты", "Ныҡлы ғаилә" проекттарын яҡтыртҡан өсөн журналистар айырым бүләкләнде.

✓Декабрҙә баш ҡалала ВИЧ инфекцияһы йөрөткән 45, республикала 159 кеше асыҡланған. Йыл башынан Башҡортостанда 2902 ВИЧ-инфекциялы ауырыу асыҡланған, шуларҙың 1929-ы - ирҙәр (66,47 процент), 973-ө - ҡатын-ҡыҙҙар (33,53), 987 кеше үлгән. Әлеге ваҡытта 17 179 ВИЧ-инфекциялы иҫәптә тора, шуларҙың 9581-е -ҡалала, 5233-ө ауылда йәшәй, Федераль яза башҡарыу хеҙмәте учреждениеларында - 1802 кеше (10,4 процент), тәғәйен йәшәү урыны булмаған кешеләр - 563. Енси бәйләнеш - сир йоҡтороуҙың иң таралған юлы (61,3 процент). Икенсе урында - парентераль (37,8) һәм вертикаль юл (1,05). Башҡортостанда 100 мең кешегә 422,1 ВИЧ-инфекциялы тура килә, Волга буйы федераль округында - 550,3, Рәсәйҙә - 482,3.

✓Йыл аҙағында Өфөлә 50 күп балалы ҡатын-ҡыҙға "Әсәлек даны" миҙалы тапшырылды. "Беҙ 1998 йылдан алып күп балалы әсәләрҙе бүләкләйбеҙ, - тине Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов. - Бөгөнгә ете мең әсә бүләкләнгән. Һеҙҙең менән Яңы йыл алдынан осрашабыҙ. Өлкәнәйгән һайын Ҡыш бабайға һәм мөғжизәгә ышанаһың. Һеҙгә ҡарап, биш тапҡыр мөғжизә булғандыр тип әйтә алам. Хәҙер беҙҙең төп бурысыбыҙ - балаларығыҙҙы тәрбиәләүҙә ярҙам итеү".

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә VII Ҡышҡы Халыҡ-ара Балалар Уйындарына әҙерлек сиктәрендә сараға барасаҡ делегация етәкселәре, спортсылар һәм уларҙың ата-әсәләре менән осрашыу үтте. Ярыштар 12-15 ғинуарҙа Австрияның Инсбрук ҡалаһында үтәсәк. Өфө командаһындағы балалар тау саңғыһы, сноуборд, конькиҙа шыуыу, биатлон буйынса ярышасаҡ. Голландияның Алкмар ҡалаһында үткән былтырғы Йәйге уйындарҙа Өфө командаһы 5 алтын, 1 көмөш, 2 бронза миҙал яулағайны.

**"Башинформ"дан.**

КҮҘМӘ-КҮҘ...

# ГЕРОЙҘАР КЕМ?

**Уҙып барған йыл һуңында, ҡағыҙә буларак, өлгәшелгәндәргә йомғаҡ яһала, ҡаҙаныштар барлана, иң-индәр билдәләнә. Шундай сараларҙың береһе баш ҡаланың Конгресс-холында үтте. Унда Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов "Республика Башҡортостан" гәзите үткәргән "Йыл кешеһе" конкурсында еңеүсе уңышлы кешеләр һәм республиканың киң мәғлүмәт саралары баш мөхәррирҙәре менән осрашты.**

- Мин конкурста еңеүсе булған барығыҙҙы ла тиерлек беләм, күптәрегеҙ менән осрашҡаным булды, - тине Рөстәм Зәки улы. - Һеҙҙең эшмәкәрлегегеҙ, тәжрибәгеҙ хаҡында халыҡ та белергә тейеш. Сөнки тормош беҙҙе айыра, ҡайһы берҙә хатта күршелә кем йәшәгәнен дә белмәйбеҙ. Ә һеҙҙең эшләгән эштәрегеҙ кешеләрҙе берләштерә, уларҙың һәр ҡайһыһын үҙен Башҡортостандың бер өлөшө итеп тойорға ярҙам итә.

Беҙҙең Башҡортостанда халыҡ һәйбәт. Быны саммитҡа килгән юғары даирәләге ҡунаҡтар ҙа билдәләне, даими килеүселәр ҙә әйтеп тора. Барыһы ла тәү сиратта тәбиғәт матурлығына һәм байлығына түгел, ә кешеләргә игтибар йүнәлтә. Халҡыбыҙҙың алсаҡлығы, асыҡлығы, башҡаларға ихтирам менән ҡарауы үҙ республикаһын, ҡалаһын яратыуынан да киләләр. Яҡшы, уңышлы кешеләр күп булырға, улар бер-береһен генә түгел, уларҙы бөтөн республика халҡы белергә тейеш. Шуға күрә һеҙгә йәмғиәт тормошонда әүҙем ҡатнашҡанығыҙ, эшмәкәрлегегеҙгә ижади ҡарағанығыҙ өсөн ҙур рәхмәт...

Осрашыу барышында шулай уҡ производство тармаҡтарын, ауыл хужалығын, мәғарифты һәм мәҙәниәтте үҫтереү мәсьәләләре буйынса ла һөйләшеү булды. Рөстәм Зәки улы Әлшәй районы Субай ауылы мәктәбе директоры Зәкиә Ғәлимйән ҡыҙының сығышын айырыуса күтәреп алды. Ауылда балалар һаны кәмеп, мәктәп ябылыу ҡурҡынысы алдына баҫҡас, уҡытыусылар, үҙ ғаиләләрендә аҫырау шарты менән, тирә-яҡтағы мәктәбе ябылған ауылдарҙан балалар йыйып алып, белем усағын һаҡлап ҡала.

- Был тәжрибә өйрәнеүгә һәм таратыуға лайыҡ. Ошондай матур тәжрибә, матур кешеләр хаҡында күп кеше белмәй ҙә ҡала, - тип һүҙен дауам итте республика Башлығы. - Киң мәғлүмәт сараларының тиражы аҙайҙы хәҙер. Совет осоронда 100 меңдән ашыу тираж йыйған "Республика Башкортостан" гәзитенең тиражы бөгөн тиҫтәләрсә тапҡырға кәмене. 11 мең дана нимә инде ул? Уның яртыһы район һәм ҡала хакимиәттәренә тарала. Аңлы рәүештә матбуғат баҫмаларын ни бары 3- 4 мең кеше генә яҙҙыра...

Хаҡ һүҙҙәр. Матбуғат баҫмаларында тормошта килеп тыуған ҡатмарлыҡтарҙы сисеү юлдары ла, эш юҡ, тип зарланып ултырыусылар өсөн үҙ йүнен үҙе көйләгәндәр, тормош дилбегәһен үҙ ҡулына алғандар тәжрибәһе лә - барыһы ла яҙыла тора. Быны әлеге "Йыл кешеһе" исеменә лайыҡ булыусылар араһында ла әллә күпме өлгә алырлыҡ кешеләр йыйылғайны. Мәҫәлән, "Меценатлыҡ өсөн" номинацияһында "Йыл кешеһе" исеменә лайыҡ булған Минзәлә менән Ҡадурий Фазлетдиновтарҙың өлгөнө генә лә ни тора! Матур һәм өлгөлө ғаилә генә түгел, уңышлы эшҡыуар, шул уҡ ваҡытта ветерандарға, сәнғәт әһелдәренә, спортсыларға, мәғариф хеҙмәткәрҙәренә, иң мөһиме, тыуған ауылдарына оҙайлы йылдар дауамында ярҙам күрһәтеүсе лә улар.

**Әйткәндәй, Фазлетдиновтар беҙҙең "Киске Өфө" гәзитенең дә геройҙары. Быйыл, бәлки, беҙгә лә ошондай геройҙарҙы барлап, уларҙы уҡыусыларыбыҙ менән күҙмә-күҙ осраштырыу фарыздыр? Әйҙәгеҙ, халҡыбыҙҙың заман геройҙары булырҙай шәхестәрен барлап алайыҡ. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

ӘЙТӘГҮР!

# ӨФӨБӨҘ ХӘСТӘРЛЕКТӘРЕ

**Баш ҡала етәкселәре йылды ниндәй хәстәрлектәр менән уҙғарыуы тураһында һөйләй:**

*Ирек ЯЛАЛОВ, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы:* Бөгөн беҙ Өфөнөң иртәгәһе йөҙөн булдырыу өҫтөндә эшләйбеҙ, үҙ юлыбыҙҙы эҙләйбеҙ. Алдағы йылдарға ҡаланы үҫтереү стратегияһын әҙерләнек, унда Башҡортостандың баш ҡалаһы нисек буласағы асыҡ күренә. Әле уҡ уның ҡайһы бер юлдарын күҙаллайбыҙ. Өс йыл эсендә баш ҡалала 21 парк һәм сквер барлыҡҡа килде. Был һуңғы 20 йылда эшләнгәнгә ҡарағанда күберәк. Әлбиттә, Өфө фрагментар рәүештә яҡшыра, үҙгәрә. Хәҙер беҙ йылына 500-гә тиклем капиталь төҙөлөш объекты күтәрәбеҙ. Өс йыл ярым элек был һан 200 ине. Хәҙер һәр объектҡа архитектура, төҙөкләндереү йәһәтенән талаптар бик ҡаты. Һәр объект - ҡаланың буласаҡ имиджының бер өлөшө.

Яҡындағы 20-30 йылда - был Өфөгә генә ҡағылмай - Рәсәй ҡалалары менән идара итеү системаһында инженерҙар, инженер белеме булған кешеләр эшләргә тейеш. Сөнки тотош ҡала хужалығында бик ауыр хәл: торош күҙәтелә, инженер коммуникациялары, селтәрҙәр бик ныҡ туҙған. Һәм, моғайын, һуңынан ҡала менән етәкселек итергә тарихи, юридик, гуманитар белеме булған кешеләр килергә тейештер. Әммә бының өсөн мегаполис етәксеһенә күберәк ижади эштәр менән шөғөлләнеү мөмкинлеген биргән ныҡлы каркас булдырырға кәрәк. Әлеге ваҡытта ҡаланың инженер коммуникацияларында йылына биш мең ярым етди ватылыу була икән, етерлек булмаған финанс ресурстары шарттарында ҡатмарлы инженер мәсьәләләрен хәл итергә, ғәҙәти булмаған юлдар табырға тура килә. Бында барыһын да белгестәрҙең профессионаллеге хәл итә.

*Евгений СЕМИВЕЛИЧЕНКО, Өфө ҡала округы Советы рәйесе:* Беҙҙең ҡала өсөн генә түгел, ә республиканың барлыҡ муниципалитеттары өсөн берҙәй мөһим ике закон проектын үтеп киткән йылдың башында Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҡарамағына тәҡдим иттек. Уның беренсеһе - игландар һәм башҡа төр рекламаны рөхсәт ителмәгән урындарға йәбештергән өсөн штрафтарҙы ҡәтғиләштереү. Был бик кәрәкле аҙым, тип уйлайым, сөнки төрлө иғландар менән сыбарланып бөткән бағана, йорт подъездары ишектәре, туҡталыш павильондары мәсьәләһе менән бер Өфө ҡалаһы халҡы ғына осрашмай, был проблема бөтә төбәктәргә лә хас күренеш.

Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға беҙ тағы ла Өфө һәм Өфө районы сиктәрен үҙгәртеү тураһындағы закон инициативаһы менән сығыш яһаныҡ. Шуныһы ҡыуаныслы, инициативабыҙ тиҙ уҡ ҡаралды һәм республика парламенты тарафынан 28 майҙа уҡ хуплау тапты. Өфө өсөн яңы сиктәр принципиаль әһәмиәткә эйә. Беренсенән, беҙ ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигонын ҡала ситенә сығарыуға өлгәштек. Әгәр ҙә ошо мәсьәлә хәл ителмәһә, ҡалаға ҙур суммала штрафтар янар ине, сөнки федераль ҡануниәт бындай объекттарҙың кеше йәшәгән урындан ситтә булыуын талап итә. Икенсенән, баш ҡала льготалы категорияға инеүсе граждандарға шәхси йорт төҙөү өсөн бүлеп бирерлек өҫтәмә ер биләмәләре алды. Өфө районы иһә финанс яҡтан отто, сөнки элек Өфө ҡалаһы биләмәһендә урынлашҡан һәм һалымды ҡала бюджетына түләгән сәнәғәт предприятиелары район ҡарамағына күсте. Хәҙер уларҙың һалым аҡсаһы Өфө районы бюджетын тулыландырасаҡ.

Шулай уҡ беҙ ике яңы территориаль йәмәғәт үҙидаралығының сиктәрен раҫланыҡ. Былтырғы йылдың 6 ғинуарында "Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы - Өфө ҡалаһы статусы тураһында"ғы закон гәмәлгә инде. Был закон проекты ла беҙҙең депутаттар корпусы инициативаһы менән барлыҡҡа килде. Закондың әһәмиәте шунда: ул Өфөгә рәсми рәүештә республиканың баш ҡалаһы статусын һәм махсус, шул иҫәптән финанс хоҡуҡтарын бирҙе.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ИТ ФЕСТИВАЛЕ




**Был сара беренсе тапҡыр ғына үтеүгә ҡарамаҫтан, унда республиканың 41 районы үҙ продукцияһын тәҡдим итте. Фестивалдә Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡатнашты һәм тауар ассортименты менән танышты, хаҡтар менән ҡыҙыҡһынды, ауыл хужалығы продукцияһы етештереүселәр менән аралашты.**

305 сауҙа нөктәһендә юҡтың үҙе генә булмағандыр. Фестивалгә барлығы 40 тонна ит, 6,7 тонна ҡош ите килтерелгән. Ит йәрминкәһенә килеүселәргә һәм ҡунаҡтарҙы ҡаланың 10 йәмәғәт туҡланыуы предприятиеһы шешлек (ҡурҙаҡ), былау, эсе сәй һәм ҡамыр аштары менән һыйланы. Ит фестиваленә, дөйөм алғанда, 15 мең кеше килгәйне.

Сара уҙған Спорт һарайы эргәһендә ҡунаҡтарҙы өлгөлө фольклор коллективтары һәм DJ Ҡыш Бабай үҙҙәренең сағыу сығыштары менән ҡыуандырҙы. Иң бәләкәйҙәр өсөн "Хаски Лэнд" майҙансығы эшләне, унда балалар эттәр егелгән саналарҙа йөрөнө.

Шулай уҡ байрамда Ҡыш Бабайҙың резиденцияһы урынлашып, унда теләгән бер кеше Яңы йылдың төп геройы менән осраша алды. Ә инде Яңы йыл почтаһы аша ер шарының теләһә ҡайһы мөйөшөнә открытка ебәреү мөмкин ине.

Ойоштороусылар әйтеүенсә, ит фестивален үткәреү сифатлы продукция сығарыусы урындағы етештереүсегә ярҙам итеүгә, шулай уҡ халыҡ байрамдарын тергеҙеүгә йүнәлтелгән. Бер ыңғай, ҡала халҡы байрам алдынан яңы продукция һатып алып та ҡала.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Яңы йыл алдынан баш ҡала райондарында 19 боҙ ҡаласығы урынлаштырылды, уларҙа театрлаштырылған программалар ойошторолдо. 22 декабрҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы, 23 декабрҙә - Баш ҡала һәм Социаль шыршы байрамдары үткәрелде. Баш ҡаланың бар театрҙары һәм мәҙәниәт һарайҙары балаларға Яңы йыл тамашалары күрһәтте. 25 декабрҙән 10 ғинуарға тиклем Ленин исемендәге майҙанда яңы йыл йәрминкәләре төрлө сувенир продукциялары тәҡдим итте. 31 декабрҙә Рус дәүләт драма театры алдындағы майҙанда Өфө халҡы мәҙәни-эстрада программаһы ҡараны. Программа фейерверк менән тамамланды.

✓Өфө ҡала округы Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова билдәләүенсә, 17 декабрҙән алып баш ҡалала 215 бала өсөн байрам программалары ойошторолдо. Ҡышҡы каникулдарҙа үтәсәк мәҙәни-спорт сараларына баш ҡаланың 104 мәктәп уҡыусыһы, 57 мең мәктәпкәсә йәштәге балалар йәлеп ителә. 50 меңләп бала 3 меңләп секция һәм түңәрәктәр эшендә ҡатнаша. Балалар был көндәрҙә ял итеп кенә ҡалмай, 500-ләп бала 14-15 ғинуарҙа Башҡорт дәүләт педагогия университетында үтәсәк XX ҡала фәнни-ғәмәли конференцияһында үҙҙәренең тикшереүеү эштәре проекттарын яҡларға әҙерләнә.

✓26 декабрҙә Мәскәүҙә Дәүләт Кремль һарайында үткән Дөйөм Рәсәй шыршы байрамында Башҡортостандан 114 бала ҡатнашты. Шулай уҡ Ишембай ҡалаһындағы Башҡорт кадет корпусынан 20 уҡыусы РФ Президентының Волга буйы федераль округында тулы хоҡуҡлы вәкил Михаил Бабич патронатлығындағы байрам шыршыһында булды. Сара Түбәнге Новгородта үтте.

✓Бөрйән районы Байназар ауылы мәҙәниәт йорто базаһында заманса күп функциялы ауыл клубы асылды. Бында клуб учреждениеһы емешле эшләһен өсөн дә, ауыл халҡының ялын ойоштороу өсөн дә бар шарттар тыуҙырылған. 300 кешегә иҫәпләнгән тамаша залы, модель китапханаһы, методик һәм түңәрәк эштәр өсөн кабинеттар, балалар өсөн уйын бүлмәләре, спорт-хореография комплексы, музей бүлмәһе, тауыш яҙҙырыу студияһы бар.

**✓ *Өфөләгә йәмәғәт транспорты мәсьәләһе тулыһынса хәл ителгән, тип әйтмәç инем. Бигерәк тә киске сәғәттәрҙә. Мәçәлән, киске ун берҙә Ленин урамындағы туҡталыштан Телеүҙәккә барыу өсөн ярты сәғәт автобус көттөм.***

*СИТТӘР НИ ТИ?*

**Өфөгә сит төбәктәрҙән һәм хатта илдәрҙән ҡунаҡтар йыш килә. Улар республиканың баш ҡалаһына яңы күҙлектән сығып ҡарап үҙ баһаһын бирә, Өфө тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлаша. Ошондай ҡунаҡтарҙың береһе, Мәскәү ҡалаһынан махсус рәүештә Өфөнө ҡарарға килгән Максим СЕЛИВАНОВ үҙенең тәьçораттары менән уртаҡлаша.**

# ҠУНАҠТАР...

## милли колоритты тойорға теләй

- Дөрөçөн әйткәндә, Өфөнө килеп күреү тураһындағы хыялым күптән бар ине. Ә уҙған йылдың йәйендә Өфөлә бөтә донъя кимәлендәге сараларҙың уҙыуы был уйымды көсәйтте генә. Рәсәйҙең бихисап ҡалалары араһында нәҡ Өфөнө төрлө ил башлыҡтарын, сәйәсмәндәрен, вәкилдәрен ҡабул итерлек лайыҡлы ҡала итеп тапҡандар икән, был тиктомалдан түгелдер. Шуға күрә әлегә тиклем кисектерә килгән ниәтемде тормошҡа ашырыу өсөн ялдарымдың береһендә Башҡортостандың баш ҡалаһына остом.

Ысынлап та, Өфө самолеттан килеп төшкән ыңғайы әсир итерлек ҡала булып сыҡты. Аэропорттың ҙурлығы, таҙалығы, күркәмлеге, хеҙмәткәрҙәренең итәғәтле һәм әҙәпле булыуы күңелгә ятты. Бина эсендәге урындағы мәҙәниәтте, тарихты сағылдырған төрлө сувенир киоскаларының урынлашыуы ла яҡшы тойғолар уятты. Ҡапҡылап алыу урындарының таҙа, аш-һыуҙары тәмле булыуы ла тик ыңғай фекерҙәр тыуҙырҙы. Балалы пассажирҙар өсөн дә бөтә уңайлыҡтыр тыуҙырылған. Ғөмүмән, аэропорт тураһында тик яҡшы һүҙҙәр әйтергә мөмкин.

Кешеһе бик күп, һауаһы тынсыу Мәскәүҙән Өфөгә килеп әлегеүсе үҙен бөтөнләй икенсе донъяла кеүек хис итә. Бында нисектер тормош та һалмағыраҡ аға кеүек, кешеләр ҙә ихтирамлыраҡ, күк йөҙө лә асығыраҡ. Шулай ҙа бында ла төҙөлөштөң күп булыуы яҡын киләсәктә Өфөнө лә Мәскәү кеүек үк яҙмыш көтәме икән, тигән уйҙар тыуҙыра. Әле минә иркен урамлы, таҙалығы махсус кешеләр һәм, иң мөһиме, урындағы халыҡ тарафынан һаҡланған ҡала буйлап йөрөү мөмкинлеге тейҙе. Ләкин халыҡтың көндән-көн күбәйеүе тығыҙлыҡҡа ғына алып килмәй, ә экологик яҡтан да бәкәлгә һуға. Ошо йәһәттән республика һәм ҡала етәкселеге төрлө төҙөлөштәрҙең нисек атҡарылыуын ҡаты контролдә тоталыр, тип ышанғы килә.

Ниндәй ҡалаға барһам да урындағы музей, картина галереяларын, күргәҙмә залдарында булырға тырышам. Ә Өфө халҡы ошо йәһәттән үҙенең ни тиклем бай икәнлеген аңлаймы икән? Бындағы кеүек музей, галереяларҙы бүтән ерҙә осратып та булмай. Башҡортостан Республикаһының милли музейы, С. Т. Аксаковтың һәм М. Ғафуриҙың мемориал йорт-музейҙары, Ш. Хоҙайбирҙин музейы һәм башҡа ошондай урындарҙың әһәмиәте һәм мөһимлеге аңлатып бөткөһөҙ. Ә төрлө картина галереяларында осраҡҡан эштәргә хайран ҡалдым. Ниндәй талантлы, һәләтле кешеләргә ғүмер бирә башҡорт ере!

Әлбиттә, ике көн эсендә ҡаланың бөтә райондарын да күрергә насип булманы. Шулай ҙа булған урындарымдан сығып һүҙ йөрөткәндә, ҡаланың төҙөклөгө күҙгә ташлана. Ләкин барлыҡ ҙур ҡалаларҙағы кеүек үк аҙым һайын бер үк төрлө магазиндарҙың, япон һәм башҡа сит ил ашамлыҡтарын тәҡдим итеүсе, пицца, фастфуд кеүек аҙыҡтар һатылған урындарҙың күп булыуы Өфөнөң үҙенсәлеген бер аҙ кәметә. Шул уҡ ваҡытта менюларында урындағы милли ашамлыҡтар булған рестарандарҙың әҙ икәнлеген билдәләп үтмәйенсә булмай. Ә бәләкәйерәк кафе һәм тиҙ ҡапҡылап сығыу урындарында башҡорт милли аштарын осратыуы бөтөнләй ауырға төшә. Дөрөçөн әйткәндә, ундай кафеларҙы хатта осратманым. Минеңсә, Башҡортостандың баш ҡалаһына ҡунаҡтар нәҡ милли аш-һыуҙы тәмләп ҡарау, урындағы милли колоритты тойоу өсөн юллана.

Ҡайҙа ғына барһам да, ундағы транспорт йөрөшөн, маршруттарҙың расписаниеһын баһалайым. Өфөләге йәмәғәт транспорты мәсьәләһе тулыһынса хәл ителгән, тип әйтмәç инем. Бигерәк тә киске сәғәттәрҙә көндөҙ күпләп йөрөгән маршрут автобустар юҡҡа сыға. Мәçәлән, шәхсән үҙем киске ун берҙә Ленин урамындағы бер туҡталыштан Телеүҙәккә барыу өсөн ярты сәғәт автобус көттөм. Ә Дим биçтәһенә сығырға теләүсе пассажирҙар мин килгәндә лә тора инеләр, минән һуң да автобус көтөп ҡалдылар. Ни өсөн дәүләт һәм шәхси автобустар расписаниеһын көндөҙгө һәм киске сәғәттәрҙә бер үк режимда йөрөрлөк итеп төҙөмәçкә? Ҙур ҡалала йәшәүселәрҙең көндөҙгө сәғәттәрҙә генә түгел, ә эштән һуң да бараһы ерҙәре табылып ҡына тора.

Ике көн эсендә туплаған тәьçораттарым ошоларға ҡайтып ҡала. Өфөгә килгән башҡа кешеләрҙең дә бындағы ихласлыҡ һәм матурлыҡтан тәьçоратланып ҡайтыуына шикләнмәйем.

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**



*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ТУҒАН ТЕЛДӘ ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!

**IV Бөтөн донъя ҡоролтайы ваҡытында Силәбе өлкәһе Сосновка районы ағинәйе һәм "Аҡ тирмә" ойошмаһы етәксеһе Рабиға Бикбулатова менән тел ҡәҙере, тел яҙмышы тураһында һөйләштек.**

- Йыйындың Мәғариф секцияһы эшендә ҡатнаштым, сөнки мине туған телебеҙҙең яҙмышы бик борсой. Арҙаҡлы шәхесебеҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең, иң беренсе сиратта телде һаҡларға кәрәк, тиеүе юҡҡа түгел бит. Туған теленән айырылған халыҡ айырым милләт булараҡ юҡҡа сыға, уның рухи ҡомартҡылары, ғөрөф-ғәҙәттәре юғалып, быуат төпкөлөндә тороп ҡала. Бына ошоларҙы уйлап та, ниндәй генә йыйындар, саралар үткәрелмәһен, милләттәштәрҙе телебеҙҙән яҙыуҙан ҡурсаларға саҡырам. Беҙгә, Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттарға, туған телебеҙҙең быуындан-быуынға күсәгилешлеген боҙмай, балаларға тапшырыу бигерәк тә ауырға төшә. Нилектән шулай үҙ-ара башҡорт телендә аралашыу юҡҡа сыға, асылыбыҙҙан ситләшә барабыҙ һуң? Бының сәбәбен мин совет осоронан килгән сәйәсәттә күрәм. Юғары уҡыу йортон тамамлап, йүнәлтмә буйынса урыç ауылы мәктәбенә уҡытыусы булып эш башлағас, балалар менән тик русса ғына һөйләшергә, тигән күрһәтмә бирелде. Шул ҡағиҙәне боҙған өсөн бөтә ғәм алдында мине яуапҡа тарттырып, балалар менән башҡортса һөйләшеүем өсөн ҡаты тәнҡитләп, иçкәрмә яһанылар. Был тик минең менән генә булған хәл түгел, ҡаты баçым аçтында бөгөлөп, үҙ теленән баш тартыусылар ҙа булды. Кешеләрҙең күңелендә, хәтер төпкөлөндә шул ҡурҡыу һаман да йәшәй...

Әлеге көндә Башҡортостанда балаларға туған телен өйрәтеү, уҡытыу өсөн бөтә мөмкинлектәр булдырылған, тип уйлайым. Силәбе өлкәһендә йәшәүсе башҡорттарҙы ла онотмай республикабыҙ, аҙмы-күпме ярҙам итеп торалар. Ләкин барыбер ҙә күп нәмә үҙебеҙҙән тора. Мәçәлән, беҙҙең Сосновка районындағы Табын ауылында башҡорт балалары ғына йөрөгән балалар баҡсаһында кескәйҙәр рус телендә генә аралаша. Уларҙың бөтәһенең дә ата-әсәһе башҡорт милләтле, балалар ҙа башҡорттар, тәрбиәселәр һәм хатта балалар баҡсаһының етәксеһе лә башҡорт кешеһе. Ләкин рус теле учреждениеның рәсми теле. Был мәсьәләне сисеү юлдарын ата-әсә үҙе эҙләргә тейеш тә бит. Ләкин уларҙың күбеһе, баланы башҡа телдә һөйләштереп тәрбиәләһәң, ул милли үҙаңын юғалтасаҡ икәнен аңлап етмәй. Беҙ башҡа милләттәр өсөн бала тәрбиәләйбеҙ булып сыға. Һәр кем үҙ өлгөһөндә, үҙ ғаиләһендә башҡорт телендә аралашыуға өçтөнлөк ҡуйһа ғына был афәткә юлыҡмабыҙ. Дәүләт тарафынан ниндәй генә ярҙам күрһәтелһә лә, кеше үҙе туған телендә һөйләшергә тейеш булыуын аңламайынса тороп, бар тырышлыҡтар бушҡа китәсәк. Шуға күрә, милләттәштәрҙе, туған телен белгән кешегә бөтә киңлектәр асыла, зиһен һәм ғилем бирелә, тип иçкәртеп үтке килә.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баçылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Туҡранбаш

❖ Туҡранбаш (клевер луговой) С витаминына, башҡа матдәләргә лә бай. Уны ябыҡҡанда, аҙ ҡанлылыҡтан эсәләр. Анемия, С витамины етмәгәндә 1-2 ҡалаҡ туҡранбаш сәскәһен 1 стакан һыуҙа сәй кеүек бешерәһең һәм көнөнә 2-3 мәртәбә икешәр ҡалаҡ эсәһең. Был төнәтмә хәтерҙе лә яҡшырта.

### Мүк еләге

❖ Ҡыш - мүк еләге (клюква) миҙгеле. Мүк еләге йөрәк, ҡатын-ҡыҙҙар сирҙәре һәм башҡа ауырыуҙарҙан файҙалы.

❖ Мүк еләге һутын ҡулланыу енси юлдар инфекцияһы барлыҡҡа килеүен һәм таралыуын булдырмай, сөнки мүк еләге һуты бактерияларға кеше күҙәнәктәрендә һаҡланып ҡалырға мөмкинлек бирмәй. Ҡатын-ҡыҙҙарға шәкәр ҡушылмаған мүк еләге һутын йышыраҡ эсергә кәрәк.

❖ Мүк еләгендәге проантоцианидин органик ҡушылмаһы тештәрҙе таш һәм юшҡындан таҙарта, шуға ла пародонтозды иçкәртеү өсөн мүк еләге ҡулланыла.

❖ Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларға мүк еләге һутын бер нисә ай дауамында ҡабул итеү ашҡаҙан яман шеше йәки яҙваһы барлыҡҡа килтерә торған бактерияларҙан ҡотолорға ярҙам иткән.

❖ Көн һайын бер стакан мүк еләге һуты эсеү юғары тығыҙлыҡтағы липопротеиндарҙың, икенсе төрлө әйткәндә, "яҡшы" холестериндың артыуына, ә түбән тығыҙлыҡтағыларының кәмеүенә килтерә.

❖ Мүк еләге төрлө шештәр барлыҡҡа килеүҙе иçкәртә.

### Битлектәр

❖ Оҙайлы ялдар мәлендә бит тиреһен туҡландырыу, таҙартыу өсөн битлектәр яһап алығыҙ. 1 йомортҡа һарыһын туҡып, 3-6 тамсы лимон һуты өçтәргә, биткә һылап, кипкәнен көтөргә лә, тағы бер ҡат һыларға. 15-20 минут тоторға.

❖ 2 балғалаҡ эремсеккә 1 балғалаҡ петрушка йәки ҡаты итеп яһалған 1 балғалаҡ сәй, 1 балғалаҡ етен майы, лимон йә әфлисун ҡабығын ҡырып ҡушығыҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# АҠҠОШ УТТАН ЯРАЛҒАН...

**"Урал батыр" эпосында Һомай иртәнге ҡояшты белдерә. Бындай сюжеттар башҡа халыҡтарҙа ла бар. Боронғо төркиҙәр Умайҙы ҡояш, ут, яҡтылыҡҡа тиңләй. Ҡарасәйҙәр, балҡарҙар йорт усағын һаҡлаусы тип ҡабул итә уны.**

Һомай терминының төрлө варианттары мәғәнәһе бер төшөнсәне - бала тыуыуҙы белдерә. Шуныһы ҡыҙыҡ, Һомай алиһәһе культының киң таралыуы "Урал батыр" һәм "Аҡбуҙат" эпостары тәьҫире менән бәйле, тип иҫәпләй ғалимдар. Б.э. тиклем VII - V быуаттарҙа Урта Азия һәм Иран халыҡтарының берҙәм рәсми дине - зароастризм нигеҙендә Һомай/Хуми/Йима образы тыуған, тигән фекерҙәр ҙә бар. Абрамзон тигән ғалим Һомай культын боронғо дөйөм бөтөн кешелек ҡош мотивы - тереклекте булдырыусы, муллыҡ, түллек символы ҡояш алиһәһе менән бәйләй. Ысынлап та, күп мифологияларҙа тотем ҡош-аҡҡош ҡояшты һүрәтләй һәм ул Һомайҙы ғына түгел, ә кешеләрҙе һәм тәбиғәтте булдырыусы бөтөн илаһиҙарҙы берләштерә.

Аҡҡош - уттан яралған тигән фекер төрлө ышаныуҙарҙың нигеҙендә ята. Мәҫәлән, сыуаш халҡы ауыл өҫтөнән аҡҡош оса, янғын була, ти. Бер бүрәт риүәйәтендә һөйләнелеүенсә, һунарсы аҡҡоштоң күлдәге ояһын туҙҙырып, уның балаларын өйөнә алып ҡайта. Аҡҡош унан үс алыу маҡсатында суҡышында ут алып килеп, һунарсының өйөнөң ҡыйығына ташлап китә, һәҙәмтәлә, тотош ауыл яна. Ҡалмыҡтарҙың халыҡ ижадында Тәнре улы - дүрт башлы һары аҡҡош (ҡояш символы) образы бар. Фин-уғыр мифтарында ҡояш көндө аттар егелгән арбала үтә, төнөн ер аҫты океаны буйлап уны аҡҡош йәки өйрәк кире оҙатып ҡуя.

Боронғо гректар аҡҡошто яҡтылыҡ һынланышы тип иҫәпләгән. Уларҙың ышаныуы буйынса, үлер алдынан аҡҡош һуңғы йырын йырлап, ҡояшҡа оса. Ошо ышаныуҙан урыҫтарҙың "аҡҡоштоң һуңғы йыры" тигән һүҙбәйләнеше - яҙыусының һуңғы әҫәре, мәрхүмдең үлер алдынан әйткән һүҙе барлыҡҡа килгән.

Шулай итеп, башҡорт фольклорында, йолаларҙа тотем ҡош, тәү әсә, кешеләрҙе насарлыҡтан һаҡлаусы, демиург һәм мәҙәни герой Урал батырҙың ҡатыны булараҡ аҡҡош хаҡында мәғлүмәт һаҡланған. Аҡҡош ҡыпсаҡтарҙың, ҡатайҙарҙың, ҡыуаҡандарҙың, тамъяндарҙың, табындарҙың, юрматыларҙың һәм меңлеләрҙең ырыуҙарын берләштергән. Шул уҡ ваҡытта, легендалар буйынса, аҡҡош кешенән барлыҡҡа килгән. Борон башҡорттарҙың бөтөн этнографик төркөмдәре лә тотем ҡошто үлтереүҙән, уның рәнйешен алыуҙан һаҡланған. Аҡҡоштоң итен ашамағандар, ояһын туҙҙырмағандар.

Аҡҡош - йәшәү көсө биреүсе. Кешенең йәне аҡҡошта, тип тә әйткәндәр. Ул тере һыу менән дә бәйле, был "Урал батыр" эпосында яҡшы күренә. Тотемик ҡараштар йәйләп үҫә һәм атабабаларыбыҙ уны илаһи бер йәнгә әүерелдерә. Шул рәүешле Һомай барлыҡҡа килә. Ҡояш ҡыҙы, ҡоштар батшаһы Һомай ҡатын-ҡыҙ башланғысы, ул башҡорт халҡының тәү әсәһе, ауырлы ҡатындарҙың ярҙамсыһы, бәхет һәм байлыҡ символы. Урал батырҙың ҡатыны булараҡ, ул Көньяҡ Урал тәбиғәтен булдырыуҙа ҡатнаша, яуыз көстәр менән көрәшә. Ә Һомай культының киң таралыуы уның боронғолоғон күрһәтә.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

---

КЕШЕ ҺӘМ ТӘБИҒӘТ

**Мәмерйәләр борон-борондан серлелеге, билдәһеҙлеге һәм хатта үҙендә ниндәйҙер шом һаҡлауы менән дә кешеләрҙе йәлеп иткән, тартып, саҡырып торған. Уларҙа халыҡ төйәкләнгән, дошмандан йәшеренер урын иткән, аҙыҡ-түлеген, ҡоралын һаҡлаған, йолалар үтәгән. Бөгөн иһә мәмерйәләр шул үткәндәрҙең, боронғо кешеләр йәшәйешен, кисерештәрен тереләй генә һаҡлап алып ҡалып, әлеге быуынға еткереүсе бер "һауыт" ролен дә башҡара кеүек. Һәр хәлдә, Шүлгәнташ мәмерйәһе шундай мөғжизәләрҙең береһе ул.**

# ИСЕМЕҢДЕ...

## ташҡа яҙыу ғәҙәтеңде ҡуйсы әле...



"Шүлгәнгә барам" тигән уй, теләк үҙе үк бер ғәҙәти булмаған халәткә индерә. Һин ниндәйҙер аңлайышһыҙ кисерештәргә әҙерләнәһең, мөғжизә көтә башлайһың кеүек. Ә инде уның юлы һәм бигерәк тә мәмерйәгә яҡынлашҡан тауҙар араһынан аҫҡа төшөү, урман һуҡмағы буйлап өң ауыҙына яҡынлашыу - мең төрлө тәьҫораттар солғаныШы, үҙеңдең тәүтормош аңыңды тойоу, тәбиғәт менән бер бөтөнлөгөңдө ҡабул итеү, уға буйһоноу, табыныу кеүек шау-шыулы ҡала йәшәйешендә башҡа инеп тә сыҡмаҫ шаҡымдар ул.

Ошо урында бер аҙ лирик сигенеү яһап, мәмерйәләр темаһына дөйөм фекер йөрөткәндә, республикабыҙ, ғөмүмән, тау-таш ҡыуыШлыҡтарына бик бай. Беҙҙә картаға төшөрөлгән 700-ҙән ашыу мәмерйә иҫәпләнһә, шуларҙың 29-ы Уралда булып, 17-һе тәбиғәт һәйкәле статусына эйә. Улар Ауырғазы, Белорет, Ғафури, Дыуан, Иглин, Ишембай, Ҡырмыҫҡалы һәм Салауат райондарында урынлашҡан. Республикабыҙҙа шулай уҡ бөтә донъяға билдәле булған бер нисә мәмерйә лә бар. Уларҙың барыһы ла - карст мәмерйәләре. Һәм шуларҙың береһе беҙ үрҙә әҫәрләнеп һөйләй башлаған Шүлгәнташ, урындағы халыҡ телендә - Ташөй. Шүлгәнташ мәмерйәһе - Башҡортостандың Бөрйән районында, Ағиҙел йылғаһының уң яҡ ярында, "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы биләмәһендә урынлашҡан. Ул - Көньяҡ Уралда бурташ, гипс, доломит кеүек тау тоҡомдарынан торған мәмерйәләрҙең иң ҙурҙарының, иң матурҙарының береһе, тәүтормош сәнғәте ҡомартҡыһы. Мәмерйә янында "Шүлгәнташ" музей-экскурсия комплексы һәм спелеология лабораторияһы асылған.





Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге күптән инде урындағы мәмерйәләрҙең ҡомартҡылар булараҡ һаҡланыу темаһын күтәреп саң ҡаға. Уларҙың хәүефләнеүенсә, туристарҙың ирекле үтеп инеүҙәре арҡаһында мәмерйәләргә ҙур ғына зыян килә һәм был бәлә йылдан-йыл етдиләнә бара. Ошо юҫыҡта Үҙәк ярайһы уҡ уңышлы аҙымдар ҙа яһай.

Шүлгән мәмерйәһенең граффитинан таҙартыу менән мәшғүл булған Андорра кенәзлеге ғалимы Эдаль Антон Гийаме хаҡындағы мәғлүмәттәр ошо көндәрҙә республикала бар матбуғат сараларын да ҡуҙғытҡандыр. Миңә иһә был бөтә Европаға билдәле булған реставраторҙың үҙен барып күреп, уның ҡул аҫтында эшләүсе йәш ғалимдар төркөмө менән мәмерйәнең иненбуйын үлсәп сығып, иң йәшерен мөйөштәрҙәге яҙыуҙарҙы ла уҡырға насип булды. Был бәхетте беҙҙең редакцияға Үҙәктең директоры Данир Әхмәҙи улы Ғәйнуллин бүләк итте.

- 20 октябрҙән 27-нә тиклем Франция һәм Испанияла командировкала булып, тарихи ҡомартҡыларҙы ҡараныҡ. Унда барлығы һигеҙ мәмерйә. Мәмерйәләрҙәге һүрәттәрҙе, тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау тәжрибәһен өйрәндек. Төп маҡсатыбыҙ - Европа ғалимдарының тәжрибәһен өйрәнеп, үҙебеҙҙең Шүлгәнташ мәмерйә комплексын тәҙөүҙә ҡулланыу ине. Һәм маҡсатыбыҙға өлгәштек тип уйлайым. Сәфәрҙән ҡайтҡас, Шүлгәнташ мәмерйә комплексын тәҙөү проектын эшләй башланыҡ, - тип һөйләй Данир Әхмәҙи улы был эште башлап китеүҙең сәбәптәрен аңлатып. Шул сәйәхәттә Башҡортостан белгестәре мәмерйәләрҙе граффитинан таҙалай алырҙай оҫталарҙы эҙләүҙәре хаҡында ла әйтә һәм уларға Эдаль Гийаменны тәҡдим итәләр. Беҙҙекеләр реставраторҙы Башҡортостанға саҡырып та ҡайта.

Беҙ килеп еткәндә, Эдаль Гийаме етәкселегендәге бригада йомғаҡлау эштәренә сығырға тора ине. Бығаса улар ун көн дауамында 14 кв метр майҙанды таҙалап өлгөргән, тағы ла 120 кв метр майҙанда эштәр башҡараһы бар. Сит ил белгесе һөйләүенсә, ул Францияның Шове, Ласко һәм Руфиньяк, Испаниялағы Альтамир мәмерйәләрендәге палеолит осоро рәсемдәрен таҙартыуҙа ҡатнашҡан. Әлегә уның бында тәүгә килеүе. Мәмерйәгә килеп ингәс тә яҙыуҙарҙың күплегенән ҡаушап ҡалып, ярҙам итә алмаҫмын, тип уйлай. Әммә күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй, тигән хәҡиҡәт еңә. Йәйләп-йәйләп Шүлгәнташтың беренсе оло залы тәүтормош халәтенә ҡайта башлай.

- Эдаль эштә баштан уҡ ҡаты тәртип ҡуйҙы. Һәр кем анык рәүештә көнөнә ниндәй хеҙмәт башҡарырға тейешлеген белде, хатта ашауға, мәмерйәгә барып етеүгә, йәшәгән урынға ҡайтыуға бүленгән ваҡыт та минуты менән планлаштырылғанға тура килергә тейеш булды. Беҙ унан бик күп нәмәләргә өйрәндек, шул иҫәптән матур мөнәсәбәттәргә лә, - ти ошо көндәрҙә белгес ҡулы аҫтындағы төркөмдә эшләгән Айбулат Ғәбиҙуллин.

Мәмерйәләге яҙыуҙар төрлө ысул менән эҙ һалған, уларҙың күмер менән төшөрөлгәндәре лә, аҡбур менән сыйылғандары ла, химиялы буяуҙар менән буяп йәки соҡоп яҙылғандары ла етерлек. Күмерҙе белгестәр ябай һыу һәм мамыҡ ба-

шлы таяҡсалар менән таҙарта. Бер хәрефте юйып алыу ғына ла сәғәттән ашыу ваҡытты ялманы. Кескәй таяҡса менән таштың һәр бөгөлсәһенә, һәр егенә инеп, һаҡ ҡына ҡыланырға кәрәк икән. Бояу менән яҙылғандарҙы Эдаль эшләгән махсус составлы шыйыҡсалар менән икенсе төрлөрәк итеп таҙарталар. Һәр хәлдә, химия бик аҙ ғына ҡулланыла, сөнки ғалимдар алдына таҙартыуҙан да бигерәк зыян килтермәү шарты ҡуйылған.

- Һеҙ мәмерйәгә бәйле мифология менән таныштмы? - тип ҡыҙыҡһынам ювелир хеҙмәте менән мәшғүл ғалимдан (әлбиттә, тәржемәсе аша).

- "Урал батыр" эпосын инглиз телендә уҡып сыҡтым. Мин ултырған урында бынан бик күп быуаттар элек шундай хәл-ваҡиғалар булғанлығы һәм бөгөн ошо изге ер менән үҙемдең дә бәйлелегемде уйлаһам, баштар әйләнеп китә хатта.

- Ни өсөн тап Шүлгәнташта эшләргә ризалаштығыҙ? Һеҙ уның хаҡында белә инегеҙме?

- Мине уның боронғолоғо ҡыҙыҡһындырҙы. Һеҙҙең белгестәр биргән мәғлүмәттәрҙе ҡарап сыҡтым да, "Мин унда барырға тейешмен!" тигән фекергә килдем.

- Һеҙ мәмерйәләр белгесеме, әллә улар менән арбалған кешеме?

- Мәмерйәләргә ғашиҡ кеше, тиһәм дөрөҫөрәк булыр.

- Мәмерйәләргә бәйле төрлө хикәйәттәргә ышанаһығыҙмы? Мәҫәлән, Шүлгәндә лә теге донъяға алып сыға торған портал бар, төн уртаһында ҡайһылыр залдарҙа ваҡыт арауығына инеп була, йылдың бер мәлендә бында боронғо кешеләрҙе осратырға була, хатта кемдәрҙер Аҡбуҙат кешнәүен дә ишеткән, тип һөйләйҙәр...

-Мин быларҙың береһен дә инҡар итмәйем. Сөнки тәбиғәтте кәмһетергә, уның мөғжизәле көсөнә ышанмауланлыҡ белдерергә ярамағанлығына төшөнгәнмен инде. Был донъяның беҙ белмәгән серҙәре бик күп һәм шул иҫәптән Шүлгәндең дә...

Ғалим мәмерйәнең изге урын булыуына инана. Уның билдәләүенсә, мәмерйәнең изге урын икәнен белгән боронғо ата-бабаларыбыҙ уға зыян килтермәгән. Халыҡ башлыса совет осоронда бәсһеҙләгән мәмерйәне. Идеологиялар, табыныуҙар, инаныуҙар менән бергә изге ҡомартҡыларға ла иғтибар, ихтирам юҡҡа сыҡҡан замандарҙа башланған да инде был баш-баштаҡлыҡ. Шүлгәнташ проблемалары менән янып йәшәгән Данир Әхмә-ҙи улы ла уның фекерен үҫтереп, түбәндәгеләрҙе һөйләй:

- Таштарҙағы уйылып яҙылған исемдәр халыҡтың ер-һыуыбыҙҙы күрергә, белергә булған ынтылышын түгел, уларҙың мәҙәни кимәле түбән булыуын иҫбатлай. Уларҙы тәртипкә өйрәткәнсе, тарихи ҡомартҡыларыбыҙҙың юҡҡа сығыуы ихтимал. Шуның өсөн һәр кем үҙенә ҡарата талапсан, мәҙәни булһын ине. Мәмерйәләрҙе һаҡлау эшен, унда инеү, сығыу тәртибен көйләргә кәрәк. Һәм һәр мәмерйә ниндәйҙер бер тәбиғи ҡурсаулыҡ тарафында булып, уның хужаһы булырға тейеш.

Сит илдә иң аптыратҡаны - унда йәшәүселәрҙең үҙенең үткәненә, тарихына үтә лә иғтибарлылығы. Мәҫәлән, Альтамир мәмерйәһен тапҡас та унда иң беренсе ишек ҡуйғандар. Башҡа мәмерйәләрҙә лә шулай. Мәмерйә эргәһендә күсермәһен эшләп, туристарҙы шунда индереү ойошторолған. Боронғо һүрәттәр булған мәмерйәләргә бары аҡ халатлы, респиратор кейгән белгестәр генә инә ала. Беҙгә дурт мәмерйәнең эсен күреү бәхете тейҙе. Баҫҡыстар, махсус яҡтыртҡыстар ҡуйылған, мәғлүмәтле экскурсоводтар мәмерйә хаҡында мәғлүмәт бирә. Һүрәттәр беҙҙең дәүергә тиклем XII быуат элек төшөрөлгән, йәғни беҙҙең Шүлгәнташ мәмерйәһендәгеләр менән бер осорға тап килә. Дөйөм Рәсәй проблемаһы - мәмерйәләрҙе консервациялау, таҙартыу буйынса белгестәр әҙерләнмәй. Альтамир музейы директоры менән һөйләшкәндән һуң, ул ошо өлкәлә эшләгән белгестәрҙе тәҡдим итте. Франциялағы милли музей директоры ла беҙҙең менән киләсәктә хеҙмәттәшлек итергә вәғәҙә бирҙе. Испания, Франциялағы мәмерйәләр 60-сы, 80-се йылдарҙа ЮНЕСКО исемлегенә индерелгән. Альтамир музейында булғанда мәҙәни-мираҫ исемлегенә индерелгән мәмерйәләр картаһын күрҙек. Үкеснескә ҡаршы, беҙҙең Шүлгәнташ мәмерйәһе унда күрһәтелмәгән. Киләсәккә булған төп эшмәкәрлегебеҙ - Шүлгәнташ мәмерйәһен ЮНЕСКО исемлегенә индереү...

Ә инде мәмерйәнең һүрәттәренә килгәндә, әлеге ваҡытта ҡаяға төшөрөлгән рәсемдәрҙе һаҡлау буйынса билдәле белгестәрҙе саҡырыу буйынса һөйләшеүҙәр алып барыла икән. Альтамир музейы етәксеһе Хосе Антонио Лашерас, Тарихҡа тиклемге милли музей етәксеһе Жан-Жак Клейе-Мерль, мәмерйә һаҡлаусы Шове Мари Бардиза һәм Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының ғилми секретары Екатерина Дэвлеттарға өмөт бағлана.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Андорра ғалимы эшенең беренсе этабын тамамлап, ҡайтып китте, әммә күпмелер ваҡыттан һуң ул Башҡортостанға тағы ла киләсәк һәм башлағанын тамамлап ҡуясаҡ. Әле мәмерйәлә уның инструкциялары менән шөғөлләнеүсе Ғилми-тикшеренеү үҙәге белгестәре эш итә. Халҡыбыҙҙың иң боронғо һәм бөйөк рухи ҡомартҡыһы "Урал батыр" эпосының тыуған ерлеге - Шүлгәнташ ҡурсаулығы һәм мәмерйәһенең бөтөнлөгөн хәстәрләгән кешеләрҙең хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Улар, әлбиттә, мәмерйә таштарына исемдәрен яҙып китмәҫ, бәлки, халыҡ уларҙы белмәҫ тә, әммә Шүлгәнташ, бынан меңәр йыл әүәл инеп мәңгелек һүрәттәр ҡалдырған улҡыҙҙарын хәтерләгән кеүек, уларҙың да изгелеген онотмаҫ, тип ышанғы килә.**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# САБЫР БУЛАЙЫҠ!

**Юлда йөрөгәндә төрлө кешеләр менән танышырға, аралашырға яратам. Ниндәй генә яҙмышлылары осрамай. Мажаралы, фәһемле, ҡыҙыҡ китап уҡыған кеүек булаһың. Кемдер үҙенең мәшәҡәттәре менән бүлешә, бәғзе берәү серен һөйләй, өсөнсөләр иһә эсенә йыйылған аһ-зарын түгә.**

Бына яңыраҡ такси менән ауыл яғынан килгәндә һөймәлекле генә апай менән танышып, һөйләшеп киттек. Үтә өлкән дә түгел, әммә тормошҡа ҡарашы, аҡыллы фекерҙәре, ихлас йылмайыуы, донъяны бөтөнләй икенсе төрлө ҡабул итеүе менән ауыҙына ҡаратып ултыртты ла ҡуйҙы. Тыныс ҡына тауыш менән һөйләне лә һөйләне. Ә мин берсә йылмайып, берсә һоҡланып, уны шым ғына тыңланым.

- Тәрбиәле, әҙәпте юғары ҡуйған ғаиләлә тәрбиәләнеп үҫтем мин, һылыуым. Атай-әсәйем бәләкәй саҡтан, үҙеңдән ололарға ҡаршы һүҙ әйтмә, тип үҫтерҙе. Ҡайҙа инде ул атай-әсәйгә, туғандарға, хатта күршеләргә ауыҙ асып һүҙ әйтеү. Үткер дуҫтарыма ҡарап, ҡурҡмайынса, үҙ һүҙҙәрен әйтә беләләр, тип һоҡлана инем.

Килен булып төшкәс, бөтөнләй баҫылып ҡалдым. Ауыҙ асып һүҙ әйтергә лә ҡыймай инем. Ирем менән башта студенттар ятағында йәшәнек, унан сыҡҡас, ҡайным менән ҡәйнәм йортонда йәшәй башланыҡ. Әлбиттә, иремдең эштән бирелгән бәләкәй генә бүлмәһе бар ине, әммә унда ҡәйнеш менән килендәш йәшәй ине. Ирем ҡустыһынан бүлмәне бушатыуҙы һорарға унайһыҙлана. Етмәһә, улар яңы ғына өйләнешкән йәш ғаилә. Үҙҙәренең генә йәшәгеһе килә. Уларҙың хәленә инеп, бүлмәне һорап, нығышып йөрөмәнек. Шулай итеп, ике йыл тирәһе ҡайнымдар менән бергә йәшәп, иргә лә, ҡайныға ла ярай белеү мәктәбен ныҡлы үттем. Бер аҙ ҡыйыулыҡ та барлыҡҡа килде үҙемдә. Берҙән-бер көндө ҡайным: "Бер таҙа кейемем дә ҡалмаған, нишләп йыуманың?" - тип ыжғырҙы минә, был минең түҙемлектең һуңғы тамсыһы булды шикелле. Һәр хәлдә, ҡәйнештән үҙебеҙҙең бүлмәне бушатыуҙы һорарға батырсылыҡ иттем. Ҡайныма ла күсеп сығырға ҡарар итеүебеҙҙе тыныс ҡына аңлаттым. Нисек ҡыйыулығым еткәндер, һаман аптырайым. Үҙегемә үткән булғандыр инде. Эй, туғаным! Ҡурҡмай үҙ һүҙеңде матур итеп әйтергә өйрәнеүҙән дә шәп нәмә юҡ ул. Бына шуны аңланым йәшәй-йәшәй. Аҡыл һуң керә, әммә мул керә, тип минең һымаҡтарҙы әйткәндәрҙер инде. Хәйер, онотолдо инде ул хәлдәр. Хатта төштә генә булған һымаҡ..

...Апайҙың һөйләгәндәре оҙаҡ тынғы бирмәне. Күңелемә тормош аҡылы итеп һеңдерҙем ул әйткәндәрҙе. Сабыр бул, тим әленән-әле үҙ-үҙемә. Илар мәлдәрендә тешеңде ҡыҫып түҙ. Юлың оҙон булыр, таш та бөрерҙәр артыңдан, боҙло һыуға ла ҡойондорорҙар, дөрләп янған утҡа ла алып барып тығырҙар. Шунһыҙ булмай. Был тормош! Йылап шулай бешегә, ҡалын тирелегә әйләнәһең. Кәрәкмәгәнде күрмәҫкә, теләмәгәнде ишетмәҫкә өйрәнәһең. Әммә аҙаҡтан, маҡсатыңа өлгәшкәндән һуң, шундай ләззәтле тойғо сорнап ала... Ошо мәлде йәнә тойор өсөн барыһын да ҡабаттан үтергә риза булырҙайһың... Сабыр бул... Барыһы ла алда, барыһы ла үтә...

**Гөлназ ИШЕМҒОЛОВА.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Тунап алынған сей тирене ҡояшлы урынға йәйеп һалып, таяҡсыҡтар менән беркетеп ҡуялар. Киреп ҡуйылған тиренең йөнөн ҡырғыс кеүек ағасҡа беркетелгән кәкре салғы киҫәге менән ҡырып алалар һәм, тире кипкәнсе, шулай ҡалдыралар. Башлыса, кипкән тирене яҙға тиклем һаҡлайҙар. Яҙ еткәс, тиреләрҙе ыҫлайҙар. Бының өсөн мөгәрәп ҡаҙып, аҫ яҡтан ике аршин оҙонлоғонда өң яһап, унан өҫкә таба мөрйә сығаралар. Мөгәрәп ауыҙына ҡабыҡтан яһалған төпһөҙ ҡап ултыртыла, уның аҫҡы ягы ер менән ҡаплана. Ҡап һәм мөгәрәп ауыҙына бау һуҙылып, йәиһә нәҙек кәртә һалынып, уларға киптерелгән тиреләр элеп ҡуйыла. Мөрйәгә серек киҫәктәрен төшөрөп, яндырып ебәргәс, төтөн канал буйлап мөгәрәпкә үтһен һәм тиреләр һәр саҡ төтөн эсендә булһын өсөн мөрйәне томалап ҡуялар. Тиреләрҙе, ҡалынлығына ҡарап, өс аҙна йәиһә бер ни тиклем аҙыраҡ ваҡыт дауамында бер өҙлөкһөҙ ыҫлайҙар, шунан һуң ғына тире эшкә яраҡлы, тип иҫәпләнә. Ошо рәүешле әҙерләнгән күндән улар аяҡ кейеме генә текмәй: биҙрә, сапсаҡ һәм ҙур шешә кеүек йорт кәрәк-яраҡтары ла күндән эшләнә. Турһыҡ тип аталған ҙур күн шешә берике һәм унан да күберәк биҙрә һыйҙырышлы була, ул, башлыса, бер бөтөн күндән яһалып, төбө генә тегеп ҡуйыла. Бының өсөн улар һыйыр йәиһә аттың алғы аяғы тиреһен киҫмәй генә тубығынан кире тотошлайы менән һыҙырып ала һәм шул рәүешле бөтөн көйө ҡалған күн тарая барыусы һауыт (һүлейә) фигураһын һаҡлап ҡала.

Башҡорттар үҙҙәрендә ҡулланыу өсөн байтаҡ ҡына тарма сәсә һәм ул бик һәйбәт үҫә; шулай ҙа улар аяҡ кейемен һәм төрлө кәрәк-яраҡ теккәндә бер ҡасан да еп ҡулланмай: улар еп урынына һеңер ҡуллана, шуның өсөн уларҙың аяҡ кейемдәре оҙаҡҡа сыҙай һәм бер ҡасан да тейерлек һүтелеп бармай.

Ауылдан йәйләүгә күсеп китеүсе башҡорттарҙың йорт ҡоштары аҫрауға артыҡ иғтибар итеп бармауын күрҙек. Уларҙың ҡайһыларының тауыҡ һәм ҡаҙҙары бар, әммә йәйләүгә күскәндә былар ҡышлауҙа торғоҙоп ҡалдырыла һәм ейер аҙығын үҙҙәре табырға мәжбүр ителә. Хужалары көҙөн ауылға кире ҡайтҡанда уларҙы таба алһа, шуның менән дә ҡәнәғәт ҡала. Күрәһең, был ҡарсыға, ыласын, бөркөт кеүек йыртҡыс ҡоштарҙы ылыҡтырыу өсөн шулай эшләнә. Улар ошо ҡоштарҙы тотоуға бик әүәҫ; әйтергә кәрәк, улар ошондай ҡоштарҙы тотоуҙа һәм аҫрауҙа махсус өйрәтелгән оҫталарҙан да ҡалышмай. Башҡорттар был ҡоштарҙың ҡанат һәм ҡойроҡ ҡаурыйҙарын уҡтарына ҡуя, бөркөттәрҙе төлкө, ҡуян, бүре кеүек йәнлектәргә һунар итеү өсөн тота. Тауҙар араһында йәшәгәнлектән һәм төрлө яҡтан заводтар менән уратып алынғанлыҡтан, башҡорттар мәғдән эҙләүгә лә бик һәлетле; әммә ҡайһы саҡта заводсыктарҙан йәбер күргәнлектән, үҙҙәре тапҡан мәғдән тураһында әйтә һалып бармай, мәғдән эҙләүселәр үҙҙәренең яҡташтарының да төрлө янауҙарына, бәғзе осраҡта хатта туҡмауына дусар була: шулай ҙа аҙ ғына булған әжер тиҙҙән улар кисергән ауырлыҡтарҙы оноттора.

**(Дауамы бар).**

***✓ Беҙҙең ғаиләлә мин генә түгел, ҡатыным Гөлнара (Г. Әмирова, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы - Ред.) ла, ҡыҙыбыҙ Айсулпан да маймыл йылында тыуған. Эмиль улыбыҙ ғына йылҡы йылыныҡы.***

# МАЙМЫЛ ЙЫЛЫНДА...

## кеше булып ҡалайыҡ

**Уларҙы бик үҙенсәлекле кешеләр тип һүрәтләй йондоҙнамә. Аҡыллылар, зирәктәр, берәй нәмә уйлап табырға ғына торалар. Әгәр ҙә аяҡ аҫтарында артыҡ буталып, ҡамасаулап йөрөүселәр булмаһа, уларға дан-шөһрәт яулау бер ни ҙә түгел. Күптәренә хатта ниндәй ҙә булһа өлкәгә беренсе булып юл ярыу бәхете лә эләгә. Шәп әңгәмәселәр, бәхәсләшергә яраталар, яҡшы дуҫтар, үҙҙәре кеше кәңәшенә иғтибар итмәһәләр ҙә, кешегә кәңәш бирергә генә торалар. Һүҙ, әлбиттә, маймыл йылының хужалары тураһында. Иң ҡыҙығы, яҙыусылар, артистар араһында маймылдар күп түгел, әммә булғандары берәгәйле. Шундай әһелдәребеҙҙең береһе - Ш. Бабич исемендәге Дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ артисы Алмас Хәдис улы ӘМИРОВ менән яңы йыл, уның үҙенсәлектәре хаҡында һөйләшәбеҙ.**

**▸ Уңыштар йылға ҡарап билдәләнмәй, тиһәләр ҙә, үтеп киткән ҡуй йылы ниндәй уңыштарға бай булды? Мөсәлдәге йылдар һынамышына ышанаһығыҙмы былай?**

- Үткән йыл башҡаларынан әллә ни айырылып торҙо, тип әйтә алмайым, әммә ошо йылда тыуғас, маймыл йылынан күберәкте көтәм. Һәр кеше яҡшыға өмөтләнергә тейеш, шуға ла йыл башланғанда бар халыҡ йыйылып ятып фараздар уҡып ала. Шулай ҙа мин йондоҙнамәгә бик ышанмайым. Уйлап ҡарағыҙ, бер нисә секунд йә минут айырмаһы менән бер көндә, бер йондоҙлоҡ аҫтында тыуған игеҙәктәрҙең холоҡ-ҡылығы бер-береһенә бөтөнләй оҡшамай. Бер йылда тыуғандарға нисек уртаҡ ҡылыҡһырлама бирәһең? Етмәһә, йыл эсендә ун ике ай, улар тағы йондоҙлоҡтарға бүленә. Айырым төҙөлгән йондоҙнамә генә кеше, уның яҙмышы тураһында нимәлер әйтә алалыр, моғайын. Борон халыҡ былай һәр йылға һынамышын да теркәп барған, әммә улар бит күберәк һауа торошона, хужалыҡ алып барыуға ҡағылған. Учалы районындағы тыуған ауылым Ахун эргәһендә обсерватория булыуы асыҡланды бит инде - был бик ихтимал хәл, сөнки башҡорттарҙа йондоҙҙарҙы белеү бик хупланған. Шулай ҙа мин ҡарттарҙан, йола "ҡартая" хәҙер, тигәндәрен ишеткәнем бар. Һынамыштар ҙа һынаталыр инде ҡайһы берҙә.

Ижадҡа килгәндә, ниндәйҙер һығымталар яһап, уйланып ултырырға ваҡытым да юҡ, шуға өҙөп кенә әйтеүе лә ауыр. Быйыл режиссер булараҡ комедия сығарҙым. Халыҡ көнкүрештәге мәшәҡәттәрен онотоп, көлгөһө килә бит, "Йүгер, Харис, йүгер!" тигән был спектакль театрға тамашасыны йәлеп итеү маҡсатын да эҙәрлекләй. Шулай ҙа комедия - ул еңел жанр түгел, һәр комедияла мәғәнә була. Тамашасы был әҫәрҙе лә бушҡа көлөү тип ҡабул итмәҫ, тип ышанам.

"Әлифбанан бер себеш" моноспектаклен яңыса форматта тәҡдим итеүҙәр булды быйыл, спектакль сәғәт ярым барһа, тамашасы тағы ла бер сәғәт миңә һорауҙар биреп, үҙенең уй-фекерҙәре менән уртаҡлаша. Быйыл төрлө иҡтисади санкциялар, башҡа сәбәптәр арҡаһында был спектакль менән фестивалдәргә сығып булманы. Һәр хәлдә, үҙебеҙҙең тамашасы араһында уға битараф ҡалғандар юҡ.

Драматургия һәм продюсерлыҡ үҙәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында үҙенсәлекле проект үткәрҙе, был да йылдың уңышы тип иҫәпләйем. Искәндәр Сакаевты саҡырып, Гомерҙың "Илиада"һы буйынса өҙөктәр эшләнде, ошо ижади мөхит башҡорт театрында дауам итһен ине, тип теләйем.

**▸ Маймыл йылында тыуғас, холҡоғоҙҙа был йәнлеккә хас сифаттар бармы?**

- Халыҡта әртисләнеп, ҡыланып йөрөүҙе "мәймүнләнеү" тиҙәр түгелме әле? Һәр хәлдә, минең һөнәрем тыуған йылыма бик ятып ҡына тора булып сыға. Ысынлап та, балалар баҡсаһында уҡ кешеләрҙе көлдөрөп, көләмәстәр һөйләп йөрөй торғайным. Барыһын да ауыҙыма ҡаратып тота ала инем инде. Мәктәптәге пионер йыйындары, ауылдағы концерттар минһеҙ үтмәне, шәп итеп йырлай инем, барабанда һуға торғайным. Бәлки, халыҡтың мине көсләп-тырышып "комик актер" амплуаһына индереүе лә йылдың яҙмышыма ниндәйҙер йоғонтоһона бәйлелер, кем белә? Амплуа актер өсөн ҡурҡыныс нәмә, мөмкинлектәрең бар, әммә уларҙы ҡуллана алмауың да бар бит. Шуға ла һәр роль һайын нимәлер раҫларға тура килә бындай актерҙарға. Комик булмаған ролдәр араһында "Кәкүк ояһы"ндағы Хардинг ижади кешеләрҙең тормошона тап килә. Ҙур донъяла уларға ҡыйын, сөнки алдаша белмәйҙәр, тупаҫлыҡҡа, әшәкелеккә яуап бирә алмайҙар, шуға ла эскә йомолалар һәм йышыраҡ эстән һыналар. Хардинг та мәрхәмәтһеҙ тормошҡа ялағайлана алмаған, асыҡ йөҙлө кеше, уның бөтөн проблемаһы ла ошонан. "Алтын битлек" Рәсәй милли театрҙар фестивалендә премияға ла тәҡдим ителгәйне был роль.

Шукшин хикәйәләре буйынса ҡуйылған "Эх, был тормош!" спектаклендәге Сергей Духанин образын һағынам. Ул ҡалаға барып, һатыусының күҙҙәрен дүрт итеп, бөтөн йыйған аҡсаһына ауылда ғүмерҙә лә кейерлек булмаған итектәр һатып алып ҡайтып ҡатынына бүләк итә. Кеше үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла шундай аҙым, шундай ҡыйыулыҡ эшләргә тейеш тә инде - мин шундай геройҙарҙы яратам. "Ай тотолған төндә"ге Дәрүиште 100 процентҡа аңлайым, әммә барыбер уны шул кимәлдә эшләп булманы кеүек, сөнки күңелемдә ундай сифат юҡ. "Әлифбанан бер себеш" моноспектакле эстон әйбере булһа ла, тәржемә яһалып, ул беҙҙең милли драматургияға шул тиклем яраҡлашты. Халыҡсан драматургияның асылы шунда, әгәр ҙә ысын драматург икән, уның әҫәрен һәр халыҡ минеке, тип ҡабул итә. Милли театрҙы донъя кимәленә сығарырға теләй икән, драматург ошо ябай ғына хәҡиҡәтте онотмаҫҡа тейеш. Һәр милләттең йөрәгенә үтеп инергә бурыслы ул. Ошо йәһәттән "Әлифбанан бер себеш" өсөн йәнем тыныс.

**▸ Башҡорттарҙың йыл һынамыштарының шундай бер үҙенсәлеге бар: борон мөсәл эсендәге йылдар "ҡаты йыл" йәки "ир-ат йылы", "йомшаҡ (еңел) йыл" йәки "ҡатын-ҡыҙ йылы" тип йөрөтөлгән. Уның буйынса маймыл йылы ҡаты йылдар исемлегендә. Тағы ла иң ҡыҙығы, ҡаты йылда тыуған егеткә йомшаҡ йылда тыуған ҡыҙ иш түгел, тигәндәр...**

- Маймыл йылының ҡаты килерен бер аҙ фаразларға булалыр. Ун ике йыл элек нимәләр булғаны хәтеремдә юҡ, шулай ҙа дыуамал йыл, тигәйнеләр, ахыры. Донъялағы әлеге сәйәси хәлгә, төрлө конфликттарға, долларҙың үҫешенә ҡарағанда, бигүк еңел йыл булмаҫ быйыл да. Йә бер яғын, йә икенсе яғын күрһәтер маймыл. Шуға ла маймыл йылында кеше булып ҡала алһаҡ, бөтөн проблемаларҙы еңеп сығырға булыр ул. Моғайын да, маймыл йылында һәр хәлгә юмор менән ҡарау дөрөҫ булыр, күңелгә ныҡ яҡын алмайынса, ныҡ ҡайғырмайынса. Маймыл да бит ҡыҙыҡ йәнлек, көлөп ебәреүе лә ихтимал, көйөп китеүе лә бар.

Ҡаты йылда тыуған егеттең ҡаты йылда тыуған ҡыҙға өйләнһен тигәнендә, йыл сифатының кеше холҡона ныҡ йоғонтоһо бар, тигәнгә ышаныуҙан киләләр инде. Беҙҙең ғаиләлә мин генә түгел, ҡатыным Гөлнара (Г. Әмирова, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы - **Ред.**) ла, ҡыҙыбыҙ Айсулпан да маймыл йылында тыуған. Эмиль улыбыҙ ғына йылҡы йылыныҡы. Шуға ла ул беҙгә шаярып: "Һеҙ хәлегеҙҙән килгәнсе мине егеп йөрөтәһегеҙ, мин йөк тартҡан кеүек һеҙҙең өсөгөҙҙө лә тартам", - тиергә ярата. Хәҙер улыбыҙ айырым йәшәй, ә мин ике "маймыл" ҡатын-ҡыҙ менән бер үҙем йәшәйем. Бик хис-тойғоға байбыҙ, ул яҡтан оҡшағанбыҙ. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә тыныс, матур ғына итеп һөйләшкән нәмәләрҙе беҙ, бәлки, ныҡ ҡысҡырып тикшерәбеҙҙер. Бәләкәй генә ваҡиғаны ла ҙур итеп ҡабул итеп һөйләйбеҙҙер. Был, бәлки, маймыл йылында тыуғанға шулайҙыр, бәлки, актер булғанға хистәр ҡайнап торалыр. Сөнки ситтән берәйһе ҡарап торһа, аптырап: "Кит, проблема буйынса шул тиклем фекер алышып буламы икән", - тиер ине. Беҙгә хисле булыуыбыҙ әллә ни ҡамасауламай, нисек ҡыҙып китәбеҙ, шул тиклем тиҙ һыуынабыҙ, аҙаҡтан көлөп тә алабыҙ.



***Маймыл йылының ҡаты килерен бер аҙ фаразларға булалыр. Ун ике йыл элек нимәләр булғаны хәтеремдә юҡ, шулай ҙа дыуамал йыл, тигәйнеләр, ахыры. Донъялағы әлеге сәйәси хәлгә, төрлө конфликттарға, долларҙың үҫешенә ҡарағанда, бигүк еңел йыл булмаҫ быйыл да. Йә бер яғын, йә икенсе яғын күрһәтер маймыл. Шуға ла маймыл йылында кеше булып ҡала алһаҡ, бөтөн проблемаларҙы еңеп сығырға булыр ул. Моғайын да, маймыл йылында һәр хәлгә юмор менән ҡарау дөрөҫ булыр, күңелгә ныҡ яҡын алмайынса, ныҡ ҡайғырмайынса. Маймыл да бит ҡыҙыҡ йәнлек, көлөп ебәреүе лә ихтимал, көйөп китеүе лә бар.***

✓ *Элегерәк Өфөнөң ит комбинаты килә лә, итте арыу ғына хаҡҡа һатып ала торғайны. Бөгөн, мәҫәлән, ауыл биләмәһе башлығы кемдә күпме һата торған мал барлығын иҫәпләп, уларға хәбәр итһә, кешегә ниндәй ҙур ярҙам булыр ине.*

Актерҙар белә, кире геройҙың ҡылығын да уны ошо хәлгә алып килгән ваҡиғаларҙы барлап, аҡларға була. Тормошто белеү ролдәр эшләгәндә ярҙам иткән кеүек, тормошто ла ролдәр аша яҡшыраҡ аңларға була, сөнки уның нигеҙендә психология тигән фән ята. Йондоҙнамәләр ҙә кешене яҡшыраҡ аңларға тырышыуҙан киләләр. Беҙҙең балаларҙың йәш айырмаһы 14 йәш. Улыбыҙ студент саҡта тыуҙы, уға иғтибар ҙа етмәгәндер инде. Театрға эшкә килгәс, тәүлектәр буйына эшләргә тура килә ине. Ҡыҙыбыҙҙы өсәүләп тәрбиәләйбеҙ. Иғтибар күберәк булһын, тип тырышабыҙ, сөнки бала саҡта алып еткерелмәгән һөйөү аҙаҡтан кире эҙемтәләргә килтереүе ихтимал. Исмаһам, быныһы сәнғәт яғына ҡарамаҫ, тип ышанабыҙ инде, шулай ҙа бейеһен дә, музыка менән дә шөғөлләнһен, тибеҙ. Ғөмүмән, мине хәҙерге йәштәрҙең һәр нәмәгә үҙ фекере булыуы һоҡландыра. Ул йәштә миңә нимә тип әйтәләр, мин шуны эшләй һәм шулай дөрөҫ була, тип уйлай инем. Айсулпан ҡайны берҙә, былай миңә оҡшамай, былай дөрөҫ түгел, тип үҙ ҡарашын белдерә. Әлбиттә, уны уйынан кире күндерергә мөмкин, шулай ҙа ныҡлы логикаһы булыуы миңә оҡшай.

**▸ Маймылдарҙы, ысынлап та, һәр уйынан кире күндереп була, тиҙәр. Иң ябай ғына ҡаршылыҡ та кәйефтәрен генә түгел, пландарын да боҙа, имеш…**

- Был тағы ла уның ниндәй маймыл булыуына бәйлелер ул, ай-һай. Мин, мәҫәлән, ныҡ ныҡышмал кеше. Ҡыҙым да шулай. Нимәләр килеп сыҡмаясаҡ, тип кире күндереү мөмкин түгел беҙҙе, кәрәк булһа ла, булмаһа ла, аҙағынаса барабыҙ. Бер тапҡыр Айсулпан ихатала уйнағанда тәгәрмәс тип аталған күнегеү эшләргә өйрәткән кемдер. Быныҡы килеп сыҡмаған. Ҡайтты ла, көнө-төнө шөғөлләнеп, шул күнекмәне эшләргә өйрәнмәйенсә туҡтаманы. Эмиль бала сағында бөтөнләй улай түгел ине. Ул уйынсыктан да тиҙ ялыға торғайны. Кәйефкә килгәндә, минең хәҙер кәйеф тиҙ үҙгәрә. Йәш үтеү менән ирегеттин тирене йоҡара, ахыры. Бигерәк нескә күңеллегә әйләндем кеүек. Уйлап ҡараһаң, йәш арткан һайын, аҡыл ултырып, кеше тынысыраҡ булырға тейеш кеүек. Үтә гәҙеллек көсәү тойғоһо ла ташламай. Нимәнеңдер дөрөҫ эшләнмәй икәнен күрһәм, ҡул һелтәп ҡуя алмайым.

**▸ Быйылғы йыл Рәсәй киноһы йылы тип иғлан ителде. Кино актеры булараҡ, республика быңдай тематикалы йылға әҙерме, нисек уйлайһығыҙ?**

- Кино ҙур матди ярҙам, иғтибар талап иткән өлкә. Киностудия асылған ғына мәлдә пленкаға тәүге фильмды Булат Йосопов төшөрҙө. "Ауыл өҫтөндә йәйғор" тип аталды ул. Мин дә уйнаным унда. Быға тиклем төшөрөлгән телевариантарҙан айырыла ине ул, әле лә хәтерҙә, "Фуджи" пленкаһының метры 2 доллар тора ине. Төшөрөлгән пленканы Мәскәүҙә сығартып алалар. Ул саҡта беҙ ошо ижади төркөмдә башҡорт киноһына башлап юл ярыусылар тип йөрөттөк. Әле мин ҡарайым да, хәл башлыса үҙгәрмәгән. Һуңғы арала ғына ниндәйҙер хәрәкәт бар, "Көмөш Аҡбуҙат" этник һәм милли кино фестивале үтте, был да үҙенә күрә башҡорт киноһына иғтибар йүнәлтә. Бәлки, яйлап был өлкәне финанслау ҙа артыр.

Халыҡ кино нимә икәнен күрһен өсөн кинолар күберәк төшөрөлөргә тейеш. Кино үҫешһен өсөн уға тамашасы тарафынан ихтыяж булырға тейеш. Һәм ул башҡорт тамашасыһын ғына күҙ уңында тоторға тейеш түгел. "Ай тотолған төндә" спектакленән һуң булған бер һөйләшеүҙә Мәскәүҙең театр тәнҡитсеһе шәп фекер әйткәйне, уның мәғәнәһе шулайыраҡ: режиссер спектакль эшләгәндә ниндәй ысулдар ҡулланыуынан бигерәк, әҫәрҙең минең турала булыуы, йә минең турала булмауы мөһимерәк. Әгәр ул минең турала түгел икән, спектакль мине тетрәндермәйәсәк. Бына был - дөрөҫ булмаған драматургия. Киноларыбыҙ ҙа шулай булһа, улар ҙа дөрөҫ булмаған кино булып сығасаҡ, уларҙың тамашасыны ла үҙебеҙҙең башҡорт тамашасыһынан ғына торасаҡ. Тағы ла шул уҡ "Әлифбанан бер себеш" спектаклен миҫалға килтерәм. Уны эстон драматургы Андрус Кивиряхк яҙған, әммә әҫәрҙә беҙҙең халҡыбыҙ ҙа үҙенеке итеп ҡабул итә. Мин уны тыуған ауылымда уйнаным. Башта, аңламаҫтар, тип ҡурҡҡайным, быға тиклем күреп өйрәнгән спектаклдәренән айырылып тора бит. Бер аҙнанан ауылға ҡайтһам, беҙҙең ауыл кешеләренә оҡшап, тип, геройымды йәлләп, илап һөйләйҙәр.

Бына Эмир Кустурицаның фильмдары ла - башҡорттоң да киноһы. Асылда, ул сигандар тураһында кино төшөрә, әммә бөтөн донъя уны ҡарай һәм уларҙың тарихы минең күңелемдә лә әсендерә. Әгәр ҙә милли кино ошо йүнәлештә үҫешһә, дөрөҫ буласаҡ. Ә милли кейемдәр кейҙереп төшөрөлгән кино музей өсөн генә кәрәк. Кино сәнғәтендәге ошо нескә систе тойһаҡ ине. Кино кеше тураһында булырға тейеш. Шуға ла кино йылы тип иғлан ителеүе лә яҡшы, уның сиктәрендә тағы ла бер нисә шәп фильм төшөрөләр, бәлки.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙҙа ун ике йылдан торған мөсәл төшөнсәһе борондан булған. Шуға ла, ышанһаҡ та, ышанмаһаҡ та, йылға бирелгән фараздарға ҡолаҡ һалғылайбыҙ барыбер ҙә. Маймылдар артист һәләтенә эйә, шуға уларҙан яҡшы артист, журналист, секретарь, администратор сыға. Улар үҙҙәрен театрҙа, кинола, телевидениела таба. Тап ошо йүнәлештәрҙә улар бәхетле буласаҡ, тигәне геройыбыҙға ла яғылып ҡына тора, мәҫәлән. Алмас Хәдис улының холоҡ-ҡылығын ул яратҡан геройҙары аша ла тоҫмөрләнәк. Хәйер, йондоҙҙар нимә генә юраһа ла, йылдар имен килһен. Әңгәмәсебеҙ әйтмешләй, иң мөһиме - һәр ваҡытта ла кеше булып ҡалайыҡ!**

*Лэйсэн НАФИҠОВА*
*әңгәмәләште.*

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# АУЫЛДАРҘЫҢ КИЛӘСӘГЕ...

## үҙебеҙҙең ҡулда

**Ауыл - милләт бишеге. Булып үткән IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында ла был темаға айырым иғтибар бирелде, фекер алышыуҙар ойошторолдо. Ҡайһы бер делегаттарға бөгөн башҡорт ауылдарының ниндәй хәлдә булыуы, унда йәшәүселәрҙе ниндәй мәсьәләләр борсоуы тураһында һөйләүҙәрен һорап мөрәжәғәт иттек.**



***Марат КАМАЛОВ, Силәбе өлкәһе Арғаяш районы:*** Бөгөн беҙҙең өлкәләге ауылдарҙың хәле тотош Рәсәйҙәге хәлдән бер яғы менән дә айырылмай. Шулай ҙа мин, беҙ яҡшы йәшәйбеҙ, тип әйтә алам. Колхоз-совхоздар тарҡалғанға ла байтаҡ ваҡыт үтте, әммә бер кем дә эшһеҙ ултырмай. Заманға яраҡлаштыҡ, тиергә булыр ине. Силәбе ҡалаһына йөрөп эшләүселәр бар, шулай уҡ ауыл хужалығын тергеҙеп, фермер хужалыҡтары төҙөүселәр ҙә йылдан-йыл арта ғына. Шәхси ихата хужалыҡтары популярлыҡ яулай. Һыйыр малы, йылҡы, һарыҡ-кәзә, ҡош-ҡортто күпләп аҫрайҙар. Бер кем дә зарланып та ултырмай, балалар ҙа үҫтерәләр, уларға мотлаҡ белем бирергә тырышалар. Бәләкәй эшҡыуарлыҡ төрҙәренә килгәндә, улар араһында сауҙа өлкәһе өҫтөнлөк итә. Ауылдарында аҙыҡ-түлек, көндәлек кәрәкле тауарҙар магазиндары асалар. Шулай ҙа был йәһәттән үҙгәрештәр булыр, милләттәштәр башҡа йүнәлештәрҙе лә үҙләштерер, тип ышанам.

Әлбиттә, барыһы ла һәйбәт, тип әйтеүе генә еңел. Минең йөрәгемә әрнегән проблемалар бар. Мәҫәлән, йәштәр ситкә китә. Китмәҫ ине, күңелдәренә яткан эш юҡ. Хәҙер йәштәр белемле, уҡыған кешенең һәйбәт кенә урында эшләгеһе, ҡалала йәшәгеһе киләләр инде. Ауыл хужалығы йәштәрһеҙ ҡала, шуныһы үкенес.

Тағы ла йәш ғаиләләргә бер мөрәжәғәтем бар - балалары менән башҡортса һөйләшеп, улар өсөн үҙ милли мөхитен булдырырға тырышһындар ине. Йәш саҡта баланың туған телендә һөйләшеүенә әһәмиәт бирмәһәң, өлкәнәйгәс, был турала уйларға һуң була. Һәр ғаилә халҡы алдындағы ошо төп бурысын үтәүгә яуаплы ҡараһын ине. Теле булғандың ғына ере була, ул ошо ерҙең хужаһы икәнен аңлай.

***Сабир КӨҪӘПҠОЛОВ, Бөрйән районы:*** Башлыса башҡорттар ғына йәшәгән Бөрйән төбәгенән килгәнмен һәм минең бөгөнгө көндә халҡыбыҙ өсөн, һәр хәлдә, мин йәшәгән районда иң көнүҙәк проблема - ул тел һәм демография, тиһәм, күптәр аптырар инде. Сөнки беҙ, Монасип ауылы халҡы, республикала тәүгеләрҙән булып дәррәү генә пай ерҙәрен хосусилаштырҙыҡ. Судҡа мөрәжәғәт итһәк, иттек, ғауға күтәрһәк, күтәрҙек, әммә үҙ хоҡуғыбыҙҙы яулап алдыҡ. Беҙҙең районда иген үҫтереү өсөн шарттар юҡ, пай ерҙәре лә бының өсөн ҡулайлы урында түгел. Уларҙы беҙ бесәнлек итеп тотабыҙ. Ауылдың эргәһендә генә урынлашҡан ергә барып, артыҡ сығым түкмәй генә сабып алабыҙ унда үҫкән үләнде. Хәҙер кешенең үҙенең ере булғас, күпләп мал көтөргә тырыша. Тик бына тир түгеп үҫтергән малды һатыуы ғына ҡыйын. Ауыл кешеһенә малды күпләп тотоуға ҡайһы бер закондар ҙа аяҡ сала. Мәҫәлән, быйылғы йылдан баҙарға сыҡҡан ит махсус тәғәйенләнгән урында һуйылырға тейеш, тигәне лә ауыл халҡын аптыратты. Тик һәр ҡанунды урап үтеү өсөн юлдар була. Бөрйәндән, ит һатам, тип ситкә сығып йөрөүе былай ҙа уңайлы түгел ине. Хәҙер халыҡ осһоҙораҡ булһа ла, күрше Татарстандан килгән кешеләргә малын бирә лә ебәрә.

Ауыл кешеһе былай ҙа ит-һөт һатып ҡына артыҡ ҙур аҡса эшләй алмай. Шуға балаларҙы ҡарау, уҡытыу өсөн ҡулға төшкән аҙ генә аҡсаға ла риза улар. Өфөлә, башҡа ҡалаларҙа ауыл хужалығы йәрминкәләре үтеүе яҡшы ул, тик бының менән генә проблеманы хәл итеп булмай. Йәрминкәләргә урындарҙың яҡынса 30 проценты буш тора, тип яҙа гәзиттәр. Сөнки йыраҡ райондарға баш ҡалаға килеп йөрөүе уңайлы түгел. Элегерәк Өфөнөң ит комбинаты килә лә, итте арыу ғына хаҡҡа һатып ала торғайны. Бөгөн быны эшләүе мөмкин түгелме икән? Мәҫәлән, ауыл биләмәһе башлығы кемдә күпме һата торған мал барлығын иҫәпләп, уларға хәбәр итһә, кешегә ниндәй ҙур ярҙам булыр ине.

Шулай ҙа беҙ матди байлыҡҡа йәбешеп яткан халыҡ түгел, был проблемалар хәл ителер ул. Бына йәштәрҙең ситкә китеүе, уларҙың балаларының туған телен онотоуы ҙур бәлә. Бынан өс йыл элек район мәктәптәрендә башҡорт теле сит тел кимәлендә генә тороп ҡалғайны, бер аҙ шаулап, кире башҡортса уҡытыуға күсереүгә өлгәшә алдыҡ. Бөгөнгө көндә район үҙәгендә генә был хәл ҡуҙәтелә, киләсәктә уны төҙәтәсәкбеҙ, тип хужалар вәғәҙә бирә биреүгә. Бына мин 10-сы класты тамамлағансы алгебраны ла, химияны ла, башҡа фәндәрҙе лә башҡортса уҡыным, был миңә юғары белем алырға ҡамасауламаны. Аҡылың булмаһа, ҡытайса уҡыһаң да, бер нәмә лә инмәҫ башыңа. Ә туған тел, киреһенсә, кешенең аңын, зиһенен үҫтереүсе булып тора. Халыҡты бит тел билдәләй, шуны гел иҫтә тотайыҡ.

***✓ Эс яҡтан ҡуйылған бер түгел ике йоҙаҡты асып индерҙе. Бындай серлелеккә аптыраны егет, күңеленә шом төшкәндәй булғайны ла, баш табип бүлмәһендә ҡоласын йәйеп ҡаршы алған алсаҡ врачты күргәс, шиктәре таралып китте.***

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**

# АЛДА ҒҮМЕР БАР ӘЛЕ

**ПОВЕСТЬ**



– Саф-фыя!!! Ҡар-рале-е! - тип ҡысҡырып йырлап ҡыҙҙар төркөмө артынан эйәргәнен генә хәтерләй Булат. Артабан иһә "Сафыя" уға ҡарағандырмы - юҡмы, йәиһә араларында Сафия тигәне булғандырмы ла... улары инде мөһим түгел. Ә бына иҫерек егеттең уҡытыусы ҡыҙҙар йәшәгән йорттоң ишеген астырам, тип, тәҙрәләрен ҡыйрата һуғып бөтөүе... мөһимдер, күрәһең. Шулай булмаһа, әле шул төндөң мажараларын иҫләргә тырышып сетерәйеп, суд эскәмйәһендә ултырыр инеме. Эх, иҫергән шул... Әпәт. Һәм сираттағы эшен асалар. Бушҡа ла түгел. Ҡыҙҙар, моғайын, алдап һөйләмәй бит прокурорға. Ана ла, һәр береһе: "Иҫерек ине, клубтан уҡ артыбыҙҙан эйәрҙе, беҙ унан ҡурҡып ҡастыҡ, ҡайтып бикләндек, ул ишекте астырам тип тәҙрәләрҙе онтай һуғып бөттө", - тип теҙә генә. Һуңғыһылыр быныһы, ултыртырҙар...

Контузия алып ҡайтҡан чечен яуы ветераны икәнлеген иҫәпкә алып, шартлы өс йыл сәпәнеләр ҙә, быяла хаҡын түләргә ҡуштылар. Бәхеткә ҡаршы, тир ине, әгәр былар бәхеткә инһә. Апаһына күҙен күтәреп ҡарай алмай. Илай шул апаһы, плащы өҫтөнә һалған ебәк шарфы менән битен ҡаплап алып буҫлыға.

- Йә инде... Илама улай, - тигән булды ахырҙа шыбырлап, - Кеше ҡарай...

- Ҡараһын, - ти апаһы үкһеү аша, - оялыуҙан үткәнбеҙ инде...

Бында ла апаһы хаҡлы. Ҡустыһының хеҙмәттән ҡайтҡанына, ике йылдан ашыуыраҡ булһа, шул арауыҡта бындай оятты нисәнсегә кисерә улар. Ауыл советы, милиция тупһаһы кимәленән үтте, хәҙер тура прокурорға саҡырта ла ҡуялар. Хас та танылған енәйәтсе һымаҡ. Уныһы ла "Ҡарағолов" тип танып тора. Таныр ҙа...

Әле үкенеүенән бер фәтеүә лә юҡ Булатҡа, апаһы йәл. Шуға ғына йәне әсей. Тәскирә бит уларҙы, ике малайҙы, әсәләре үлгәс, бер үҙе тәрбиәләп үҫтерҙе. Уларҙы ҡарайым тип уҡыуын ташлап ҡайтты. Уларҙы йәлләйем, тип, ятраҡан кешеһенә лә сыҡмаған, тиҙәр. Быныһын күрше инәй Булатты әрләгәндә: "Һин этте уйлап апаң иргә лә бармай утыра, мына тигән итеп үҙ симъяһын ҡороп, балдарын бағып ятыр ине. Ҡалай һоратты, ҡалай илап китте бит анау егет", - тип бәйән итеп ташлай. Яҙа-йоҙа ишетеүенсә, күрше ауылдан булған шикелле уныһы. Апаһы менән бергә уҡығандармы институтта. Хәҙер ҡайҙалыр, Булат бәләкәйҙә булған хәл, өйләнгәндер инде.

Ҡайтыусыларҙы ҡапҡа төбөндә генә ҡаршыланы Самат ҡустылары, урам яҡҡа сыҡманы. Ул да оялалыр. Шуға бөгөн мәктәпкә лә бармай ҡалған, күрәһең. Апайҙарының илауҙан шешенгән йөҙөнә йәлләп ҡарап:

- Нишләттеләр тағы, - тип мөңгөрләне кинйәләре.

- Нишләтһендәр, шартлы өс йыл бирҙеләр. Белмәйем, ахыры булырмы бының, шул мине лә ҡәбергә тыҡмайынса туҡтамаҫтыр... - Тәскирә ҡабаттан йәштәренә быуылды.

Күрше Әлифә әбей ҙә аңғара һалып, ҡыштыр-ҡыштыр йүрмәләп килеп етте лә, тарамыш йоҙроғон йөҙө тәңгәлендә уйнатып, ғәҙәтенсә, һыҙырып әрләп ташланы:

- У-уй, бүре йыҡҡыр! Тума! Апаңды һыҡтатыуҙан башың сыҡманы. - Булат тыңлап тормай өйгә инеп киткәс Тәскирәгә бороддо, - Зат затҡа тартмаһа осаһы ҡыйыш була ти, шул башһыҙ атаһына ҡошаған инде был малай, ҡыҙым, тас шул алйот бит.

Тәскирә өндәшмәне. Нимә тиһен инде? Бер уйлаһаң, хәҙер унын кемгә оҡшауын асыҡлауҙан ни фәтеүә. Үҙенең атаһы үлеп ҡалғас, әсәһе, әллә нишләп ошонда ҡайҙандыр килеп хасил булған бер әҙәмгә сыҡты ла, ҡустыларын тапты. Шыр алйот булды шул уныһы, эсте лә һуғышты, эсте лә һуғышты. Ярай себерҙә эшләне, былай булғанда ғаиләгә бер генә лә тынғы булмаҫ ине. Унда ла әсәһенең йөрәген бөтөрөп өлгөргән, өлкән улының башланғыс синыфты тамамлауын да күрә алманы. Кинйәһе яңы уҡырға ғына төшөргә тора ине. "Хәлем юҡ, барып күренеп киләм", - тип кенә киткән ерҙән моргтан барып алдылар. Эстән янған, күрәһең...

Ҡустыларын берәүгә лә бирмәне Тәскирә. Ныҡ торҙо. Әсәһен ерләргә ҡайтҡан еренән кире китмәне лә ҡуйҙы. Балаларҙы алырға килгәндәрҙең: "Уҡыуыңды тамамларға кәрәк. Малайҙарҙы хөкүмәт ҡарап торор, унан алырға теләк белдергән туғандарығыҙ ҙа юҡ түгел", - тип өгөтләүҙәрен ҡолағына ла элмәне. Ҡалдыра алмай ине ул бәләкәстәрҙе, әсәһе лә моғайын, "ташлама" тиер ине. Булат менән Самат та, апайҙарына аҫылынып йөрөп үҫкәс, уны әсәйҙән кәм күрмәй, икеһе ике яҡтан ҡосаҡлап алып мәңге ысҡынмаҫтай булып торалар. Нисек тартҡылап айыраһың инде шуларҙы - ҡалдылар.

Шул ваҡыттан алып улар бергә. Тәскирә ситтән тороп уҡыуын тамамланы, ул сессияла саҡта донъяны Әлифә ҡарсыҡ алып ҡалды. Уҫал булып, туҡтауһыҙ һөйләнеп йөрөһә лә, шәп күршеләре, малды ла, малайҙарҙы ла асыҡтырманы.

Булат, мәктәпте бөтөрөп, бер йыл техникумда уҡып өлгөргәйне хеҙмәткә алдылар. Унда йөрөп ҡайтты ла, тик, уҡыуын дауам итергә теләмәне. Саматтары сығарылыш синыфында быйыл. Барыһы ла һәүетемсә, кешеләрсә бара кеүек ине лә һуң. Нимә булды ул был Булатына? Ҡасан шулай боҙолоп өлгөрҙө? Армияға тиклем улай түгел ине бит һуң. Эйе, шаянлығы булды, шуҡлығы арҡаһында үҙенә эләгә лә торғайны. Тик бит был саҡлы түгел ине. "Тегенән" шулай булып ҡайтты ул, бары "тегенән".

Ике күрше, бит-ҡулы ҡыл иләк ише сатраш сирыш менән ябылған кәкере әбей ҙә, утыҙ бишкә етеп, кәүҙә-һыны сымырылана башлаған ҡыҙ (ауыл үлсәме менән ҡарт ҡыҙ), һәр кеме үҙ уйына батып аптырашып, һикәлтәлә ултырып ҡалды.

* * *

Оло ҡала вокзалы үҙе бер баҙар. Һатынған-ҡағынғанынан тыш, ултыра-ята ял иткәне, китеү мәлен көткәне, урындағыларҙы бимазалап хәйер һорап йөрөгәне лә, уларҙан ҡала бушҡа алаҡанлағандары ла етәрлек. Шулай ҙа Булатҡа бәйләнгәне юҡ. Бейек пальма гөлө төбөндәге эскәмйәлә ярты көндәй ойоп ултыра. Тороп йөрөр ине - урынһыҙ ҡалыр. Тик ҡуҙғалыр ахыры, тәҡәтһеҙ тартҡыһы килә. Ҡасан килеп алырҙарын белмәй күпме ултырырға була, бәлки, улар кискә генә, бәлки, бөгөн булмаҫ та әле. Сығыр алдынан шылтыратҡанында: "Бер урын бөгөн-иртәгә бушай, шул көн, шул сәғәттә вокзалда көтөгөҙ, эҙләп табырбыҙ", - тигәйнеләр бит.

Теге көн, һуңғы ғауғаһынан һуң, апаһы, сараһыҙҙың көнөнән, интернеттан контузия алғандарға ярҙам итерҙәй реабилитация үҙәктәре адрестарын ҡараштырырға кереште. Булат үҙе лә шул хаҡта уйланып йөрөй ине. Табиптарҙан ярҙам һорамайса булмаҫ, тигән ҡарарға килгәйне уйының ахырында. Апаһы сайттан-сайтҡа инеп иғландарҙы уҡый торғас, Ҡурған өлкәһендә урынлашҡан бер клиникаға туҡталды. "Тормош ауырлыҡтарына юлыҡҡандарға, эскелек, наркомания ҡоллоғона эләккәндәргә бушлай ярҙам итәбеҙ. Дауалау хаҡын килеүселәр хужалыҡта хеҙмәт итеп ҡайтара. Дауалау ваҡыты 4-6 айҙы биләй" тип яҙылған юлдар Тәскирәгә "ҡустың һауығып ҡайтыр" тигән шикелле уҡылды һәм тиҙ арала йыйындырып, барлыҡ аҡсаһын тотторҙо ла ебәрҙе.

Төш етеүгә, апаһы төйнәп ебәргәндәр менән тамаҡ ялғап алмаҡсы булғайны, кеҫәһендәге телефоны тауыш бирҙе. Алһа, тегеләр икән. Ҡоро ғына "Тышҡа сыҡ, шундай-шундай номерлы машина янына кил", тинеләр. Йәһәтләп эҙләп тапты. Руль артындағы ир яҡшылап һорашып та торманы, башы менән генә иҙәп инеп ултырырға саҡырҙы ла, инеп ултырыуына ҡуҙғалып та китте. Машинала Булаттан тыш тағы ла берәү булып сыҡты. Кеше тигәненән килгән һаҫыҡ еҫтән танауын сирып, егет, уға ярты кәүҙәһе менән тотошлай боролоп уҡ баштан-аяҡ күҙ йүгертте. Тик тегеһенең берәүҙә лә эше юҡ, керле курткаһына бысраҡ башын тартып мышнай бирә. Әллә йоҡлай, әллә иҫерек. Ул да ошо хәлдә дауаланырға китеп бара микән. Былай булһа, бик күңелле компания йыйыла.

Өс сәғәттән ашыу юл үтеп, тайгалағылай ҡарағай шырлығына килеп инделәр. Был яҡта ла ылыҫлы урмандар бар икән. Һәр ағасты урап йөрөгәндәй тар ғына асыҡлыҡтар буйлап та әллә күпме арауыҡ барҙылар. Был юл, гүйә, кемделер аҙаштырырға теләгәндәй, берсә күренеп, берсә юғалып, берсә икегә, берсә өс-дүрткә саталанып алға тәгәрәй. Ниһайәт, бейек тимер ҡапҡа янына килеп туҡтанылар. Һаҫыҡтан саҡ сыҙап килгән Булат шундуҡ ишек тотҡаһына үрелгәйне, руль артындағы һуҡ бармағын күтәреп "көтөп тор" тигәнде аңғартты ла, әсе итеп сигнал бирҙе. Ул арала эстән биктәрҙе салтырлатып ысҡындырып, ҡапҡаларҙы ҡайырып асып ҡуйҙылар. Машина эскә йөҙөп үткәс, артынса кире йоҙаҡ һалынды. Булат төшөп баҫҡас, ойоған аяҡтарын яҙған арала, бейек ҡоймалар менән уратылған ҡәлғә эсендәге ҙур булмаған йорттарҙы һәм урталағы ике ҡатлы бинаны күҙҙән үткәрҙе. Тәүге ҡат алам-һалам булып күренһә лә, икенсе ҡаттың пластик тәҙрәләре тимер рәшәткәләр менән ҡапланған ине.

Булаттарҙы алып килгән кеше баяғылай баш иҙәп кенә эскә әйҙәне. Оҙон коридор буйлап үткәндә бүлмәләрҙән кемдәрҙер һонолоп ҡарап ҡалды. Икенсегә күтәрелеп, ҡат араларын кәртәләп торған рәшәткә асылғанын көттөләр. Баштан аяҡ ҡара комбинезонға төрөнгән уҫлаптай кәүҙәле һаҡсы ҡулындағы оло бәйләм асҡыстары араһынан берәүһен һайлап алып, эс яҡтан ҡуйылған бер түгел ике йоҙаҡты асып индерҙе. Бындай серлелеккә аптыраны егет, күңеленә шом төшкәндәй булғайны ла, баш табип бүлмәһендә ҡоласын йәйеп ҡаршы алған алсаҡ врачты күргәс, шиктәре таралып китте.

- О-о! Ниндәй егеттәр килә! Рәхим итегеҙ! Рәхим итегеҙ, беҙҙең дворецҡа! - Урта йәштәрҙәге ағай өтәләнеп килеп башта Булатҡа, унан теге хәстрүшкә ҡуш усын һуҙҙы, - Богдан Радионович булам, дауалаусы врач.

Инеүселәр ҙә исемләп танышып, ҡайҙан килеүҙәрен әйтте. Яңы айныға башлаған юлдашы үҙен ниңә бында алып килеүҙәрен аңлатыуҙы талап итә башлағайны, оҙатып йөрөүсе санитар уны йәһәтләп алып сығып китте. "Йоҡлап алғас, һөйләшербеҙ" тип ҡалды Богдан Радионович та. Ә Булат врачҡа оҡшаны инде. Уны күргәс тә ҡояштай балҡып киткән булһа, сисендереп тыңлап, тикшереп сыҡҡас ҡәнәғәтлеге арта ғына төштө.

- Яҡшы, бик яҡшы, йәш кеше. Һинең кеүек һау-сәләмәт егеттең дөрөҫ йәшәүе мөһим. Һиңә бит әле ғаилә ҡораһы, донъя көтәһе бар, - тип киләсәккә әллә ниндәй яҡты өмөттәр биргәндәй һөйләнде. Һуңғы оҙайлы ваҡыт эсендә тәүге тапҡыр рәхәт булып китте. Күңеленә йылы йүгерҙе Булаттың. Аҙаҡ санитарға эйәреп йөрөп постель кәрәк-яраҡтары алып, фәҡир генә палатаға инеп урынлашҡас та, кәйефе күтәренке булды. Арыған тәнен, ниһайәт, ҡаты булһа ла түшәккә һуҙып һалғас, иҫһеҙ булып йоҡлап та киткән. Кемдендер ишектән башын тығып: "Киске ашҡа" тип ҡысҡырғанын да ишетмәне хатта.

* * *

Булатты, ауыл малайы икәнлеген иҫәпкә алып, һарай төҙөү эшенә ҡуштылар. Был эштә оло йәштәге Палыч тигән берәү менән бөтөнләй малай ҡорондағы ғына үҫмер йөрөй икән. Яңы кешене һынсыл ҡарап ҡаршы алдылар. Артыҡ һөйләшмәнеләр ҙә тигәндәй, шулай ҙа төшкәсә йышыу аппараты аша арыуыҡ таҡта үткәрҙеләр. Төштән һуң бағаналарға соҡор ҡаҙыу менән мәшғүл булдылар. Яңы эшсенең ташлы ергә ломды йән көскә ҡаҙалта һуғып, эре-эре кәҫтәрҙе аҡтарып килтереп сығарғанын ҡарап-күҙәтеп йөрөгән Палыч: "Көсө күп бының, хет һабанға ек", - тип ҡуйҙы.

Ике-өс көндән дауалау үҙәгендә егермеләп кеше барлығын асыҡланы Булат. Башлыса ир-егеттәр, ололары ла, йәшерәктәре лә бар. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан саҡ ҡына ҡатын төҫө ҡалған икәү ҙә, әллә ниҙә бер күренгән ауырлы берәү. Уныһын да алыҫтан ғына аңғарҙы, йөҙөн сырамытманы ла.

**(Дауамы бар).**

БАЛАЛАР ҠОРО

# КҮРҺӘТ ӘЛЕ, ДУҪҠАЙЫМ, НИНДӘЙ ТӘРБИӘ АЛАҺЫҢ?



**Һүҙҙең дөрөҫөн баланан ишет, тигән халыҡ аҡылына таянып, Шамонино ауылының "Ыҫыҡҡай" балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре менән ололарҙы ла "борсоған мәсьәләләр" тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ. Балалар баҡсаһының "Аҡбуҙат" тип аталған өлкәндәр төркөмөнә йөрөүсе Йәсминә Ильясова, Бәхтийәр Иштанов, Зөлхизә Исхаҡова һәм "Йәйгор" бәләкәстәр төркөмө тәрбиәләнеүселәре Нәркәс Вәхитова менән Тимур Ишемголовтың яуаптарын һеҙҙең дә иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.**

➔ **Балалар, бына яңыраҡ ҡына бөтә кешеләр ҙә бер-береһенә һаулыҡ һораша торған көндө билдәләнек. Һеҙ бер-берегеҙгә, өлкәндәргә һаулыҡ һорашып йөрөйһөгөҙмө?**

**Зөлхизә:** Һәр ваҡыт һаулыҡ һорашып йөрөйөм. Ҡайҙа барып инһәң дә, "Һаумыһығыҙ!" тип әйтергә кәрәк, ә сыҡҡанда "Һау булығыҙ" тип хушлашыу дөрөҫ була.

**Бәхтийәр:** Был байрам бөтәһе лә һаулыҡ һорашып йөрөргә тейеш булыуын белгән өсөн үткәрелгәндер ул, ибет? Кешегә сәләм бирмәһәң, яҡшы булмай инде ул...

**Йәсминә:** Ололар менән һаулыҡ һорашһаң, улар һиңә "Һаумы, балам", тип яуап бирә лә, үҙҙәре ныҡ ҡыуана. Уларҙы шатландырыуы өсөн байрам көн булмағанда ла һаулыҡ һорашырға кәрәк.

**Тимур:** Ә беҙгә тәрбиәсе апай өлкәндәр менән: "Һаумыһығыҙ!" - тип, төркөмдәге малайҙар һәм ҡыҙҙар менән: "Сәләм!" - тип сәләм бирергә кәрәк, тип өйрәтә.

**Нәркәс:** Мин дә баҡсанан ҡайтыр алдынан тәрбиәсе апайға "Пока!" тием. Ә ул беҙгә: "Иртәгә тағы ла килегеҙ, йәме", - ти.

**Тимур:** Тәрбиәсе апайҙың "Ә иртәгә ял", тип әйткәнен яратам. Ул шулай тиһә, мине балалар баҡсаһына алып килмәйҙәр, өйҙә мультиктар ҡарайым.

**Нәркәс:** Мин ял иткәндә "Сәңгелдәк" ҡарайым. Унда ошо тирмә эсендәге сәңгелдәккә оҡшаған сәңгелдәкте һәм бәләкәй генә бәпесте күрһәтәләр. Ул бәпес ҡыҙыҡай, ә беҙҙең өйҙә малай бәпес бар.

➔ **"Сәңгелдәк" ҡарағас, башҡортса бик күп әкиәттәр беләһегеҙҙер инде. Башҡортса һөйләшәһегеҙ инде, ибет?**

**Тимур:** Юҡ. Мин өйҙә русса һөйләшәм. Әсәйем шулай ҡуша, шулай кәрәк, ти.

**Нәркәс:** Мин башҡортса һөйләшәм, әкиәттәрҙе лә күп беләм. Тайышҡа өләсәйем менән олатайыма ҡунаҡҡа барһаҡ, улар матур әкиәт һөйләй, йырҙар йырлай, мине арҡамдан яраталар, үәт.

**Бәхтийәр:** Мин дә Баязит ҡустым менән башҡортса һөйләшәм. Ә үҙем "Лунтик", "Маша и Медведь" йәнһүрәттәрен ҡарарға яратам.

**Йәсминә:** Әсәйем менән атайым башҡортса бик яҡшы һөйләшә, ә беҙ Диана апайым менән башҡортса бөтә һүҙҙәрҙе лә аңламайбыҙ. Әсәйем өйрәтһә генә аңлай башлайбыҙ.

**Зөлхизә:** Мин гел башҡортса һөйләшәм, руссаны һөйләшмәһәм дә беләм. Бәләкәстәр төркөмөнә йөрөгәндә өйрәндем.

**Йәсминә:** Диана апайым менән бер-беребеҙгә әкиәттәр һөйләйбеҙ. Өс өләсәйем һәм ике олатайыма ла үҙебеҙ әкиәт һөйләйбеҙ. Өләсәйем килгәндә миңә Урал батыр тураһында әкиәт һөйләне. Ә Дианаға мәктәптә Салауат Юлаев тураһында әкиәт өйрәткәндәр, хәҙер уны мин дә беләм.

**Бәхтийәр:** Урал батыр тураһында мин дә беләм. Ул бик батыр, көслө кеше булған һәм ҡылысы менән аждаһаны ҡырған, ти. Салауат Юлаев та аждаһаларға ҡаршы һуғышҡан.

**Нәркәс:** Минең туғанымдың исеме лә Урал, тик ул көслө түгелсе. Әле уға бер йәш, үҫкәс, көслө булырмы икән?..

➔ **Әлбиттә, көслө буласаҡ. Ә һеҙҙең үҫкәс кем булғығыҙ килә?**

**Зөлхизә:** Минең доктор булғым килә. Теште дауалар инем.

**Тимур:** Ә мин үҫкәс атай булам.

**Йәсминә:** Минең парикмахер булғым килә. Әле матур итеп сәс үрергә өйрәнәм.

**Бәхтийәр:** Мин үҫкәс пожарник буласаҡмын, сөнки улар балаларҙы уттан ҡотҡара, кешеләргә ярҙам итә.

**Нәркәс:** Үҫкәс, доктор булам. Үҙем уколдан ныҡ ҡурҡам, әсәйем Уралға укол һалһа ла илайым. Шуға, үҙем үҫкәс бәпестәрҙе илатмай ғына укол һалырға өйрәнәм.

**Тимур:** Танкист булғым да килеп китә ҡайһы саҡ...

➔ **Балалар баҡсаһында ниндәй эштәр менән мәшғүл булаһығыҙ?**

**Бәхтийәр:** Бында төрлө уйындар уйнайбыҙ, тәрбиәселәр, уйынсыҡтарҙы йыйығыҙ, тиһә, йыйып ҡуябыҙ.

**Тимур:** Мин машинала уйнайым. Бында тәмле бутҡа ашаталар, мин вис ашап бөтәм. Балалар баҡсаһына килер өсөн иртә менән йоҡонан торорға кәрәк бит, мин ҡайһы берҙә тиҙ торам былай. Ҡайһы берҙә балалар баҡсаһына килге килмәй...

**Зөлхизә:** Ә мин төшкөһөн йоҡларға яратмайым. Бөтәһе лә йоҡлағас, ятып торам инде. Һүрәт төшөрөргә, мультик ҡарарға яратам.

**Йәсминә:** Мин кухня уйнарға яратам. Дуҫтар менән баҫтырыш уйнайбыҙ, тәмле манный бутҡаһы ашайбыҙ. Төшкөһөн рәхәтләнеп йоҡлайым. Көн шулай үтеп китә.

**Нәркәс:** Беҙгә тәрбиәсе апай "Балалар урам буйлап баралар, һикереп тә алалар, йүгереп тә алалар, ултырып та алалар", тигән уйынды уйната. Шундай күңелле уйын!

**Тимур:** "Шалҡан" әкиәтен уйнағанда ла күңелле була, әйе бит, Нәркәс? Үҙебеҙ әбей, бабай, эт, бесәй, сысҡан, ҡыҙыҡай булып уйнайбыҙ.

**Нәркәс:** Минең атым бар, уға ултырһаң, һикерә. Шуны ныҡ яратам инде мин.

**Тимур:** Минең дә атым бар. Тик ул Асыла, өләсәйҙә.

**Нәркәс:** Ә минең әсәйемдең дә әсәһе бар, уның исеме өләсәй, үәт!

➔ **Балалар баҡсаһында байрамдар үткәреләме?**

**Йәсминә:** Иң оҡшаған байрам - йәрминкә. Унда беҙ компот һаттыҡ. Ә мәктәптә үткән йәрминкәлә Дианаға әсәй ике пицца бешереп биргәйне, уны ла һатып алғандар.

**Бәхтийәр:** Мин йәрминкәлә бер нәмә лә һатманым. Һабантуй байрамы оҡшаны. Һабантуйҙа батут бар ине. Көслө кешеләр көрәштеләр, мин ҡарап йөрөнөм.

**Нәркәс:** Шул һабантуйҙа минең атайым көрәште, ә мин арыным да иланым.

**Зөлхизә:** Һабантуйҙа булғаным юҡ шул, туйҙа ғына булғаным бар былай.

**Йәсминә:** О, унда ныҡ ҡыҙыҡ була Зөлхизә. Һабантуйҙа батутта һикерҙек, төрлө уйындар уйнаныҡ. Бер стенаға шариктар теҙеп ҡуйғандар ҙа, шуны таш бәреп шартлатырға кәрәк, еңһәң, уйынсыҡ бүләк итәләр. Бик ауыр уйын, мин уйнап ҡарарға ла ҡурҡтым.

➔ **Ҡышҡыһын нимә эшләйһегеҙ?**

**Нәркәс:** Мин атайым менән ҡоштарға өй эшләнем. Унда икмәк һалып ҡуйғайныҡ, турғайҙар килеп тә етте.

**Бәхтийәр:** Беҙ ҙә ҡоштарға ике оя эшләп ҡуйҙыҡ. Береһен атай һәм олатай менән эшләп, мунсаға ҡуйҙыҡ. Икенсеһен атай һәм ҡартатай менән эшләнек тә, гаражға элдек. Ҡышҡыһын унда төрлө төҫтәге турғайҙар килә.

**Йәсминә:** Ә беҙ ҡоштарға оя эшләнек тә, ашарға һалырға онотҡанбыҙ. Улар үҙҙәре шунда урынлашып, ашарға ташынылар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Баланы - баштан, талды йәштән бөк" - бына ниндәй мәҡәлде ата-әсәләргә лә, педагогтарға ла һәр ваҡыт иҫтә тотоу кәрәк. Ә балаға ниҙер эшләргә өйрәтеү һәм яҡшылыҡ, белемлелек, кешелеклелек кеүек мәңгелек төшөнсәләрҙе аңына һеңдереп үҫтереү өсөн ни бары туған телендә һөйләшергә өйрәтеп, үҙебеҙҙең халыҡҡа хас тәрбиә биреү ҙә етә. Быға Шамонино ауылының "Ыҫыҡҡай" балалар баҡсаһына йөрөүсе башҡорт сабыйҙары менән әңгәмә барышында тағы бер тапҡыр инандыҡ. Был сабыйҙарҙың ата-әсәләре баланы бишектән тәрбиәләүҙең мөһимлеген белә, тип ышаныс менән әйтергә мөмкин. Ә балалар баҡсаһы етәкселегенең, тәрбиәселәрҙең уларҙың телған иҫәпкә алырға, тәрбиә эштәрендә хеҙмәттәшлек итергә әҙер булыуы айырым иғтибарға лайыҡ.**

Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.

ФӘҺЕМ

# ТЕЛҺЕҘМЕН...
## сөнки Аллаһы Тәғәлә теләмәгән һүҙҙәрҙе һөйләмәйем



Был хикәйәт тарихи хәл-ваҡиғаларға нигеҙләнгән. Егерме биш йәшлек йәш егет алма баҡсаһынан йыраҡ түгел ял итеп йөрөгән. Бер ваҡыт ул үҙененә бик ас икәнлеген һиҙеп ҡалған. Шул ваҡыт ул баҡсанан алма өҙөп алған. Алманың яртыһын ашап бөткәс, баҡса хужаһынан рөхсәт һорамағанлығы иҫенә төшкән. Ул тирә-яғына ҡараған һәм яҡында ғына ултырған бер ағайҙы күреп ҡалған. Егет уға яҡын килгән дә: "Мин ас инем. Алма өҙөп алдым да, яртыһын ашап бөткәс, һинән мин ашаған алманың яртыһы өсөн рөхсәт һорарға килдем", - тигән. Теге кеше: "Мин бит баҡсаның һаҡсыһы ғына. Ә хужа бынан 24 сәғәт йәйәү барырлыҡ ауылда йәшәй", - тигән. Йәш егет шул ауылға ҡарай киткән, баҡса хужаһының өйөнә еткән. Бөтә булған хәлде һөйләп биргән һәм ашаған ярты алма өсөн ғәфү үтенгән.

Баҡса хужаһы: "Һин минең ҡыҙыма өйләнмәйенсә, мин һине ғәфү итмәйем. Был минең берҙән-бер шартым, - тигән. - Өйләнергә рөхсәт бирер алдынан миңә уның тураһында һөйләп бирергә рөхсәт ит. Ул һаңрау, телһеҙ, һуҡыр һәм зәғиф." Йәш егет: "Мин бында Аллаһ Тәғәлә ризалығы өсөн, үҙем рөхсәтһеҙ ашаған ризыҡты хәләл итер өсөн килдем. Тимәк, мин был шартҡа риза булырға тейеш," - тип уйлаған. Бынан һуң ул үҙененең буласаҡ кәләшен күрергә барған. Һәм ҡыҙҙың иҫ киткес һылыулығын күреп иҫе киткән. Аптырап ҡыҙҙан, ни өсөн атаһының уны шундай итеп һүрәтләгәнлеге тураһында һорашҡан. Ҡыҙ былай тип яуап биргән:

*Һаңраумын, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән тауыштарҙы ишетмәйем.*
*Телһеҙмен, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән һүҙҙәрҙе һөйләмәйем.*
*Һуҡырмын, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән нәмәләрҙе күрмәйем.*
*Зәғифмен, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән ерҙәргә йөрөмәйем.*

Шул секундта уҡ йәш егет ҡыҙға өйләнергә ризалығын биргән. Бер аҙҙан уларҙың улы, имам Әбү Хәнифә ан-Нуман тыуған.

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОҠОНОҢ...
## зыяны ла бар

■ Сальмонелла кеүек хәүефле бактериялар печенье менән крекерҙарҙа ярты йылға тиклем йәшәй, тип белдерә Америка ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә бактерияның ағыуланыуға килтергән 5 төрө ҡатнашҡан. Белгестәр крекерҙар өсөн тәғәйенләнгән сырға һәм ер сәтләүегә майына, шулай уҡ печеньеның шоколадтан һәм ванилиндан торған өҫтәмәләренә бактерия ҡушҡан һәм уларҙан сәндвичтар яһаған. Сәндвичтар Цельсий буйынса 25 градус температурала һаҡланған. Ғалимдар ваҡыты-ваҡыты менән уларҙағы бактерияларҙың торошон тикшергән. Әммә ярты йылдан һуң да уларҙың үҙҙәренең йәшәү һәләтен юғалтмауын ғалимдарҙы ла аптыратҡан. Хәҙер улар ҡоро аҙыҡтарҙың бар төрҙәрен дә тикшереп ҡарарға йыйына.

■ Оҙаҡ йоҡлаһаң, баш мейеһе әүҙемлеге түбәнәйә. Шуға ла оҙаҡ йоҡлау сәләмәтлек өсөн зыянлы, тип белдерә ғалимдар. Һынауҙарҙа 45 йәштән өлкән 230 кеше ҡатнашҡан. Тәүлегенә 9 сәғәт йоҡлаған һәм етмәһә аҙ хәрәкәтләнгән кешеләрҙең организмы тәмәке тартыу йә араҡы эсеүҙән күргән зыянға тиң, имеш. Быҙай йәшәү рәүеше алып барыусылар араһында иртә үлем хәүефе 4 тапҡырға юғары. Ә баш мейеһенең әүҙемлеге түбәнәйеүе депрессияға килтереүе ихтимал икән. Тәүлегенә 11 сәғәткә тиклем йоҡлаусы ҡатынҡыҙҙар балаға уҙа алмай яфалана.

■ Хәтерҙе, тиренең, сәстәрҙең торошон яҡшыртыу өсөн төрлө витаминдарҙы йыш ҡабул итәһегеҙме? Белгестәр билдәләүенсә, кеше витаминдарҙы аҙыҡ-түлек менән дә етерлек ала, шуға ла өҫтәмә рәүештә витаминдар эсеүҙең кәрәге лә юҡ. Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары 120 мең кешенең ауырыу тарихын өйрәнгән. Тикшереү өсөн Е витаминын алғандар. Ғалимдар әйтеүенсә, был витаминды күпләп ҡулланыу баш мейеһе ҡан тамырҙарының зарарланыуына - инсультҡа килтереүе ихтимал. Ошондай уҡ тикшеренеүҙәр Швецияла ла үткән. Ул саҡта ғалимдар А витаминының артыҡ булыуы үпкә яман шешенә, Е витаминының инсультҡа килтереүе асыҡланған.

■ Йель университеты (АҠШ) ғалимдары асыҡлауынса, медитация психик ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән шизофрения һәм аутизмды профилактикалау өсөн иң яҡшы сара булып тора. Невролог Джадсон Брюэр медитация ваҡытында баш мейеһе ҡабығы әүҙемлеген тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән. Оҙайлы ваҡыт медитация менән шөғөлләнеүселәр сит йоғонтоға бирелеп бармай, улар үҙҙәренең хәлен дөрөҫ баһалай ала. Шизофрения һәм аутизм менән яфаланыусы пациенттарға үҙҙәре тураһындағы уйҙар тыныс бирмәһә, медитация быҙай уйҙарҙы ситкә ҡыуып, күберәк әлеге ваҡытта тирәяҡта барған ваҡиғаларға йүнәлтергә мөмкинлек бирә.

■ Япония ғалимдары ҡайһы бер еҫтәрҙең кешенең сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһауын, хатта ҡандың химик составын үҙгәртергә һәләтле булыуын раҫлаған. Мәҫәлән, стресс ваҡытында үҙеңә окшаған эфир майының еҫе көсөргәнештән арындыра, тынысландыра, депрессиянан ҡотҡара. Бер төркөм ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, лимон, манго, ала миләүшә еҫе тап ошо сифаттарға эйә.

СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

# АШАУ ӨСӨН ЙӘШӘМӘГЕҘ,
## йәшәү өсөн ашағыҙ

**Ологайҙым инде, 81 йәштәмен. Шуға ҡарамаҫтан, геүелдәтеп машина йөрөтәм, кеше көнлө булып ултырырға Хоҙай ҡушмаһын, тием дә, кәрәк ергә йомош-юл менән үҙем барам да киләм. Йәйәү ҙә йөрөйөм, көн дә сығып ашыҡмай, һәлмәкләп кенә йүгереүҙе лә ғәҙәткә индереп алдым. Шөкөр, үҙемде һәйбәт тоям.**



Ә бит ҡасан ғына әле быуындар, аурын-ҡулбаштар һыҙлай, тубыҡ бөгөлмәй, ҡулдарҙы ла күтәреп булмай ине. 23 йыл элек ана шулай мине остеохондроз тигән сир бөгөп һалды бит. Белорет металлургия комбинатында эшләгәйнем мин. Прокатлау цехында электрик инем. Ҡыҙыу мейес янында тирләп йөрөп эшләйһең, ә цех ҙур, үтәнән-үтә ел өрөп тора. Шулай йылдар буйына иғтибар итмәй эшләп тик йөрөлгән, бер заман килтереп ҡыҫты бит теге остеохондроз тигән нәмә. Шифахана ла, дауахана ла ҡалманы, мумие ла, женьшень да, алтын тамыр ҙа эсеп ҡарайым, массаж ҙа яһатам - бер файҙаһы ла юҡ. Саҡ ҡына ел өрһә лә һыуыҡ тейеп бара, иммунитет тамам ҡаҡшаны. Баш ауырый, күҙҙәр ҙә күрмәй башланы, икеһенә ике төрлө быялалы күҙлек яһатып алырға тура килде. Ҡан баҫымы түбән, үлтереп йөҡо баҫа, шуға, ҡаты итеп сәй эсергә ғәҙәтләндем. Өҫтәүенә, простата тигән сир башланды. Табиптар был сирҙән операция яһатып ҡына ҡотолоп була, тип ныҡыша. Тағы дауаханала ятып сыҡтым. Әллә дарыуҙы күп ашағандан, бит-күҙ шешмәкләнеп китте бер заман.

Әмәлгә ҡалғандай, шул осорҙа даны таралған халыҡ табибәһе Әминә Аралбаева Белоретҡа килеп төштө. Барып күренгәйнем, ул миңә нисек итеп дөрөҫ, сәләмәт йәшәргә һәм туҡланырға өйрәтеп ҡайтарҙы. Курҡыныс бер нәмә лә юҡ, тине ул, минең кәңәштәрҙе тотһаң, тиҙҙән һауығырһың, тине. Сәй хаҡында һорау биргәс, мин бөтөнләй сәй эсмәйем, тип яуап бирҙе. Унан күрмәксе, мин дә сәй эсеүҙе туҡтаттым. Сәләмәтләнеүгә юл шунан башланды ла: йоҡом да һәйбәт, төндә лә тороп йөрөмәйем, көндөҙ йоҡо ла баҫмай. Бер аҙҙан шешенеү ҙә бөттө. Дөрөҫ туҡлана, дауаланыу маҡсатында асыға башланым. Поль Брегг тигән билдәле авторҙың "Асығыу мөғжизәһе", И. Литвиненконың "Дөрөҫ туҡланыу нигеҙҙәре" һәм башҡа шундай сәләмәтлек хаҡындағы китаптарҙы уҡып, уларҙың кәңәштәрен дә файҙаланам. Һаулыҡҡа файҙаһы булмаған телгә нимә ашамайым. Иртә менән торғас та эҫеләһыуыҡлы контраст душ ҡойонам, махсус күнекмәләр яһайым һәм йүгерергә сығам. Йүгереү, тигәс тә, спортсылар ыңғайына түгел инде. Яйлап ҡына, организмға артыҡ көс төшмәҫлек итеп кенә йүгереп киләм. Ярты йылдан - остеохондроз, аҙаҡ простата бөттө. Ҡулдар урынына ултырҙы, шешенеүҙең эҙе лә ҡалманы. Тора-бара хатта күҙлектең дә кәрәге теймәй башланы, ышанаһығыҙмы, юҡмы? Элеккесә әбейем әҙерләгән ризыҡты түгел, ә тейешлеһен генә үҙем йүнәтеп ашайым. Итте бик һирәк ҡулланам, уның да майһыҙын ғына һайлайым. Тауыҡ итенең майын һыҙырып ташлайым, бешермәйем. Итте ваҡ ҡына итеп турап, ҡайнатып сығарғас, тәүге һурпаһын түгәм дә янынан һыу һалып бешерәм. Иттә булған ҡайһы бер зыянлы нәмәләр һурпаға сыға икән ул. Нигеҙҙә кәбеҫтә, кишер, сөгөлдөр, бөшмәк, унан һуң ҡуҙаҡлылар культуралары: фасоль, борсаҡ менән туҡланыуға күстем. Һоло, ҡарабойҙай бутҡаһы ла яратҡан ашыма әүерелде.

Асығыу алымы - үҙе бер ғилем ул. Ашауҙы кәметеп, тәүҙә организмды әҙерләйһең, бер нисә көн буйына клизма яһап, эсәктәрҙе таҙартаһың. Асығыуҙы әкренләп, тәүҙә бер, ике, өс көнләп, унан арттыра барып, аҙна, ун көнгә тиклем, тамам өйрәнгәс, хатта оҙағыраҡ та дауам итергә була. Ашамайһың, фәҡәт һыу ғына эсәһең. Асығыуҙан дөрөҫ сыға ла белергә кәрәк - быныһы бигерәк мөһим. Уны тамамлаған көндә лә емеш йә йәшелсә һуты, шыйыҡ ҡына һоло бутҡаһы кеүек енел ризыҡ менән сикләнеп тороу хәйерле. Ә, ғөмүмән, тәүҙә врач менән кәңәшләшмәйенсә, оҙаҡ ваҡытҡа асығыуҙы тота килеп башламағыҙ. Һис юғы, ошо хаҡта әлеге Поль Брегг йәки башҡа берәй авторҙың хеҙмәте менән ентекләп танышып сығыу кәрәк. Һәр хәлдә, миңә ана шул асығыуҙың файҙаһы нык ярҙам итте, сөнки асыҡҡан ваҡытта организм һәр төрлө шлаҡ, тоҙҙарҙан таҙарына. Йәшәреп киткәндәй хис итәһең үҙеңдә, еңеллек тоя башлайһың, хәл инеп ҡала.

Шуныһын да әйтеп китәйем: асыҡҡан ваҡытта, ашар алдынан йә ашағандан һуң мин бер ваҡытта ла һыуыҡ һыу эсмәйем, сөнки ул аш эшкәртеү һәм һеңдереүҙе тотҡарлай. Һәҙәмтәлә эс күбә, эсәктәрҙә күпләп газ барлыҡҡа килә. Һыуҙы мин тәүҙә туңдырам, унан уны иретеп ултыртып ҡуям да бүлмә температураһына еткереп кенә эсәм. Бик тиҙ кәрәк булғанда боҙло һауытты эҫе һыулы кәстрүл эсенә ултыртып иретеп алам. Ул бер ыңғай йылынып та китә. Быҙай структуралаштырылған һыу организмға бик файҙалы.

Сәләмәт йәшәү ҡағиҙәләренә бер мәҡәләлә генә өйрәтеп булмай ул. Ҡыҙыҡһынған кеше төрлө сығанаҡтарҙан үҙе эҙләнергә, унан үҙенә ыңғайлы алымды һайлап ҡулланырға мөмкин. Гел йәшә, гел өйрән, уҡы, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр бит. Мин үҙем дә медицина буйынса китаптар, мәҡәләләр уҡырға яратам. Һеҙгә лә шуны теләйем: сәләмәт йәшәү ҡағиҙәләрен үҙләштерегеҙ, дөйөм кимәлегеҙҙе, шул иҫәптән, үҙегеҙҙең туҡланыу мәҙәниәтегеҙҙе дә үҫтерегеҙ - ашау өсөн йәшәмәгеҙ, йәшәү өсөн ашағыҙ!

**Мөхәррәм СӘЛИМОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Белорет ҡалаһы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЙҮГЕРӘЙЕК!



Бөгөнгө ваҡыт ағышына өлгөрөп булмаған, ҡайһы саҡта хатта аяғөҫтө генә туҡланып, туктауһыҙ сабып йөрөгән заманда кеше үҙенең сәләмәтлегенә бигүк иғтибар ҙа бүлеп еткермәй, ҡайһы берәүҙәр табиптарға ла һуңғы сиктә генә мөрәжәғәт итә. Шәхсән үҙем элек-электән иртәнсәк бер стакан һыу эсеүҙе ғәҙәткә әйләндергәнмен. Һыу - йәшәү сығанағы, ул тиреләрҙе кибеүҙән һаҡлай. Һирәкләп булһа ла бассейнға йөрөйөм. Өйҙә декрет ялында ултырғанда аҙнаһына 2-3 тапҡыр фитнес-залға йөрөргә ғәҙәтләнгәйнем, тренерыбыҙ ситкә эшкә китеү сәбәпле, күнекмәләрҙе көнсығыш бейеүҙәре дәрестәренә алмаштырырға тура килде. Эшкә сығып, был яратҡан шөғөлдәргә ваҡыт ҡалмай башлағас, һирәкләп булһа ла кистәрен йүгереүгә күстем. Ҡышҡы сафлыҡҡа һоҡланып, 15 минут йүгереү ҙә кәйефемде күтәреп ебәрә, йырлағы, шиғыр яҙғы килеп китә. Тағы бер серем бар: киске сәғәт 8-ҙән һуң ашамаҫҡа тырышам. Ҡайһы ваҡыт тайпылыштар булып ала, әммә был ғәҙәтемә оҙаҡ йылдар тоғро ҡалам.

Туҡланыуға килгәндә, ғаиләбеҙҙә чипсы тигән химияны бөтөнләй ҡулланмайбыҙ. Арабыҙҙа бер генә Маймыл булһа ла (өс бала әсәһемен, өлкән ҡыҙым Маймыл йылында тыуған), барыбыҙ ҙа банан яратабыҙ, алманан бер ваҡытта ла өҙөлмәйбеҙ. Шулай уҡ әллә күпме витаминдар сығанағы булған финик, өрөк һәм йөҙөм дә - һәр саҡ өҫтәлебеҙҙә. Үҙем ваҡыты-ваҡыты менән һоло бутҡаһын кистән кефир менән ебетеп ҡуйып, өрөк йәки финик менән ҡушып ашайым. Бик туҡлыҡлы иртәнге аш килеп сыға. Тик уны балаларыма ашата алмайым: нишләптер, улар һоло бутҡаһына битараф. Әммә ҡарабойҙай, дөгө бутҡаларын һәм былауҙы бик тә яратып ашайҙар. Ҡайһы саҡта шоколадһыҙ ҙа булмай. Быҙай осраҡта мин уның әсеһен алырға тырышам ("Горький шоколад"). Әлбиттә, ваҡыт күберәк булһа, аш-һыуға иғтибарҙы тағы ла ныҡыраҡ арттырырға булыр ине.

Күберәк балыҡ ашағыҙ, тиҙәр бит. Мин уны бик шәп итеп быҡтырырға өйрәндем. Быны өсөн минтай балығы, кишер, һуған, ҡаймаҡ, лимон (тәме өсөн, ләкин мотлаҡ түгел) кәрәк була.

Иң тәүҙә минтайҙы йыуып, таҙалап, турап һалам. Шунан кишер менән һуғанды һаламлап турап, көнбағыш майы ҡойолған табаға һалам. Улар матур төҫкә инә башлағас, өҫтөнә балыҡтарҙы теҙәм. Уның өҫтөнә 1 ҡалаҡ ҡаймаҡ, тоҙ һалғас, ҡапҡасты ябып, утын кәметеп, быҡтырырға ҡуям. Өҫтөнә лимонды телеп һалһағыҙ, тағы ла тәмлерәк булып бешер. 20 минуттан балыҡ әҙер. Ә тәмлелеге!

**Айгөл ИҘЕЛБАЕВА,**
**шағирә.**
**Баймаҡ районы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Илде иҡтисади көрсөк ялмап алғанда, аҡсаһыҙлыҡ, эшһеҙлек кеүек заман афәттәре ябырылғанда йәш ғаиләләргә айырыуса ауыр икәнен беләбеҙ. Әммә тап бына йәш ғаиләләр ошо һынауҙарҙы лайыҡлы үтергә өйрәнә, ауырлыҡтарҙа сынығa һәм бирешмәй. Шундай ғаиләләрҙең береһе тураһында һүҙебеҙ.**

# ОШО КӘҢӘШТЕ ЛӘ ТЫҢЛАЙЫҠ!



Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында йәшәүсе Гүзәл һәм Айрат Нарбутиндарҙың ғаилә ҡороуына биш йыл. Дүрт һәм ике йәшлек Фәзим һәм Ильяс исемле улдары үҫә. Әле ең һыҙғанып йорт төҙөү эше менән мәшғүлдәр. Гүзәл Аҡъяр телевидениеһында - диктор, тормош юлдашы Айрат - Хәйбулла районы буйынса Дәүләт техник күҙәтеү инспекцияһы начальнигы. Күптәрҙең яратҡан дикторына әйләнеп өлгөргән йәш ҡатын БДУ-ның Сибай институтында белем алған. Ғаилә башлығы Айрат Башҡорт дәүләт аграр университетының механика факультетын тамамлаған. Ул студент сағында ҡурай тыңәрәгенә йөрөй, уҡып бөткәс, мәктәптә балаларҙы ҡурайҙа уйнау серҙәренә төшөндөрә.

- Айрат Татыр-Үҙәк ауылы егете, ә мин Яңы Ергән ҡыҙы, - тип һөйләй Гүзәл. - Беҙ уның менән мин Аҡъяр телевидениеһында эшләп йөрөгән саҡта таныштыҡ. Аҡсаны күрә алмаһаҡ та, шөкөр итһән, етә. Уны дөрөҫ итеп тотонорға тырышабыҙ. Әле өй төҙөгәс, төп килемебеҙ шунда китеп тора. Атаәсәйҙәребеҙ ярҙам итә. Ваҡытлыса өләсәйем менән уның йортонда йәшәйбеҙ. Ул аҡыллы кәңәштәре, тормош һабаҡтары менән миңә лә, балаларыма ла ҙур таяныс. Өләсәйем һуғыш осоро һәм һуғыштан һуңғы йылдарҙың ауырлығын, михнәтен үҙ елкәһендә татып үҫкән кеше, һәр тиндең, һәр икмәк валсығының ҡәҙерен белергә өйрәтә беҙҙе...

Йәш ғаилә йорт төҙөү менән булһа ла, уландарын концерт-спектаклдәргә, башҡа мәҙәни сараларға йөрөтөргә ваҡыт таба. Иш янына ҡуш тигәндәй, яратҡан шөғөлдәре менән бер аҙ өҫтәмә килем табырға ла булдыралар. Гүзәл заказ буйынса сәс ҡаптырғыс, туйға бутоньеркалар эшләй. Ә Айрат буш ваҡыттарында машиналар ремонтлау менән булыша. Баҡса үҫтерәләр, ә Гүзәл баҡса емештәренән ҡышҡылыҡҡа файҙалы ҡайнатма-компоттар, салаттар әҙерләй.

- Магазиндарҙағы ялтырауыҡлы әйберҙәрҙән, зауыҡлы кейемдәр, затлы йорт йыһаздарынан тыйылып торабыҙ, - ти Гүзәл. - Ғүмүмән, нәфсе тигәнде тыя белеү, үҙеңдә теләһә ниндәй әүрәткестәргә ылыҡмау сифаты тәрбиәләү бик мөһим. Юҡһа, ҡайһы берәүҙәр ҡулға төшкән аҡсаһын һыу шикелле тотоноп, киләһе эш хаҡын алғансы ауыҙҙарын "елгә асып" йөрөүсән. Бөгөнгө һынауҙар осоронда бигерәк тә йәш ғаиләләргә халҡыбыҙҙың ошо аҡылын тотоу бик урынлы булыр: юрғаныңа ҡарап, аяҡ һуҙ...

**Айгизә АСҠАРОВА.**
**Хәйбулла районы.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

## НӘФСЕ

15. Нәфсе - ике йөҙлө, яҡшы булып күренергә тырышыусы һәм ботҡа табыныусы. Нәфсенең эсе тышынан ныҡ айырыла, башҡалар алдында изге, ғәҙел булып күренергә тырышыр өсөн уларҙы үлтереп маҡтай, улар юҡта, киреһенсә, бысраҡ һүҙҙәр өйә.

16. Нәфсе Аллаһы Тәғәләгә был ҡылығы менән оҡшамаҫын белһә лә, кешеләргә оҡшар өсөн үҙ-үзен маҡтай.

18. Нәфсе сикһеҙ алдаша.

19. Нәфсе илаһилыҡҡа дәғүә итә. Нәфсе һәр саҡ кешеләрҙең үҙен генә маҡтауҙарын, уның ғына әхлаҡ нормаларын үтәүҙәрен көҫәй. Нәфсе бер ваҡытта ла Аллаһы Тәғәләлә күңел тыныслығы таба алмай.

20. Нәфсе тәкәббер һәм үҙ-үҙен генә ярата. Нәфсе башҡа кешегә ҡарата эшләгән бәләкәй генә изгелеген дә, үҙенең изге булыуы менән һоҡланып, йылдар буйына онотмай.

21. Нәфсе боҙоҡ һәм хыянатсыл. Ул башҡаларҙың кешеләргә әйбер бүләк иткәнен яратмай, бүләктәрен юҡҡа сығарырға тырыша.

22. Нәфсе - һаран.

23. Нәфсе - үҙгәреүсән.

24. Нәфсе бар нәмәнән дә тиҙ ялҡа. Күп осраҡта уның эшмәкәрлеге теләктәренә тура ла килмәй. Теләгәненә ирешкән хәлдә лә, нәфсе быныӊ менән риза түгел. Нәфсегә даимилыҡ етмәй. Был хәленән ул тик үҙенең бурыстарын намыҫ менән атҡарыу ярҙамында ғына ҡотола ала.

25. Нәфсе - ялҡау. Ул һәр саҡ теләгәненә ирешергә ашыға. Нәфсе йомшаҡ холоҡло булыуын тик аскетик тәртип һәм ҡаҡшамаҫ рухи интылыусанлығы менән генә еңә ала.

26. Нәфсе үҙенең төҫөн минут һайын үҙгәртә ала. Ул хамелеонға оҡшаш.

27.Нәфсе иғтибарһыҙ, кенәсел һәм үсексән. Әгәр ҙә оҙайлы йылдарға һуҙылған уртаҡ һөйөүҙән һуң нәфсегә бәләкәй генә хилафлыҡ ҡылһаң, ул барлыҡ изгелектәрҙе онотоп, ошо бәләкәй генә етешһеҙлек өсөн үҙенең ҡылыҡтары менән хайуан хәленә төшөүе бар.

28. Нәфсе комплименттар һәм маҡтауҙар ярата. Башҡалар үҙен маҡтаһын өсөн нәфсе ике йөҙлөлөккә бара, был уның хроник сире. Әгәр ҙә нәфсене маҡтауҙан туҡтаһалар, ул ялҡауға һәм көсһөҙгә әүерелә. Бер шәкерт мәсеткә намаҙға килгән һайын һәр саҡ алғы рәттә баҫып торорға яратҡан, ти. Берҙән-бер көндө ул ниндәйҙер ашығыс эше арҡаһында намаҙға һуңланҡырап килеп, иң артҡы рәттә баҫып торған. Ошонан һуң ул мәсеткә бөтөнләй йөрөмәҫ булған. Мәсеткә йөрөмәүенең сәбәбен һорағандар икән, шәкерт шулай яуаплаған: "Оҙайлы йылдар буйы мәсеттә намаҙ уҡып, үҙемде Аллаһы Тәғәләгә ихлас ышанамдыр, тип уйлағайным. Ә теге көндә арҡы рәттә баҫып торған сағымда мин оялышымдан ер тишегенә инерҙәй булдым. Баҡтиһәң, алғы рәттә торған сағымда үҙемә төбәлгән ҡараштарҙан ләззәт кенә алған икәнмен..."

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Икенсе сер

**Танылыу.** Танылыу һәм маҡтау араһында ҙур айырма бар. Танылыуға һалған мәғәнәне мин, нигеҙҙә, иҫкәрмә тием. Ул комплимент та, субъектив баһалау ҙа түгел, ә бары тик атамаһын үҙен генә күҙаллай: кешенең бөгөнгө аңлау кимәле нигеҙендә һалған тырышлығын таныу. Маҡтау - ул субъектив баһа. Әгәр кемделер башҡарылған эш өсөн маҡтайһығыҙ икән, шулай тип күҙаллайһығыҙ: ошо эште башҡара алмаһа, ул маҡтауға лайыҡ булмаҫ ине. Мәҫәлән, балағыҙ һеҙгә сәскә бүләк итә икән, уға: "Миңә сәскә бүләк иткән өсөн рәхмәт", - тимәгеҙ. Шулай тип, һеҙ уға: әгәр миңә сәскә бүләк итмәһәң, насар малай йәки ҡыҙ булыр инең, тигәнде аңлатаһығыҙ. Бары тик: "Сәскәләрең өсөн рәхмәт, мин һиңә бик рәхмәтлемен", - тиергә кәрәк. Шулай итеп, һеҙ уның ҡылығын танийһығыҙ, ә шәхескә субъектив баһа бирмәйһегеҙ.

Ололар, йәштәр, бигерәк тә балалар маҡтауға ҡарағанда танылыуға ынғай ҡарай. Улар яҡын кешеләренең тормошонда айырым урын алып тороуҙарын белергә, үҙҙәре менән шәхес булараҡ аралашыуҙарын, кемгәлер оҡшаған кеше итеп әүәләүҙәрен түгел, нисек барҙар - шулай ҡабул итеүҙәрен теләй. Әгәр улар һәләттәре нигеҙендә ҡылған ғәмәлдәре, ҡылыҡтары өсөн танылыу ала икән, үҙҙәрен нимәләр эшләгән өсөн түгел, ә шәхес булараҡ таныуҙарын аңлаясаҡ. Башҡаларҙың стандартына яуап бирәләрме, юҡмы икәнлегенә ҡарамаҫтан, үҙҙәренең үҙенсәлеген һәм ҡиммәтен тоясаҡ. Маҡтау һәм танылыу араһында айырманы аңлау бик ауыр, әммә ул үҙ-үҙеңә тулы ышаныс формалаштырыуҙа ҙур роль уйнай. Әгәр кешеләр танылыу тапмай икән, уларға маҡтау әҙләүҙән һәм уның әсире булыуҙан башҡа сара ҡалмай.

**Үҙегеҙҙе башҡаларҙан азат итегеҙ.** Беҙ бәйләлегебеҙ өсөн ни тиклем ҡиммәт түләргә тейешлегебеҙҙе һәм бер-беребеҙгә нығлап йәбешкән ҡолдарыбыҙҙы ысҡындырырға тырышырға кәрәклеген аңлайыҡ. Әммә ғаиләбеҙҙең, дуҫтарыбыҙҙың һәм коллегаларыбыҙҙың хуплауын юғалтҡыбыҙ, үҙебеҙҙе һайлаған юлыбыҙға бағышлағыбыҙ килмәй. Шуға күрә, азатлығыбыҙға тейешле хаҡ түләүҙән ҡурҡып, мөмкинлек артынан мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырабыҙ. Шулай ҙа беҙ теләгән ваҡытыбыҙҙа азат була алабыҙ. Проблема кемдәлер түгел, проблема бары тик үҙебеҙҙә генә.Һеҙҙең төп бурысығыҙ - физик һәм эмоциональ имәнлек. Сынйырҙа килеш һеҙ бары тик үҙ-ара бәйләлеккә генә ярҙам итәһегеҙ, ул һеҙҙе генә түгел, күҙ төбәгән кешегеҙҙе лә әсирлектә тота. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң тирә-яҡтағылар күңел ҡайтыуҙан һәм үпкәләренән арынасаҡ. Әммә иң мөһиме - улар һеҙҙе ысын мәғәнәһендә ихтирам итә аласаҡ. Әгәр һеҙ быға етди йүнәлеш алғанһығыҙ икән, бер нәмә лә үҙегеҙгә абсолют ышаныс булдырыуға ҡамасаулай алмаясаҡ. Ләкин бойондороҡлоҡ, һеҙҙең менән идара итеү, конформизм, сағыштырыу һәм көнәркәшлек тормошоғоҙҙоң айырып алғыһыҙ өлөшө тип уйлайһығыҙ икән, хыялығыҙҙағы нәмәгә лайыҡ була алмаясаҡһығыҙ. Бары тик эмоциональ, аҡыл, физик һәм рухи азат булыу өсөн нығлы ҡарар ҡабул итеп кенә үҙегеҙгә ышанған кеше буласаҡһығыҙ. Ирекме, әллә бойондороҡлолоҡмо? Үҙегеҙ һайлағыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 4 ЯНВАРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.25 "Чингачгук - большой змей". Худ. фильм.
08.10 "Три мушкетера". Сериал (12+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Вместе с дельфинами".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пираты Карибского моря: На краю света". Худ. фильм (12+).
15.30 "Пираты Карибского моря: На странных берегах". Приключения (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию" (12+).
18.55 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Шерлок Холмс". Детективный сериал (12+).
23.00 "Еврейское счастье" (16+).
24.00 "Анна Каренина". Худ. фильм (12+).
02.15 "Луна". Худ. фильм (16+).
04.50 "Как избежать наказания за убийство". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1
04.50 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал (12+).
06.40 "Сваты". Сериал (16+).
09.45 "Маша и медведь". Мультфильмы.
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Сваты". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.10 "Новая волна-2015. Лучшее".
15.50 "Ожерелье". Мелодрама (12+).
17.40 "Петросян-шоу". Большая музыкально-пародийная сцена (16+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.35 "Между нами, девочками". 5-8-я серии. Комедийный сериал (12+).
00.20 "Дабл трабл". Комедия (12+).
02.00 "Ах, водевиль, водевиль..." Худ. фильм.
03.20 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Белые мгновения" (12+).**
**08.00 Новости (на русск. яз.) (0+).**
**08.15 "Соседи". Сериал (0+).**
**08.45 "Замбезия" (0+).**
**10.30 "Ҡамыр батыр". Худ. фильм (0+).**
**11.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**11.30 "Гора новостей" (0+).**
**11.50 Хоккей. КХЛ. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**14.30 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Мимино". Худ. фильм (12+).**
**16.30 "Знай наших! Земляки о земляках" (12+)**
**17.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (0+).**
**17.45 "Ҡарйондоҙ". Худ. фильм (0+).**
**18.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "Дарю песню" (0+).**
**19.45 "Бала-саға" (6+).**
**20.30 "Соседи" (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Замерзшая из Майами". Худ. фильм (12+).**
**24.00 "Башҡорт йыры-2014" (12+).**
**01.30 "Осрашыу" (12+).**
**02.00 "Знакомые незнакомцы". Худ. фильм (12+).**

## 5 ЯНВАРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "След сокола". Худ. фильм (12+).
08.10 "Три мушкетера". Сериал (12+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Вместе с дельфинами".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Серафима прекрасная". Сериал (16+).
16.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию" (12+).
18.55 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Шерлок Холмс". Детективный сериал (12+).
23.00 "Еврейское счастье" (16+).
24.00 "Рыбка по имени Ванда". Криминальная комедия (16+).
02.05 "Король бильярда". Худ. фильм (16+).
04.35 "Как избежать наказания за убийство". Сериал (16+).
05.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
04.45 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал (12+).
06.40 "Сваты". Сериал (16+).
09.55 "Рождественская "Песенка года".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.10 "Новая волна-2015. Лучшее".
15.40 "Счастливый маршрут". Мелодрама (12+).
17.35 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт (16+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.35 "Между нами, девочками". 9-12-я серии. Комедийный сериал (12+).
00.20 Концерт Дианы Арбениной и Юрия Башмета.
02.25 "Здравствуйте, я ваша тетя!" Комедия.

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Новогодний ретрокалейдоскоп" (12+).**
**08.00 Новости (на русск. яз.) (0+).**
**08.15, 20.30 "Соседи". Сериал (0+).**
**08.45 "Волшебные часы Санты". Худ. фильм (0+).**
**10.30 "Балкас". Худ. фильм (0+).**
**11.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**11.30 "Гора новостей" (0+).**
**11.45 "Зеркальце" (0+).**
**12.00, 02.00 "Замандаш" (6+).**
**12.15 "Рәхмәт". Худ. фильм (12+).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30 "Дарю песню" (12+).**
**15.00, 05.30 "Эта веселая планета". Худ. фильм (6+).**
**16.30 "Знай наших! Земляки о земляках" (12+).**
**16.45 "Будьте здоровы!" (12+).**
**17.00 "Молодая семья-2015" (0+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.00 "Дарю песню" (0+).**
**19.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Добро пожаловать". Худ. фильм (16+).**
**23.45 "Мы - вместе!" (12+).**
**02.15 "Н.Гаитбаев "Весело живем" (12+).**
**04.00 "Журавлиная песнь" (12+).**

## 6 ЯНВАРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.20 "Апачи". Худ. фильм
08.10 "Три мушкетера". Сериал (12+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Вместе с дельфинами".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Серафима прекрасная". Сериал (16+).
16.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию" (12+).
18.55 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Шерлок Холмс". Детективный сериал (12+).
23.00 "Желание". Худ. фильм (16+).
01.00 Рождество Христово. Прямая трансляция из Храма Христа Спасителя.
03.00 "Вифлеем. Город Иисуса".
03.50 "Зимний роман". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
04.45 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал (12+).
06.40 "Сваты". Сериал (16+).
09.55 "Рождественская "Песенка года".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.10 "Новая волна-2015. Лучшее".
16.05 "Сказки мачехи". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести".
20.30 "Между нами, девочками". 13-15-я серии. Комедийный сериал (12+).
22.55, 03.00 "Дом спящих красавиц". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
01.00 Рождество Христово. Прямая трансляция торжественного рождественского богослужения.

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Новогодний ретрокалейдоскоп" (12+).**
**08.00 Новости (на русск. яз.) (0+).**
**08.15, 20.30 "Соседи". Сериал (0+).**
**08.45 "Жизнь и удивительные приключения Робинзона Крузо". Худ. фильм (0+).**
**10.30 "Боронзаман илендә". Худ. фильм (0+).**
**11.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**11.30 "Гора новостей" (0+).**
**11.50 Хоккей. КХЛ. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**14.30 "Легенды спорта. Ветераны" (12+).**
**15.00 "Берегись автомобиля!" (6+).**
**16.30 "Знай наших! Земляки о земляках" (12+).**
**16.45 "Будьте здоровы!" (12+).**
**17.00 "Байыҡ". Лучшее" (0+).**
**19.00 "Дарю песню" (12+).**
**19.45 "Бала-саға" (6+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Рождественская сказка". Худ. фильм (16+).**
**01.00 "Знай наших!"**

## 7 ЯНВАРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.30 "Братья по крови". Худ. фильм.
08.10 "Три мушкетера". Сериал (12+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Золушка". Худ. фильм.
11.45 "Новый "Ералаш".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Серафима Прекрасная". Сериал (16+).
16.10 "Рождество".
17.00 "Оптина пустынь".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию" (12+).
18.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
19.55 "Поле чудес"". Праздничный выпуск (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Шерлок Холмс". Сериал (12+).
23.00 "Еврейское счастье" (16+).
24.00 "Как украсть миллион". Криминальная комедия.
02.15 "Идеальная пара". Худ. фильм (16+).
04.20 "Как избежать наказания за убийство". Сериал (16+).
05.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
04.20 "Сваты". Сериал (16+).
09.40 "Необыкновенное путешествие Серафимы".
11.00 "Вести".
11.20 "Афон. Восхождение". Фильм Аркадия Мамонтова.
12.15 Юбилейный концерт Юрия Энтина.
14.00 "Вести".
14.10 Рождественское интервью Святейшего Патриарха Кирилла.
14.55 "Птица в клетке". Мелодрама (12+).
18.10 "Семейное счастье". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести".
20.35 "Между нами, девочками". 16-18 серии (12+).
23.30 "Школа для толстушек". Мелодрама (16+).
03.20 "Сватовство гусара". Худ. фильм.

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15, 22.00 "С Рождеством!" (0+).**
**08.00 Новости (на русск. яз.).**
**08.15 "Рождественское послание митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона" (0+).**
**08.30 "Рождественская легенда". Худ. фильм (0+).**
**10.00 "Президентская елка-2015" (0+).**
**11.30 "Гора новостей" (0+).**
**11.45 "Так и живем" (0+).**
**12.15 "Рождественская сказка". Худ. фильм (0+).**
**14.00 "Вифлеем. Город Иисуса" (0+).**
**15.00 "Когда Санта упал на землю". Худ. фильм (0+).**
**16.45 "Будьте здоровы!" (12+).**
**17.00 "Ироническая сказка "Ха-ха-чу" (6+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.00 "Дарю песню" (0+).**
**19.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.30 "Соседи". Сериал (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**23.00 "Мария". Худ. фильм (12+).**
**00.30 "Сәләм - 20 лет в эфире" (12+).**
**02.00 А.Островский. "Снегурочка" (12+).**

## 8 ЯНВАРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.20 "Белые волки". Худ. фильм (12+).
08.10 "Три мушкетера". Сериал (12+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Вместе с дельфинами".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Вышел ежик из тумана...". Худ. фильм (16+).
16.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Роза Хутор. Рождество-2016".
21.00 "Время".
21.20 "Шерлок Холмс" Сериал (12+).
23.00 "Еврейское счастье" (16+).
24.00 "Великая красота". Драма (18+).
02.30 "Поцелуй меня на прощание". Худ. фильм (12+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
04.45 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал (12+).
06.35 "Сваты". Сериал (16+).
09.55 "Рождественская "Песенка года".
11.00 "Вести".
11.15 "Вести-Башкортостан".
11.35 "Сваты". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.10 "Сваты". Сериал (16+).
14.50 "С приветом, Козаностра". Мелодрама (16+).
16.50 "Один в один. Лучшее" (12+).
20.00 "Вести".
20.35 "Между нами, девочками". 19-я и 20-я, заключительная, серии (12+).
22.35 "Золотая магия XXI века в Крокус Сити Холле".
00.30 "Спасибо за любовь". Мелодрама (16+).
02.40 "Д'Артаньян и три мушкетера". Сериал.

### БСТ
**07.00, 19.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Новогодний ретрокалейдоскоп" (0+).**
**08.00, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**08.15, 20.30 "Соседи". Сериал (12+).**
**08.45 "Эльф, который украл Рождество" (0+).**
**10.30 "Радость сильнее". Худ. фильм (0+).**
**11.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**11.30 "Гора новостей" (0+).**
**11.45 "Следопыт" (12+).**
**12.15 Н.Гаитбаев. "Сумерки" (12+).**
**13.45 "Автограф". "Савия Сираева" (0+).**
**14.30 "Йома" (0+).**
**15.00 "Астраханские приключения" (12+).**
**15.30 "Любимое дело" (12+).**
**16.00 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (0+).**
**16.20 Хоккей. КХЛ. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**19.30 "Дарю песню".**
**22.00 "Артист". Худ. фильм (12+).**
**24.00 "Музыкальная мозаика" (0+).**
**02.00 "Полезные новости" (12+).**
**02.15 "Башҡорт йыры - 5 лет!" (12+).**
**04.30 Г.Каюмов. "Наследство" (12+).**

## СУББОТА
## 9 ЯНВАРЯ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00, 06.10 "Новый старый дом". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
07.00 "Вождь Белое перо". Худ. фильм.
08.30 "Варвара-краса, длинная коса". Худ. фильм.
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Три орешка для Золушки". Худ. фильм.
11.45 "Новый "Ералаш".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Народная марка" в Кремле".
13.55 "Ночь в музее". Комедия (12+).
16.00 "Ночь в музее-2". Комедия (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Угадай мелодию" (12+).
18.45 Юбилейный вечер Валентина Гафта.
21.00 "Время".
21.20 "Шерлок Холмс" Сериал (12+).
23.00 "Одержимость". Драма (16+).
01.00 "Голубая волна". Худ. фильм (16+).
02.55 "Ниагара". Худ. фильм (16+).
04.40 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1
04.50 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал (12+).
06.40 "Сваты". Сериал (16+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Сваты" (16+).
14.00 "Вести".
14.10 "Вести-Башкортостан".
14.20 "Сваты" (16+).
14.40 "Любовь на сене". Мелодрама (16+).
16.45 "Один в один. Лучшее" (12+).
20.00 "Вести".
20.35 "Новогодний парад звезд". Развлекательное шоу.
22.45 "неГолубой огонек-2016". Новогоднее развлекательное шоу с участием звезд телевидения и эстрады" (16+).
00.45 "Новогодняя жена". Комедия (16+).
02.45 "Д'Артаньян и три мушкетера". Сериал.

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**07.15 "Новогодний ретрокалейдоскоп" (0+).**
**08.00, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**08.15, 20.30 "Соседи". Юмористический сериал (12+).**
**08.45 "Бунт пернатых". Худ. фильм (0+).**
**10.30 "Сулпан" (0+).**
**11.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**11.30 "Гора новостей" (0+).**
**11.45, 06.30 "Следопыт" (12+).**
**12.15 Ф.Буляков. "Море мечты" (12+).**
**14.15 "Возрождение Арала" (12+).**
**15.00 "12 рождественских желаний". Худ. фильм (12+).**
**16.45 "Полезные новости" (12+).**
**17.00 "Выбирай свое - покупай родное" (12+).**
**18.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**19.00 "Дарю песню" (12+).**
**19.45 "Бала-саға" (6+).**
**22.00 "После прочтения сжечь". Худ. фильм (16+).**
**23.30 "Осрашыу" (12+).**
**24.00 "Байыҡ-2013" (0+).**
**04.30 "Концерт Айгуль Сагинбаевой" (12+).**

## 10 ЯНВАРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Двенадцатая ночь". Худ. фильм.
08.00 "Француз". Худ. фильм (12+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Гусарская баллада". Худ. фильм.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Роза Хутор". Праздничный концерт.
14.25 "Один дома-2". Комедия.
16.45 "Точь-в-точь". Новогодний выпуск шоу пародий.
21.00 "Время".
21.20 "Шерлок Холмс". Сериал (12+).
23.10 "Достучаться до небес". Боевик (16+).
00.45 "Неуправляемый". Худ. фильм (16+).
02.40 "Обезьяньи проделки". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1
05.00 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал (12+).
06.55 "Сваты". Сериал (16+).
10.20 "Вести-Башкортостан". События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Сваты". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Сваты". Сериал (16+).
14.40 "Поворот наоборот". Комедийный сериал. 4 серии (12+).
18.05 "Золотая невеста". Комедия (12+).
20.00 "Вести".
20.35 Новогодний "Голубой огонек-2016". Развлекательное шоу с участием звезд телевидения и эстрады.
00.30 "Москва-Лопушки". Мелодрама (12+).
02.30 "Д'Артаньян и три мушкетера". Сериал.
04.00 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.). (0+).**
**07.15 "Новогодний ретрокалейдоскоп" (0+).**
**08.00 Новости (на русск. яз.).**
**08.15, 20.30 "Соседи". Сериал (12+).**
**08.45 "Йома" (0+).**
**09.15 "Шәхес" (12+).**
**10.00 "Бай" (12+).**
**10.30 "Сладкая сказка". Худ. фильм (0+).**
**11.00 "Ал да гөл" (0+).**
**11.15 "Гора новостей" (0+).**
**11.30 "Сулпылар" (0+).**
**12.30 Новости (на башк. яз.). Итоги года-2015.**
**13.30 "Тәмле" (12+).**
**14.00 "Полезные новости" (12+).**
**14.15 "Дорога к храму" (0+).**
**14.50 Хоккей. КХЛ. "Металлург" (Новокузнецк) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**17.30 "Человек Года в спорте-2015" (6+).**
**19.00 "Дарю песню".**
**19.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**21.30 Новости. Итоги года-2015.**
**22.30 "Кубок КВН Республики Башкортостан" (12+).**
**00.30 "Звезды мировой оперы в Уфе" (12+).**
**02.00 "Осрашыу" (12+).**
**02.30 "Автограф" (12+).**

✓ Ғалимдар билдәләүенсә, һыу, ямғыр һәм диңгеҙ шаулауы балаға әсәһенең ҡарынында ятҡан сағын хәтерләтеп, уны тынысландырырға һәләтле икән.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ШЫРШЫ ҠУПШЫ КЕЙЕНГӘН...

**Горизонталь буйынса:** 2. ... күп булһа, йәй иген уңыр 3. Раштыуа Ҡыш Бабаһы Санта ... 6. Антибиотик 7. Санта Клаус ҡайҙа йәшәй? 10. Видеоуйын. 11. Урман, ағаслыҡ араһындағы асыҡ урын. 12. Февралдең башҡортса атамаһы. 14. Маймыл йылы тыуған артист ... Әмиров. 16. Башҡорт Ҡыш бабайы быйыл шунда ҡышлай. 18. Ылыҫ ағасы. 19. Ҡыҙҙырылған тауыҡ. 21. Тырыш, уңған (синонимы) 22. З. Биишеваның "Яҡтыға"трилогияһының икенсе романы (1966 й.). 26. ... еткәнгә көсөк тә йәбешкән (мәҡәл) 27. Мөсәл ҡуяны кемде алыштыра? 28. Йәйе барҙың ... бар (мәҡәл) 29. Йондоҙнамәлә йылды башлаусы. 30. 1 ғинуар йылы булһа, ... уңыр (һынамыш). 31. Йондоҙнамәлә ҡырпағай билдәһе. 32. ... булһа ла юл яҡшы (әйтем).



**Вертикаль буйынса:** 1. Йәй - арба, ҡыш - ... 4. Аллергиянан препарат. 5. Үгәй әсә ҡушҡас, атаһы ҡыҙын ҡайҙа ҡалдырып китә? ("Һыуыҡ бабай"әкиәте). 8. Көньяҡ Американың ҡыҙыл алабутаһы (хәҙер беҙҙең баҡсаларҙа ла үҫә). 9. Ир йәше - ике ..., береһе - шәкәрҙер, береһе- бикәрҙер (мәҡәл). 13. 1 ... - көлкө көнө. 15. Күрше өлкәнең рухыбыҙға туғандаш районы. 17. Уҡыған ил уҙыр, ... ил туҙыр (мәҡәл) 18. Ҡыш бабайҙың ейәнсәре. 20. Маймыл йылы тыуған артист ... Ҡарабулатов. 23. Иртә торғандың ... артыр. 24. Атаһын күр ҙә - ... ҡыҙ бир (мәҡәл) 25. ... күрә - санаһы, заманына күрә - балаһы (мәҡәл).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**50-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Акцент. Грант. Торатау. Ғына. Ләйсән. Елмәрҙәк. Ҡырҡ. Арбаһы. Кресс. Тау. Ҡуштау. Нарыҫтау. Битләп. Уйыл. Әлкә. Лава. Әрме. Нары.

**Вертикаль буйынса:** Еләкташ. Ғүмеремдең. Сөн. Тауҙар. Ирәмәл. Бар. Күгәрепкәй. Әмәлен. Ташҡа. Тап. Татыулыҡҡа. Ҡурайҙары. Баштау. Саҡма. Наҙлы. Урал.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (24) дүшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:30 | 17:00 | 18:30 |
| 5 (25) шишәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:31 | 17:01 | 18:31 |
| 6 (26) шаршамбы | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:33 | 17:03 | 18:33 |
| 7 (27) кесе йома | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:34 | 17:04 | 18:34 |
| 8 (28) йома | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:36 | 17:06 | 18:36 |
| 9 (29) шәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:37 | 17:07 | 18:37 |
| 10 (30) йәкшәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:39 | 17:09 | 18:39 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3-5 ғинуар "Зөбәржәт ҡала тылсымсыһы"** (А. Волков), әкиәт. Башлана 10.30, 13.00, 15.30

**6-10 ғинуар "Зөбәржәт ҡала тылсымсыһы"** (А. Волков), әкиәт. Башлана 10.30, 13.00

**6 ғинуар "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия

**7 ғинуар "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры

**8 ғинуар "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**3-8 января "Приключения обезьянки Бьянки"**, сказка для детей. Начало 13.00, 15.00

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**3-5, 7 января "Главный новогодний утренник Уфы"**, новогодний праздник. Начало 12.00, 14.00, 16.00

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**3-7 января "Аладдин: тающий песок, или жгучий снег..."**, сказка.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Бөрйән районы Ҡурғашлы ауылында йәшәүсе ҡәҙерле атайыбыҙ, ҡайныбыҙ, олатайыбыҙ

**Әмин Дәрмин улы ШӘРӘФЕТДИНОВты**

тыуған көнө менән ихлас ҡотлайбыҙ!

Тырыш, һис ниндәй эштән ҡурҡмаған, кешелекле һәм кеселекле, яҡындары өсөн хәстәрлекле, ярҙамсыл ул атайыбыҙ. Уға ныҡлы һаулыҡ, күңел тыныслығы, бәхет-шатлыҡтарға тулы оҙон ғүмер, эшендә тик уңыштар, бар уй-ниәттәренең тормошҡа ашыуын теләйбеҙ. Киләсәктә лә әсәйебеҙ менән ҡыуаныстарға бай имен тормошта, иңгә-иң терәшеп, беҙгә аҡыллы кәңәштәрегеҙҙе биреп, көс өҫтәп, терәк-таяныс булып оҙон-оҙаҡ, иҫән-һау йәшәгеҙ!

**Бөтә туғандары исеменән, ҡыҙҙары Розалиә, кейәүҙәре Артур, ейәндәре Азамат, ейәнсәрҙәре Азалиә менән Әминә.**

* * *

Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе

**Руфина Әғләм ҡыҙы Зөлҡәрнәеваны**

күркәм юбилейы менән ҡотлайым. Һинең тормош һынауҙары алдында бөгөлмәй, уларҙы лайыҡлы үтеүеңә, яңғыҙ ҡалғанда ла балаларыңа терәк-таяныс булып, уларҙы кеше итергә, юғары белем бирергә тырышыуыңа, уңғанлығыңа, маҡсатҡа ынтылышлы булыуыңа һәр саҡ һоҡландым. Артабан да балаларыңдың игелеген күреп, көслө рухлы кеше өлгөһө булып, бәхет-шатлыҡҡа төрөнөп йәшәүеңде теләйем.

**Изге теләктәр менән Бибисара Азаматова.**

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

## МУЗЫКА ҺӘМ ТӘБИҒӘТ ТАУЫШТАРЫ

- Ғалимдар билдәләүенсә, һыу, ямғыр һәм диңгеҙ шаулауы балаға әсәһенең ҡарынында ятҡан сағын хәтерләтеп, уны тынысландырырға һәләтле икән.
- Дельфиндар тауышын тыңлағанда, кешенең үҙәк нервылар системаһы бер аҙ тыныслана, ә баш мейеһе эшмәкәрлеге, киреһенсә, әүҙемләшә төшә. Был, үҙ йәһәтендә, төрлө невроз ауырыуҙарынан ҡотолорға булышлыҡ итә.
- Урман тауышы (ағастар шаулауы, ҡоштар һайрауы) эмоциональ торошҡа ыңғай тәьҫир итә. Шулай уҡ урман шаулауын тыңлау нервылар эшмәкәрлеген яҡшырта, тонусты һәм кәйефте күтәрә.
- Кешенең баш мейеһе музыканы ике яҡ ярымшары менән бергә ҡабул итә: һул яғы - ритм өсөн, уң яғы - тембр һәм көйҙө үҙләштереү өсөн "яуаплы".
- Күңелгә ятышлы көйҙәр тыңлағанда пульс тибеше кәмей, ә йөрәк тибеше арта, ҡан тамырҙары киңәйеп, артериаль ҡан баҫымын нормалләштерә. Ә оҡшамаған көйҙө тыңлау ҡапма-ҡаршы һөҙөмтә бирә.
- Ҡоштар һайрауы менән дауалау ысулы ла бар. Ул - орнитотерапия тип атала. Ғалимдар дәлилләүенсә, ҡоштар һайрауын тыңлау кеше организмы эшмәкәрлегенең бөтә процесын да яйлау һәләтенә эйә. Был ваҡытта кешенең тәне һәм психикаһы гармониялаша.
- Әсә ҡарынындағы бала 14 аҙналыҡ сағында уҡ тауышты ишетеп һиҙә башлай. Йомшаҡ, наҙлы музыка уны тынысландыра, тиҙе - дәртләндерә һәм шәберәк ҡыбырларға мәжбүр итә.
- Етлекмәй тыуған балаға бишек йырын йырлағанда уның хәле тиҙерәк яҡшыра, ауырлыҡты шәберәк йыя.
- Тәбиғәт тауышы уйлау, фекерләү һәләтен тиҙләтә. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, тәбиғәт моно мейенең ижад, гениаллек өсөн яуап биргән өлөшөндәге күҙәнәктәрҙе әүҙемләштерә.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# УҢЫШЛЫ БУЛАЙЫҠ!

**Бөгөн күптәрҙә "уңыш" йәки "уңышлы кеше" тигән һүҙ һәм һүҙбәйләнеш аҡса, байлыҡ менән күҙаллана. Күрәһең, финанс бойондороҡһоҙлоҡ уңыштың бер өлөшөләр, әммә тулы мәғәнәһендә уңыш тигәндә аңлатмай. Уңыш матди төшөнсә генә түгел. Хәйер, һәр кем уны үҙенсә аңлай һәм үҙенсә баһалай. Шулай уҡ күп кеше һеҙҙе таный, белә икән, быны ла уңыш тип аңларға ярамай.**



Мин режиссерҙар әҙерләү курсәрында уҡығанда, остазыбыҙ даими рәүештә "Бөгөнгө алҡыштар иртәгә бер нәмә лә түгел", тип ҡабатлай торғайны. Кисә йондоҙ булдың, ә бөгөн кемһең? Кисә генә бейеклек яулағайның, бөгөн барыһын да яңынан башларға тура килә. Һәм был гәҙәти күренеш. Шуға күрә, эшләргә, ижад итергә, эҙләнергә кәрәк. Шәхсән минең өсөн уңышты билдәләүсе төп фактор - ул эшһөйәрлек, үҙеңде үҫтереү!

Быйыл беҙҙең "Һылыуҡай" студияһы ойошторолоуға - 15 йыл. Ошо ваҡыт эсендә бик күп халыҡ-ара конкурстарҙа еңеү яуланыҡ. Һәр бер таж йәки Беренсе һылыуҡай титулы артында күпме күҙ йәше һәм тир ятыуын үҙебеҙ генә беләбеҙ. Һәр конкурста ҡатнашыу - үҙеңдең шиктәреңде, комплекстарыңды еңеү, үҙ-үҙең менән көрәш ул. Ул - хеҙмәт. Бөгөн Ҡытайҙа, Пекиндың алдынғы модель агентлығында студиябыҙҙың игеҙәк ҡыҙҙары эшләй. Тау ҡарашҡа модель хеҙмәте ябай ғына һәм шуның өсөн күп аҡса түләйҙәр кеүек күренә. Улай түгел. Ҡыҙҙар сит илдәрҙән ойошҡан, етеҙ, үҙаллы булып ҡайта. Сөнки сит илдә, бигерәк тә Ҡытайҙа, үҙеңә һәлкәүлек, ялҡаулыҡ рөхсәт итергә һис ярамай. Модель хеҙмәтенең уңыштарының береһе - сәйәхәт итеү, үҙең өсөн яңы илдәр, яңы ғөрөф-ғәҙәттәр асыу мөмкинлеге. Ошо көндәрҙә беҙ Мәскәүҙә Халыҡ-ара милли костюмдар буйынса юғары мода конкурсында ҡатнашабыҙ. Унда республика дизайнерҙарының коллекцияларын күрһәтәбеҙ. Күп ҡыҙҙар Мәскәүҙе беренсе тапҡыр күрәсәк. Был да үҙенә күрә уңыш. Ләкин беҙҙең студияла шөғөлләнгән һәр ҡыҙ уңыштың ҙур хеҙмәт аша яуланғанын яҡшы белә. Уңышлы булайыҡ!

**Линара ТАҺИРОВА,**
**"Һылыуҡай-Bashkirian Beauty" студияһы директоры.**

АТЫҢ КЕМ?

# ҠЫЙЫУ ЕТӘКСЕ ҮҪТЕРӘБЕҘ



**Өфө ҡалаһында йәшәүсе Айгөл һәм Тәлгәт Шәриповтар Ирхан исемле тыңлаусан, аҡыллы ул үҫтерәләр.**

Ирхан тигән исем "ҡыйыу йөрәкле, батыр ир-егет" тигән мәғәнәне аңлата икән. Айгөл Рафаэль ҡыҙы әйтеүенсә, улына исемде улар бик оҙаҡ эҙләп, яҡындары менән кәңәшләшеп ҡушҡан. "Улыбыҙ ысын ир-егет булып үҫеүен, уның холҡонда етәксе сифаттарын күрергә теләнек. Әле Ирханға өс кенә йәш, киләсәктә ул аҡыллы, тәртипле, гүзәл һәм ысын кеше булып үҫһен, тигән теләктә ҡалабыҙ", - ти әсә. Әле Ирхан Өфө ҡалаһының 13-сө башҡорт башланғыс мәктәп - балалар баҡсаһында кескәйҙәр төркөмөндә шөғөлләнә. Киләсәктә ата-әсәһе бағлаған өмөттәрҙе аҡлап, башҡорт халҡының батыр улы булып үҫеп етеүен теләйбеҙ.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# БЕЛМӘГӘНЕ ЮҠ...

## Бохарҙағы таҙҙың

**Ҡуҙ-ҡара булыу, ҡолаҡ һалыу** - ҡараштырып тороу, тикшереү
**Тел сарлау** - бушҡа хәбәр һатыу
**Теш ҡайрау** - асыуланыу, үс алырға ниәтләнеү
**Теш ҡыҫыу** - ниндәй хәлгә лә түҙеү
**Тешкә ҡыҫытырыр нәмә юҡ** - үтә фәҡир, ас
**Ҡаҡһыған** - боҙолған, әсегән аҙыҡ
**Әтмәлләгән** - белгәненсә эшләгән
**Ул белмәгән аҙ, бохарҙағы таҙ** - күпте белеүсе
**Йөрәй урам ҡәүенләп** - буштан-буш хәбәр һатып йөрөүсе
**Лорҡолдаҡ** - үтә һимеҙ, йыуан кеше
**Ҡуҙенә йоко төйөлгән** - нык йоҡоһо килгән
**Һырпалана** - эргәнән китмәй урала
**Тумырайған, тумһайған** - йөҙө боҙолған, үсеккән
**Төңөләү** - өмөт өҙөү, онотоу
**Кин күтән** - үтә маҡтансыҡ, ауыҙында - һүҙ, ҡулында мал тормай, шапырына ғына
**Теше һирәк, ауыҙы ел ҡапҡа** - эсендә сер, ауыҙында һүҙ ятмай
**Гәйдүкәт** - иленән ситтә оҙаҡ йөрөүсе
**Болоҡһоу** - уйға батыу, хәсрәтләнеү

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯРЛЫ МЕНӘН БАРЛЫ...

## бер ергә һыйышмай

Ҡыҙ яҡшы ергә төшһә - ялпая, яман ергә төшһә - ҡартая.
**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Геройҙарға мохтаж ил бәхетһеҙ.
**(Бертольд Брехт).**

Һөйләшерлек кеше менән һөйләшмәһәң, кешене юғалтаһың. Ахмаҡ менән һөйләшһәң, һүҙҙәрҙе юғалтаһың. Аҡыл эйәһе кешеләрҙе лә, һүҙҙәрҙе лә юғалтмай.
**(Конфуций).**

Битараф булмағыҙ, битарафлыҡ кешенең күңеле өсөн бик аяныс.
**(М. Горький).**

Бер үҙеңә шатланыу - күңелһеҙ.
**(Лессинг).**

Һүҙҙәр япраҡтар кеүек. Күп япраҡлы ағастар гел генә әҙ емеш бирә.
**(А. Поуп).**

Бөтә бәхетле ғаиләләр бер-береһенә оҡшаш, һәр бәхетһеҙ ғаилә үҙенсә бәхетһеҙ.
**(Л. Толстой).**

Тәүге тапҡыр китапты уҡығанда, беҙ яңы дуҫ тапҡан кеүек үҙебеҙҙе хис итәбеҙ. Уҡылған китапты яңынан уҡыу - ул күптәнге дуҫты тағы күреү кеүек.
**(Вольтер).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер һаран ғына кеше ғүмере буйы эшләп-эшләп, өс йөҙ динар меңлек байлыҡ туплаған. Уның ерҙәре, короллары, башҡа байлыҡтары ла байтаҡ булған. Бер саҡ ул бөрөй йыл ял итеп, күңел асып алырға ҡарар итә. Аҡсаларын иҫәпләп кенә бөтөүе була, уның алдына Үлем фәрештәһе килеп баҫа. Кеше уны, ғүмеремде өҙмә, тип, төрлөсә өгөтләй башлай. Ләкин Фәрештә уны тыңларға теләмәй икән. Шунда кеше былай ти: "Һин миңә өс кенә көн бир, шунда мин һиңә бар байлығымдың өстән бер өлөшөн бирәм". Фәрештә ризалашмай. Шунан кеше былай тигән:**
**"Әгәр ҙә һин миңә ике генә көнгә ерҙә йәшәргә рөхсәт итһәң, мин һиңә ике мең динарымды бирәм". Ләкин Фәрештә уны тыңларға ла теләмәгән. Ул хатта кешенең, бер көн өсөн барлыҡ байлығымды бирәм, тигәненә лә риза булмаған. Шунда һаран кеше былай ти: "Үтенәм һинән, миңә бер нисә генә һүҙ яҙырға рөхсәт ит". Был юлы Үлем фәрештәһә уға бер аҙ ваҡыт бирә. Һәм кеше үҙ ҡаны менән былай тип яҙа: "Кешеләр, үҙ ғүмерегеҙҙе әрәм итмәгеҙ. Мин ғүмер буйы йыйған өс йөҙ мең динарға хатта бер генә сәғәт тә ғүмер һатып ала алманым..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 237/12